МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ
Федеральное государственное бюджетное образовательное
учреждение высшего образования
«Башкирский государственный педагогический университет
им. М. Акмуллы»

# Научные исследования молодых ученых в области филологии и педагогики

Сборник научных трудов

Уфа, 2021

УДК 80+37
ББК 80+74
Н 34

**Рецензенты:**

кафедра башкирского языка и литературы (БГПУ им. М. Акмуллы, г.Уфа); доктор филологических наук, профессор Г.Х. Бухарова (БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа); доктор филологических наук, профессор З.И. Саляхова (Стерлитамакский филиал БашГУ, г. Стерлитамак)

**Редакционная коллегия:**

Д.филол. н., профессор Хусаинова Л.М. (отв. редактор), к.филол.н., доцент Галина Г.Г. (отв. секретарь), к.пед.н., доцент Тагирова С.А., к.филол.н., доцент Р.А. Султакаева, ст. преподаватель Г.Ш. Давлеткулова

**Н** Научные исследования молодых ученых в области филологии и педагогики : Сборник научных трудов – Уфа: БГПУ им. М. Акмуллы, 2021. – 140 с.

Сборник включает как самостоятельные статьи начинающих исследователей, так и статьи в соавторстве с научными руководителями или коллегами по современным проблемам башкирского и тюркского языкознания, литературоведения, текстологии, фольклора, методики преподавания лингвистических дисциплин и литературы, педагогики.

Издание адресовано обучающимся, студентам, преподавателям, занимающимся исследовательской и проектной деятельностью.

© Коллектив авторов, 2021
© БГПУ им. М. Акмуллы, 2021

## СОДЕРЖАНИЕ

**Байзигитова Н.Р.** Семейно-брачные отношения в башкирском народном эпосе «Урал-батыр» и в китайском эпосе «Добром злу» ............................... 5
**Байназарова А.И.** Көньяҡ диалекттың эйек-һаҡмар һөйләшенең морфологик үҙенсәлектәре ..........................................................................8
**Байсурина И.А.** Рәмил Дәүләтҡолов шиғриәтендә лирик герой үҙенсәлектәре ..........................................................................11
**Биргалина А.Р.** Концепт «яҡшылыҡ» («добро») в повести Зайнаб Биишевой «Будем друзьями» .............................................................13
**Вәлиева Г.Р.** Зәйнәб Биишева ижадында фольклор традициялары сағылышы ..........................................................................17
**Галлямова В.В** Классификация сказок в исследовании сказочного дискурса..........................................................................21
**Гареева М.Б** Поздравления и благопожелания в башкирской и английской языковой картине мира...........................................................25
**Гейт М.В** Язык жестов как культурный феномен башкирского этноса .... 29
**Ғәйнуллина А.С.** Дәрестән тыш эшмәкәрлектә ИКТ компетенциялар формалаштырыу ..........................................................................32
**Ғәниева Г.З.** Ф. Ғәлимов трилогияһында дини-мифологик мотивтарының функциональ әһәмиәте ...................................................35
**Ғүмәрова В.Ю**. Башҡорт теленең ижтимағи-сәйәси лексикаһы өлгөһөндә уҡыусыларҙа тел компетенцияһы формалаштырыу ...............39
**Идрисов Ф.С.** Характеры в романе-эпопее «Буренушка» ......................... 43
**Илсебаева Т.Т.** Учалы районындағы Туңғатар ауылының килеп сығышы хаҡында ..........................................................................46
**Ишкина А.И.** Ноғман Мусиндың «Кеше һуҡмағы» әҫәрендә герой концепцияһы ..........................................................................48
**Иштуганова Л.Р.** О лексических средствах выражения эмоций в башкирском мифологическом эпосе...................................................54
**Йыһанова Н.Р.** Бөйөк Ватан Һуғышы йылдарында башҡорт поэзияһы 57
**Йәғәфәрова А.М.** Нажиә Игеҙйәнованың «Өйөрөлмәк» һәм «Мулла» хикәйәләрендә заман проблемалары .......................................................61
**Йәғәфәрова Г.Д.** Мифтахетдин Аҡмулла шиғырҙарында ғәрәп-фарсы һүҙҙәре ..........................................................................65
**Казбаев В.Р.** Башҡорт һәм инглиз теле дәрестәрендә ҡылым һөйкәлештәрен өйрәнеү ..........................................................................69
**Мукминова Ф.М** «Урал-батыр» эпосында башҡорт донъя тел картинаһы..........................................................................76

**Мухаметшина А.М.** Средства и способы выражения категории отрицания в башкирском и русском языках, и их сопоставительное изучение в учебном процессе....... 81
**Мөхәмәтғәлиева А.Д.** Мостай Кәрим прозаһында сифаттарҙың стилистик функциялары.......84
**Мырҙабулатова Э.Р.** Башҡорт телендә терминология фәненең формалашыу үҙенсәлектәре.......88
**Сагитова А.Р** Языковая модель мира в повести Мустая Карима «Радость нашего дома».......92
**Сырлыбаева Ф.Ф.** Мөнир Ҡунафиндың «Тәңре өрөк ҡапҡанда», «Кайнозой» хикәйәләрендә характер бирелеше.......95
**Сәхәүетдинов А.Ш.** Дистанцион белем алыу шарттарында һәм билингваль форматта музыка дәресе.......99
**Шарафитдинова Л.И.** Монгольские заимствования в башкирском языке.......102
**Шәрәфетдинова М.Н.** Мостай Кәримдең «Декабрь йыры» һәм «Үлмәҫбай» поэмаларында героик традицияларҙың сағылышы ......105
**Шәһиҙуллина М.М.** Мәрйәм Бураҡаеваның «Арғымаҡ» әҫәрендә этнопедагогика.......110
**Әминева З.В**. «Урал батыр» эпосында ҡатын-ҡыҙ образы.......112
**Әхмәҙеева Г.С.** Төрки тел ғилемендә фразеологизмдарҙың өйрәнелеү тарихы.......118
**Юлдашева Д.Ю** Ырымбур яҙыусыларының ижадында социаль проблемалар.......124
**Ягафарова Г.Д** Образ мудрого старца в эпосе «Урал-батыр.......127
**Яҡшимбәтова В.В.** Мөнир Ҡунафиндың «Тәңре өрөк ҡапҡанда» хикәйәһендә ғаилә ҡиммәттәренең сағылышы.......132
**Янбаева И.И.** Использование башкирского фольклора для экологического воспитания школьников на уроках башкирской литературы.......136

**УДК 398.22**

*Байзигитова Н.Р., магистрант 1 курса,*
*БГПУ им.М.Акмуллы, г.Уфа*

# СЕМЕЙНО-БРАЧНЫЕ ОТНОШЕНИЯ В БАШКИРСКОМ НАРОДНОМ ЭПОСЕ «УРАЛ-БАТЫР» И В КИТАЙСКОМ ЭПОСЕ «ДОБРОМ ЗЛУ»

В башкирских и китайских мифах описания древних форм брака, ранних семейных и свадебных обрядов стали основой народной культуры двух этносов.

Как известно, мифологические сказания башкир и китайцев в яркой и образной форме выражают народную философию, охватывая весь спектр представлений людей об окружающем мире, включая вечные вопросы жизни и смерти самого человека. Представления о браке, традиции и обычаи занимают важное место в мифологических сказаниях народов. Особенно ярко они представлены в китайском мифе «Добром злу» и в монументальном эпическом произведении башкир – эпосе «Урал батыр».

В башкирском архаическом эпосе такие значительные для жизни и судьбы человека явления, как мотив поиска невесты, создание семьи, рождение детей, происходят под влиянием небесных, космических сил. В период тенгрианства башкиры в своих обращениях-мольбах к верховному небесному богу Тенгри просили не лишать их способности к зачатию, а бездетные просили у него ребенка. Мифические существа также, как и люди, живут парами, создают семьи и рожают детей.

В эпосе «Урал-батыр» отразились отголоски архаичных мотивов брачных отношений. Старик, который в молодости испил воды из Живого источника и стал бессмертным, рассказал Урал-батыру о тех давних временах, когда дети не знали отцов, а отцы не знали детей. Следовательно, этот эпизод сохранил сведения о доисторическом периоде общества, когда каноны отцовства и материнства были очень слабыми. По мнению А.С. Мирбадалевой, «мотив многократной женитьбы является отражением древнейших форм брака периода патриархата, когда брачные отношения еще не были прочны и носили временный характер» [4: 36].

На первом плане сюжетной линии эпоса «Урал-батыр» стоит борьба эпических героев с темными силами, нечистью, угнетателями во имя бессмертия природы и счастья людей на земле. В период достижения этой основной цели семейные заботы отходят как бы на второй план. Но неожиданные встречи эпических героев с прекрасными девами, их женитьба тесно сплетены с общественно необходимыми событиями. В эпических сказаниях воспевается любовь между храбрым джигитом и невестой, а создание ими семьи и рождение сыновей-сподвижников является благом и счастьем для всего народа.

Китайский миф «Добром злу» – отражение семейно-брачных отношений, который складывался в Китае с древнейших времен. Миф является частью цикла мифов об императоре Шуне. В китайской мифологии император Шунь (2255 г. до н.э.) выступает как основоположник китайской этической культуры. Он учил моральным отношениям между людьми, таким как отношения между сыном и отцом, справедливости монарха, супружеской верности, почитанию старших и верности в дружбе. Это стало сущностью китайской этической культуры [3: 16].

В основе мифа – уважительное отношение к семье. Семья в китайской культуре – одна из высших ценностей. Поведение мифологического героя Шуня в китайском мифе свидетельствует не только о его добром сердце, но и уважении к семейным ценностям. У Шуня был слепой отец по имени Гу Су и мачеха, которая родила сына по имени Сян. Как и его родители, Сян был очень зол на Шуня. Отец очень любил Сяна и всегда искал возможность избавиться от Шуня. Но Шунь всегда приходил навестить родителей и продолжал заботиться о них всякий раз, когда они нуждались в нём. Он любил своего младшего брата. Зная, что вся семья хочет избавиться от него, он всё-таки был очень предан им и всегда готов помочь.

Башкирский эпос и китайский эпос во многом возвышают полигамность, в древние времена у китайцев не порицалось многоженство. Если Урал-батыр по пути завоеваний женится на разных девушках и таким образом оставляет потомство, то в мифе «Добром злу» у молодого Шуня уже есть несколько жен. В более ранние времена, да и на протяжении всей истории Китая, встречалась полигамия (многобрачие), которое распространялось довольно широко. Обычно мужчина женился лет в двадцать, девушка выходила

замуж в пятнадцать, безбрачие после тридцати для мужчин и для женщин за двадцать официально порицалось [1: 31].

Исследователи давно доказали типологическую общность мифологических сюжетов и эпосов разных народов, поэтому естественны сходства в сюжетах эпосов и мифов башкир и китайцев, неудивительно наличие близких параллелей в представлениях о семье. В нашем случае важно было рассматривать данную проблему на материале башкирского фольклора, точнее главного архаического народного эпоса «Урал-батыр» и китайской мифологии. Как пишет известный башкирский фольклорист Ф. А. Надршина: «в эпосе каждого народа сходные мотивы получают своеобразную интерпретацию, оформляются в контексте культурных традиций того или иного народа», а «созвучность образов и мотивов «Урал-батыра» с образами и мотивами мирового фольклора свидетельствует о том, что духовная культура предков башкир зародилась в глубокой древности и развивалась в русле общечеловеческой культуры» [5: 202].

В процессе сравнительного изучения было выявлено, что сходные мотивы в башкирской и китайской мифологии совпадают в традициях многоженства, представлениях о семье, как о высшей ценности. В рассмотренных выше эпических памятниках провозглашаются добро и справедливость, созидательный труд и мирное сосуществование разных племен.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Бичурин И. Общественная и частная жизнь китайцев // Всё о Китае. Т.1 // сост. Царева Г.И.– М.: Отпечатано в ООО ПФ «Полиграфист», 2002. – С. 442–517.
2. Бухарова Г.Х. Башкирский народный эпос «Урал-батыр»: когнитивно-дискурсивный и концептуальный анализ. – Уфа: БГПУ, 2008. – 174 с.
3. Дэвид Ву. Великая эпоха. – М.: АСТ, 2010. – 714 с.
4. Мирбадалева А.С. Текстология тюркоязычного эпоса. – М.: МГУ, 1995. – 295 с.
5. Надршина Ф.А. Великое творение народа II Урал батыр. Башҡорт халыҡ ҡобайыры = Урал-батыр. Башкирский народный эпос = Ural-baturI Bashkort Folk Epic. – 2-е изд., стер. – Уфа: Информреклама, 2005. – 705 с.

*©Байзигитова Н.Р., 2021*

**УДК 811.512.1**

*Байназарова А.И., 1-се курс магистранты*
*Ғилми етәксеһе: ф.филол.д., проф. Хөсәйенова Л.М.*
*М.Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

# КӨНЬЯҠ ДИАЛЕКТТЫҢ ЭЙЕК-ҺАҠМАР ҺӨЙЛӘШЕНЕҢ МОРФОЛОГИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Башҡорт теленең көньяҡ диалекты – телебеҙ төҙөлөшөнөң нигеҙен тәшкил итеүсе диалекттарҙың береһе. Беҙ уны туҡтауһыҙ өйрәнергә, был диалекттың башҡорт теленең грамматикаһына яһаған йоғонтоһон яһарға тейешбеҙ.

Башҡорт теле диалекттарының морфологик формаларын өйрәнеү тел ғилемендә актуаль проблема. Телебеҙ диалекттарының байлығы, әҙәби телгә индергән өлөшө ныҡлы өйрәнелгән. Әммә, һөйләштәрҙең грамматик төҙөлөшө, морфологик формаларҙың үҙенсәлеге һорауҙары асыҡ ҡала килә.

Көньяҡ диалекттың төп һөйләше булған эйек-һаҡмар һөйләшенә лә ҡағыла был мәсьәлә. Н.Х. Ишбулатов:М. Миржанова, Р.З. Шәкүр кеүек ғалимдарыбыҙ был һөйләштең составын, уның һүҙъяһалышын, грамматикаһын яҡшы өйрәнһәләр ҙә, унда йәшәп килеүсе байтаҡ морфологик формалар тағы ла ентеклерәк тикшереү кәрәк.

Урындағы һөйләшсәләрҙә төрлө морфологик формаларҙың йәшәп килеүе билдәле. Көньяҡ диалекттың эйек-һаҡмар һөйләше лә бындай формаларға бик бай. Мәҫәлән, диалекттарҙа башҡорт теленең байтаҡ килеш формалары барлығы билдәле. Төрлө һөйләшсәләрҙә уларҙы өйрәнеү әҙәби телебеҙ морфологияһы, килеш категорияһы буйынса байтаҡ мәғлүмәттәр тупларға ярҙам итә.

Хеҙмәтебеҙҙә теманың актуаллегенән сығып, көньяҡ диалекттың эйек-һаҡмар һөйләшенең Мәләүез һөйләшсәһенең морфологик формаларын өйрәнеү, уның килеш категорияһындағы үҙенсәлектәрен тикшереү бурысын ҡуйҙыҡ.

Эйек-һаҡмар һөйләше һүрәм, һаҡмар, эйек, юшатыр, нөгөш һ.б. зоналарға бүленә [1: 15–20; 2: 64–67; 4: 14–18]. Һөйләшсәләр бер-береһенән башлыса лексик үҙенсәлек, шулай уҡ *ҫ, һ* өндәренең ҡулланылышы менән айырылалар.

Мәләүез районы һөйләше ҡараған юшатыр һәм нөгөш һөйләшсәләре морфологияһында күплек ялғауының ике варианты

ҡулланылыу осраҡтары бар. Мәҫәлән, *эшләү – эштәү, ҡанатлар – ҡанаттар*. Һүҙ башында һәм уртаһында *ç* өнө, *с, h* өндәре менән сиратлаша: *çабыр (сабыр* урынына), *иçем (исем* урынына), *çуҡыр (һуҡыр* урынына), *йаçау (яһау* урынына). Шулай ҙа, Мәләүез районы һөйләше башҡа үҙенсәлектәре буйынса эйек-һаҡмар һөйләшенең күпселек үҙенсәлектәрен йөрөтә: *h* спиранты һүҙҙең барлыҡ позицияларында ла ҡулланыла: баһыу (баçыу) [4: 14].

Мәләүез районы һөйләшсәһенә хас килеш формаларының морфологик үҙенсәлектәрен өйрәнәйек.

Был һөйләштә башҡорт телендәге традицион килеш формаларын айырып тороусы үҙенсәлек бар. Мәләүез районы һөйләшсәһендә килеш ялғауҙарында һәм эйәлектең 2-се затында *ң* өнө урынына *н* өнөн ҡулланыу бар. Миçалдар: *улынын (улының урынына), әсән (әсәйең урынына), атан (атайың урынына),һинә (һиңә урынына), минә (миңә урынына).*

Йәнле һөйләштән миçалдар: Бик ҡыҙыҡ була инде. Самауыр артынан самауыр, йетеп булмай, ти. *Әсән* барып баһҡас ней! (Мәләүез районы, Арыçлан ауылы һөйләшсәһенән).

Айырым осраҡта, эйәлек килеш ялғауында, әҙәби телдәге *-дың, -ҙың, -ның, -тың* формалары менән бергә, һөйләштә ялғау аҙағында *-н* өнө ҡулланыла: *Йете һыуҙын буйына йете ырыу башҡорттары утырган; Нөгөшнен аръягы – һыуын ҡыпсагы* (һүрәм һөйләше.); *Апайымдын тамагы тәмне – Апайымдың ашы тәмле* [1: 25].

Мәләүез районы һөйләшендә ҡайһы бер осраҡтарҙа күрһәтеү алмашының төбәү килеше *-ныңа* ялғауы менән белдерелә: *мыныңа,* әҙәби телдә: *быға; аныңа,* әҙәби телдә – *уға; ошоноңа*, әҙәби телдә – *ошоға; шуныңа,* әҙәби телдә – *шуға; тегенеңә,* әҙәби телдә – *тегегә.* Н.Х. Ишбулатов билдәләүенсә, *-ныңа* боронғо төрки телдәге эйәлек һәм төбәү килеш ялғауҙары кушылып барлыҡҡа килгән: *мыныңа<бунинға,аныңа<онинға.* Боронғо төрки телдә зат һәм күрһәтеү алмаштары билдәлелекте белдергәнгәлер, ялғауҙарын эйәлек килеш ялғауының өçтөнә ҡабул итер булған [2: 69].

Мәләүез районы йәнле һөйләү теленән миçалдар: Айыу миңә ҡабрый тора, үҙе миңә ошолай ҡарап тора. Мылтыҡ йауырынта. Айыуҙы мин аны, ҡуҙғалыр тип уйламайым та. Йауырынтан мылтыҡты алтым да ат та йебәр мин *тегенеңә,* башына ғарап, ошолай ҡарап тора ине миңә (Мәләүез районы, Томансы ауылы һөйләшсәһенән).

Килеш ялғауҙарының Мәләүез районы һөйләшсәһенә хас лексик исем берәмектәргә түбәндәгесә ҡушыла:

| | | |
|---|---|---|
| Төп килеш | һуҫар, кәтелүк | Кем? Нимә? |
| Эйәлек килеш | һуҫарҙың, кәтелүктең | |
| Төбәү килеш | һуҫарға, кәтелүккә | |
| Төшөм килеш | һуҫарҙы, кәтелүкте | |
| Урын-ваҡыт килеш | һуҫарҙа, кәтелүктә | |
| Сығанаҡ килеш | һуҫарҙан, кәтелүктән | |

Мәләүез районы һөйләшенә хас һүҙҙәрҙең килеш менән үҙгәреше әҙәби телгә яҡын. Был осраҡта, морфологик категория менән үҙгәреш фонетик яҡтан ғына күҙәтелә.

Тимәк, эйек-һаҡмар һөйләше көньяҡ диалект составындағы иң ҙур һәм халыҡ телендә киң таралған һөйләштәрҙең береһе. Беҙ өйрәнгән Мәләүез районы һөйләшендә эйек-һаҡмар һөйләшенең төрлө грамматик үҙенсәлектәре сағыла. Уны килеш категорияһының морфологик үҙенсәлектәре миҫалында өйрәнеп, әҙәби тел менән байтаҡ айырмалар булыуын күрҙек. Мәҫәлән, нөгөш, юшатыр зонаһына ҡараған Мәләүез районы һөйләшендә эйәлек заты формалары төрлө фонетик формалағы ялғауҙарға эйә. Күпселек осраҡта, эйәлек килеш ялғауҙарында *ң* өнө урынына н өнөн кулланыу хас. Башҡа осраҡта, килеш формалары әҙәби телгә яҡын һәм башҡорт телендә алты килеше ялғауҙарын шул уҡ формала ҡабул итә һәм төп морфологик нормаларға тап килә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Ишбулатов Н.Х. Башҡорт теле һәм уның диалекттары. – Өфө: Китап, 2000. – 252 бит.
2. Миржанова С.Ф. Южный диалект башкирского языка. – М.: Наука, 1978. – 275 с.
3. Псянчин Ю.В. Стилистика имени существительного башкирского языка: категория падежа. – Уфа: Гилем, 2000.– 164 с.
4. Шәкүр Р. Башҡорт диалектологияһы: уҡыу ҡулланмаһы. – Өфө: Китап, 2012. – 240 бит.



*©Байназарова А.И., Хөсәйенова Л.М., 2021*

**УДК 82-1/29**

*Байсурина И.А., 2-се курс магистранты*
*БДУ, Өфө к.*

# РӘМИЛ ДӘҮЛӘТҠОЛОВ ШИҒРИӘТЕНДӘ ЛИРИК ГЕРОЙ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Рәмил Дәүләтҡолов халыҡтың, тыуған ерҙең шатлыҡ-ҡыуаныстарын, аһ-зарҙарын үҙ йөрәге аша үткәреп, өҙгөләнеп йәшәгән һәм ижад иткән әҙип. Уның лирик геройы күңел, хистәр донъяһы мең төҫтәр менән балҡыған «затлы келәм» түгел, ә һәр төҫтә йәйғор шикелле балҡытып, уҡыусының ҡараштарын яулап ала.

Шағир үҙе тыуҙырған геройҙары менән уҡыусының күңеленә үтеп инә. Уның геройҙары – тормоштоң үҙенән яралған. Нәк ошо хәл Рәмил Дәүләтҡолов поэзияһына тормошсанлыҡ, халыҡсанлыҡ рухы алып килә. Ә лирик герой иһә шуларҙың һәммәһен күҙенән һәм күңеленән үткәреүсе. «Шағирҙың тормош юлы – шиғырҙарында» тигән хәҡиҡәт уның ижадында бигерәк тә ярылып ята.

«Тыуған яҡ – ул шағирҙың тыуған төйәге, уның тыуып-үҫкән ауылы, мәғрүр Урал, бер осраҡта бөтә Башҡортостан, йә Рәсәй булып һынлана.

Шуға ла хәҙерге башҡорт шиғриәте тыуған төйәк, ғәзиз Урал, атайсал һ.б. шундай ҡәҙерле урындарҙы поэтиклаштырғанда уны киңерәк офоҡтар аша күҙәтә һәм әҫәрҙәрҙә «Кескәй Ватан» «Оло Ватанға» үрелә». Мәҫәлән, шағир былай ти:

*Ҡарашымды уҡтай төбәнем дә*
*Ҡап уртаға ярҙым офоҡто.*
*Атылып та сыҡкан таң нурҙары*
*Биттәремә килеп һуҡлыҡты.*
*Ҡояш тыуҙы…*
*Урал алды менән*
*Тоташтырып Урал аръяғын.*
*Таған таштың осо күренгәйне,*
*Яҡтырып та китте як-яғым.*

Рәмил Дәүләтҡолов үҙе лә, уның лирик геройы ла тыуған төйәгенә, тыуған еренә йөрәгенең бөтә тамырҙары менән барып тоташҡан.

«Сиҙәмем» тигән шиғыр ошо фекерҙе раҫлай:

*Сит ерҙәрҙә ҡайғы-һағыштарҙан*
*Ҡаңғырғанда яңғыҙ, Сиҙәмем!*
*Иҫкә төшәң, һулышыңды һинең*
*Ете диңгеҙ аша һиҙәмен.*

Тыуған ер Рәмил Дәүләтҡолов ижадында меҢ төрлө төҫ-сифаттарҙа һынлана, ул шағирҙы берсә шатландыра, берсә моңландыра. Тыуған яҡ моңо уға йәшәргә, ижад итергә илһам бирә. Ул – тыуған еребеҙгә, халҡыбыҙға, уның йолаларына, рухи ҡомартҡыларына һоҡланып йәшәгән шағир. Шул уҡ ваҡытта, ул ошо ғәзиз төшөнсәләрҙе юғалтыу ҡурҡыныһынан да һыҙланып йәшәй:

*Сал далала армыт-армыт тауҙар –*
*Төйәк кенә ере башҡорттоң.*
*Төн йоҡомдо бүлеп уяттың да*
*Йөрәгемде ниңә ярһыттың?*
*Ашҡынһам да, аҙаҡ йөрөй алмам,*
*(Үкенермен үҙем һуңынан)*
*Форсат тейгән саҡта үтәйемсе*
*Атайҙарҙың данлы юлынан.*
*...Уйһыу ғына ерҙең ҡол-таштарын*
*Уя баҫып елә Аҡбуҙат.*
*Ярһыу хистәремде тыя алмай,*
*Дәртләнеп тә китеп йыр һуҙам:*
*«Ай, тау ғына якшы, тау якшы,*
*Тау яғалап үткән юл якшы,*
*Алтын менән көмөш сыккан ерҙән*
*Тыуып ҡына үҫкән ил якшы...»*

Ошо шиғыр юлдарында тыуған яҡҡа мөхәббәт тойғоһо, уға нисек итеп илһам көсө биргәне ярылып ята.

Шағир үҙенең тыуған яғы менән бәйле бөтә нимәне лә һағына: ауылын, тауҙарын, далаһын, йылға-күлдәрен.

Бары тик улар уға йәшәргә өмөт, дәрт бирә, ҡайғы-хәсрәттәрен юҡ итә:

*Күҙҙәремә тағы салынғайны*
*Таҡыр башлы ҡала тауҙарым,*
*Йөрәгемдән сыйпалып уҡ китте*
*Сит ерҙәрҙә йыйылған аһ-зарым...*
*Күҙ йәшемдең, беләм тормағанын*
*Еркәйемдең бөртөк саңына.*

*Таш ҡалала толҡа таба алмай*
*Әйләнәм дә ҡайтам яңынан.*

Ошо өҙөктәрҙән Рәмил Дәүләтҡоловтоң бөтә булған шатлыҡтары бары тик Тыуған ил менән бәйле икәнен, уның йылылығын тәрәндән тойоп, уның менән бер булып йәшәгәнлеген яҡшы аңлайһың.

Рәмил Дәүләтҡолов ысынбарлыҡ нисек бар, уны шулай күрһәтергә тырыша. Донъяның ауырлыҡтарын, илдең фажиғәле яҙмышын йәшермәй, сөнки халыҡ яҙмышы, ил яҙмышы – уның да яҙмышы. Ғәҙелһеҙлек – уның ҡан дошманы. Ул Тыуған иленең ысын гражданины, уҡыусыларҙы уйланырға мәжбүр итә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Байымов Р.Н., Гәрәева Г.Н., Мостафина Р.Д., Шәрипова З.Я. Егерменсе быуат башҡорт әҙәбиәте. – Өфө, 2003. – 575 бит.
2. Балҡыштар. Шиғриәт. – Өфө: Китап, 2004. – 560 бит.
3. Башҡорт шиғриәте антологияһы. – Өфө: Китап, 2001.
4. Бикбаев Р. Замандың шиғри йылъяҙмаһы (Хәҙерге башҡорт поэзияһының үҫеү проблемалары). – Өфө: Башҡ.китап нәшр., 1980. – 272 бит.


*©Байсурина И.А., 2021*

**УДК 811.512.141**

*Биргалина А.Р., магистрант II курса,*
*Научный руководитель: Султакаева Р.А.,*
*к.филол.н., доцент БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

## КОНЦЕПТ «ЯҠШЫЛЫҠ» («ДОБРО») В ПОВЕСТИ ЗАЙНАБ БИИШЕВОЙ «БУДЕМ ДРУЗЬЯМИ»

В современной башкирской лингвистической науке существует ряд актуальных проблем. В частности, в аспекте языковой картины мира кроется одна из наиболее актуальных проблем филологии – «Родной язык и национальная культура». Вопрос о соотношении родного языка и национальной культуры рассматривается как объект лингвокультурологии, понимаемой как более широкое изучение «содержания» культуры определенного этноса, раскрываемое в

словах, ритуалах, символах и дающее системное описание языковой картины мира. В языке отражаются не только логические категории и результаты познания, но и менталитет этноса. Основным понятием лингвокультурологии является так называемый концепт или константа, выражающие основные признаки ментальности народа через его язык.

Башкирская языковая картина мира состоит из множества концептов, среди которых базисные ключевые слова являются отражением не только общечеловеческих ценностей, но и национально-культурных особенностей народа.

Именно в культурных концептах выражается картина мира башкир – система наиболее общих миропредставлений носителей данного языка. Язык в наибольшей степени выражает этнические особенности восприятия действительности. Исследование культурных концептов башкирской языковой картины мира способствует выявлению этнических особенностей стиля мышления башкир как образа культуры, являющегося одним из аспектов духовной культуры.

Основу культурных концептов составляют этические концепты. Этические концепты – суть описания человеческих грехов и добродетелей [3: 107].

Этические концепты объединяют в себя физический и духовный уровень индивида и этноса в целом, складываясь в специфически национальную структуру, отражающую фундаментальные черты башкирской народной культуры. Среди этических концептов башкирской лингвокультуры одним из основных является «яҡшылыҡ» («добро»).

Словесное описание концепта «яҡшылыҡ» происходит посредством лексем «дөрөҫлөк» (*правда*), «хаҡлыҡ» (*истина*), «ғәҙеллек» (*справедливость*), которые являются характеристикой ценностных ориентиров. В повести З. Биишевой «Будем друзьями» эти понятия вербализуются в речи главных героев, например: *Юлдаш, өләсәһе менән атаһынан ишетеп, үҙенә девиз итеп алған һүҙҙәрҙе иҫенә төшөрҙө лә, ҡапыл етди, уйсан төҫ алып:*

*– Иң шәп, ин,* ***яҡшы нәмә ул, Ҡыҙырас, дуҫлыҡ, тырышлыҡ, ғәҙеллек, дөрөҫлөк****, – тине. – Шунан? – тип аптыраны Ҡыҙырас* [1: 101].

В центре концептуального пространства национальной картины мира находится человек, а над антропоцентрически ориентированным

пространством располагается бинарная оппозиция «добро-зло». По обыкновению, добро созидает, а зло разрушает. «Яҡшылыҡ» несет на себе позитивную коннотацию и отражает положительные качества человека, например:

*– Нисек, нисек?! – тип ҡысҡырып ук ебәрҙе. Ғәбит ағай, тыныс ҡына итеп:*

*– **Ни өсөн һин насар? Ни өсөн ул яҡшы?** Һин ипләп кенә һөйләп бир инде, йәме? Юҡһа мин бер ни ҙә аңламайым, – тине* [1: 112]. *Бөгөн ул, бында килгәс, Ҡыҙыраҫҡа ҡарап, хатта өләсәһенең кем тураһындалыр бер ваҡыт **«яҡшынан яман тыуған»** тип әйткән һүҙен хәтерләп тә ҡуйҙы* [1: 60].

Ядром концепта «добро» является одноименная лексема, которая выражена в следующих значениях:

1. Доброе отношение, пожелание, обращение: *Ул Ҡыҙырасты бик нык шатландырырға тейешле булған был ваҡиға уңайы менән дуҫының һуңғы ваҡытта үҙенә ҡарата һалкынайыңҡыраған мөнәсәбәтен **яҡшыртып ҡалырға** тырыша ине* [1: 101].

*– Мин һиңә нимә тим? Үҙ урыныма һине ҡымыҙ оҫтаһы итеп әҙерләгем килә тим түгелме? Ә? Ниңә **яҡшы һүҙҙе** аңламайһың?* [1: 89].

2. Воплощение «всего положительного, светлого»: *Сөнки ул, Юлдаш Ҡыҙыраҫка **яҡшы йоғонто** яһай алыр, тип ышана ине* [1: 101].

3. «Добро» как степень качества обьектно-предметной картины мира: *Уларҙың **дегеттәренең яҡшылығы** хаҡында һөйләп тә тораһы юҡ* [1: 87].

4. В башкирской национальной картине мира добро, как этическое понятие, связано с нравственными качествами человека – трудолюбием и успешностью. Например:

*– Йә, ярар, – тип өмөтһөҙ рәүештә ҡул һелтәне лә, – бер уйлаһаң, ниндәй эште яратып, **урынына еткереп эшләһәң, шул яҡшы инде**. Яратҡас, әйҙә, эшләй бир, – тине* [1: 38].

Успешность, достижение успеха, знание, целенаправленность в национальной картине мира повести ассоциируются с добром, светлой стороной. Такую семантическую суть вербализует устойчивое словосочетание «яҡшы белеү»: *Ҡыҙырастың һәйбәт ултырыуынан күңеле булған уҡытыусы бөгөн уның дәресте **яҡшы белеүенә** лә шикләнмәй ине* [1: 65]. *Тырышканда, ул үҙенең тарих*

*дәресен дә, ботаниканы ла* ***яҡшы беләсәгенә****, башҡалар кеүек үк һөйләп бирә аласағына төшөндө* [1: 110].

Специфическим с позиции традиционных синонимических отношений является наличие в национальной картине мира таких оборотов: «яҡшы күңелле», «яҡшы кәйефле» в качестве аналога понятия добра в значении «чувства-состояния», синонимичного слову «бәхетле» (счастливый): *Уның кәйефе бик* ***яҡшы, күңеле шат****. Уның ҒШЭ тураһындағы уйы барып сыҡмаһа ла, Юлдаш алдында маҡтанып алырға икенсе бер сәбәп сығып тора* [1: 101]. *Ҡыҙырастың кәйефе хәҙер* ***ғәжәп яҡшы****, бөгөнгө сәйәхәттән ул бик риза ине* [1: 11].

Еще более своеобразным смысловым оттенком понятия добра, с нашей точки зрения, в языке повести «Будем друзьями» является семантика «радость». Значение радости в языке произведения значительно шире, оно вербализуется через фразеологизм «шатлыҡтан йөрәге ат кеүек тулау» (сердце сколыхнулось как бешеная лошадь), сформулированного с компонентом «яҡшы»: *Ул, тамағын ҡыра биреп, оҙон сәстәрен артҡа ташлап һыйпап алды ла асыуҙан, аптырауҙан* ***яҡшы ат кеүек тулаған*** *йөрәген баҫырға, баҫалҡы, ышанысլы һөйләргә тырышып:*

*– Йә, был ни эш булды инде? Быға һеҙ нисек ҡарайһығыҙ, пионерҙар? – тип һораны* [1: 85].

Анализ семантической зоны концепта «яҡшылыҡ» в картине мира повести З. Биишевой «Будем друзьями» позволяет нам прийти к следующему выводу: ядро содержания концепта «яҡшылыҡ» связанное со всем положительным и хорошим, светлым, нравственным почти не меняется, а периферийное содержание в языковой картине мира, учитывая реалии повествования, развивалось и расширялось.

Таким образом, мы наблюдаем семантические процессы в содержании концепта и их отражение в языковой репрезентации, представленной различными толкованиями (лексическими значениями). Так, например, концепт «яҡшылыҡ» в представленном произведении является выразителем «трудолюбия» (яҡшы эшләү), «знания» (яҡшы белеү). Эмоциональная структура концепта связана с концептуальными значениями «ҡыуаныу, шат булыу» (радоваться, быть радостным), «яҡшы күңел», «яҡшы кәйеф». Эта эволюция связана с изменениями в языковом сознании и нашла отражение в его

языковой картине мира, в культурных представлениях о добре как важнейшем морально-нравственном ориентире в духовной жизни.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Биишева З. Дуҫ булайыҡ. – Өфө: Китап, 2008. – 340 бит.
2. Маслова В.А. Лингвокультурология: учебн. пособ. для студентов высших учебных заведений. 2-е изд., стереотип.– М.: Академия, 2004.– 208 с.
3. Самситова Л.Х. Культурные концепты как отражение башкирской языковой картины мира (на материале стихотворений М. Акмуллы) // Вестник Челябинского государственного университета. – 2008. – Вып. 20. – С. 106–113.
4. Сәмситова Л.Х. һ.б. Башҡорт фольклоры концептосфераһы. Лингвокультурологик һүҙлек. – Өфө: Китап, 2013.– 492 бит.
5. Самситова Л.Х. Культурные концепты в башкирской языковой картине мира: Монография / Под ред. профессора М.В. Зайнуллина. – Уфа: БГПУ, 2014. – 364 с.

*© Биргалина А.Р., Султакаева Р.А., 2021*

**УДК 82**

*Вәлиева Г.Р., 5-се курс студенты*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## ЗӘЙНӘБ БИИШЕВА ИЖАДЫНДА ФОЛЬКЛОР ТРАДИЦИЯЛАРЫ САҒЫЛЫШЫ

XX быуат башҡорт әҙәбиәте борондан һаҡланып килгән традицияларға бай. Был осор әҙәбиәтендә фольклор традицияларының үҙенсәлекле ҡулланылыуы күҙәтелә. Бында әҙиптең ижади һәләте менән бергә, уның фольклор традицияларын үҙ маҡсатынан сығып файҙаланыуы ла әһәмиәткә эйә. Асылда, әҙәби ижад менән фольклор үҙенсәлектәре тығыҙ бәйләнештә булып, автор ниәтен бойомға ашырыуға хеҙмәт итә. Мәҡәлдәр һәм тапҡыр һүҙҙәр әҫәрҙең поэтикаһын байытып, уның телен йәнләндереүгә, биҙәүгә килтерә. Яҙыусылар үҙҙәре лә ябай халыҡ ҡатламынан сыҡҡанлыҡтан, халыҡ ижадынан һут, йәм һәм тәм алып, аңһыҙ һәм

аңлы рәүештә уны ижадтарында оҫта һәм еңел файҙаланған, әҫәрҙәренең сюжеттарына урынлы индереп ебәргән. Быларҙың барыһы ла тормошто бөтә ысынбарлығында һүрәтләүҙә уңышлы алым булып хеҙмәт итә.

Башҡорт әҙәбиәтендә фольклор традицияларын филология фәндәре докторы, профессор Хисаметдинова Фирдәүес Ғилметдин ҡыҙы һәм фольклорсы Хөббөтдинова Нәркәс Әхмәт ҡыҙы өйрәнгәндәр.

Фольклор традицияларын ҡулланып яҙған әҙиптәрҙең береһе булып Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Зәйнәб Биишева әҙәбиәтебеҙҙең төп нигеҙен билдәләй.

Зәйнәб Биишева әҫәрҙәренең теле халыҡсан, ул шуның менән уҡыусыларының күңелен арбай. Уның әҫәрҙәрендә халыҡ педагогикаһы, тәрбиә, философик-яҡты ҡараш ярылып ята һәм ул ғына түгел, һәм тағы ла фольклор, мәҙәниәт, сәнғәт, ауыҙ-тел ижады уның трилогия, әҫәр, хикийәләрен һ.б. биҙәй.

Ғилми эшебеҙҙә шәхесебеҙҙең ижадында төп урындарҙы биләп торған фольклор традициялар сағылышын тикшерәбеҙ.

Зәйнәб Биишеваның фольклор традицияларға иң бай әҫәре булып «Яҡтыға» трилогияһы тора. Әҫәрҙә ниндәй халыҡ ижады жанрҙары ҡулланылғанлығы хаҡында мәғлүмәт биреп үтәйек.

«Кәмһетелгәндәр» романында афористик ижад төрҙәре актив ҡулланыла. Әйтәйек, мәҡәлдәр ябай диалогтарҙа бик оҫта, урынлы бирелгән. «Түҙгән – түш ейәр», «Иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта», «Үҙе тапҡан мал түгел – кешенеке йәл түгел». «Мәҡәлле һүҙ – аҡыллы һүҙ», «Йөҙ күрке – һаҡал, һүҙ күрке – мәҡәл» тигән мәҡәлдәрҙәгесә, автор үҙ романында был тапҡыр һүҙҙәрҙе күп ҡуллана һәм шуның менән әҫәрҙең бай яңғырашлы, тәрән мәғәнәле булыуына ирешә. Шулай уҡ, халыҡ ижадының бер төрө – йомаҡтарҙы ла осратырға мөмкин. Мәҫәлән, «Китеп бара – юлы юҡ, һоҫоп алдым – урыны юҡ!», «Өй ҡыйығында ярты икмәгем ята», «Өй түбәһендә алама юрғаным ята», «Оҙон-оҙон өс ҡалаҡ, осона-башына кем сығыр? Сыбар ала көйгәнәк йомортҡаһын кем табыр?» тигән йомаҡтар әйтешәләр ҡыҙҙар аулаҡ өйҙә ҡалғас. Был күренеш уҡыусыға шул заман атмосфераһын тойорға мөмкинселек бирә, зирәклек, отҡорлоҡ тәрбиәләй.

Шулай уҡ, романда йолалар ҙур урынды алған. Мәҫәлән, «Гөлбәҙәр» драматик поэмаһында туй йолаһы ярылып ята. Йәш киленгә еңгәләре әйткән һамаҡ асыҡ итеп һүрәтләнә.

Һүҙсән булма, тыңлаусан бул.

Эшлекле бул киленсәк.
Күҙсән булма, оялсан бул,
Әҙәпле бул киленсәк.
Күп йоҡлама, күп ашама,
Егәрле бул киленсәк.
Иргә олтораҡ, ҡәйнәңә ҡол
Булыу кәрәк, киленсәк.

Булма осҡор, һөйләнсәк [4: 163]. Был һамаҡта тәрбиәүи маҡсат асыҡ сағылыш таба. Киленде дөрөҫ юлдан барырға, барған ерендә таштай-ҡомдай батырға, ғүмерлек йәр булып ҡалырға, уңған булып китеренә ишара яһай.

«Кәмһетелгәндәр» романында Аулаҡ өй йолаһын күрһәткән күренеш бирелгән. Борон ҡыҙҙар ҡул эштәрен аулаҡ өйҙә, кис ултырғанда ыратҡан. Ул йола XIX быуат аҙағында – XX быуат башында киң таралған. Был ғөрөф-ғәҙәт буйынса хужалар өйҙә булмаған йортҡа, уйындар уйнау, ҡул эштәре эшләү маҡсатында, йәштәр йыйылып ултырыр булған. Романда ҡыҙҙар Емештәргә йыйылалар. Үҙҙәренә иркенләп күңел асыу мөмкинлеге тыуыуға ҡыуанып уйнайҙар, йүгерәләр, бейейҙәр. Әҫәрҙә халыҡ уйындары күп тасуирлана. «Йөҙөк йәшереш», «Айыу бабай», «Хан һәм вәзир», «Осто,осто!», «Түңәрәк уйын» халыҡ уйындары тураһында мәғлүмәт бирелә. «Емеш, ҡырҡа боролоп, ҡарашын икенсе яҡҡа күсерҙе. Түңәрәк уйын дауам итте. (Кәмһетелгәндәр). Түңәрәк яһап, тыпырлап бейейҙәр [3: 59]. Был юлдарҙа уҡыусы боронғо замандарҙа түңәрәк яһап бейеүҙәре хаҡында мәғлүмәт ала. Тимәк, түңәрәкләп бейеү башҡорт халҡында элек-электән булғанлығы мәғлүм.

Зәйнәб Абдулла ҡыҙы Биишева ижадында халыҡ педагогикаһы ҙур роль уйнай. Мәҫәлән, «Алла, бисмилла... Яраби, биргәнеңә шөкөр, – тип тыныс ҡына ҡабатланы ла урынына ауҙы. (Кәмһетелгәндәр) Был юлдар кешене сабыр булырға, булғанына шөкөр итеп, донъяның ҡәҙерен белеп йәшәргә өйрәтә. «Яҡшылыҡты эшлә лә диңгеҙгә ырғыт, халыҡ белер. Халыҡ белмәһә – балыҡ белер», «Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкмәй» тигән мәҡәлдәр Һөнәрсегә арнап әйтелә. (Һөнәрсек менән Өйрәнсек). Шулай ҙа әҫәрҙе уҡыусыға аҡыл-кәңәш биреү, өгөт-нәсихәт биреү өсөн дә әйтелә, тәрбиәүи маҡсат күҙ уңында тотола.

Борон-борондан башҡорт халыҡ ижадының иң таралған жанры – йыр Зәйнәб Биишеваның әҫәрҙәрендә ҙур урын алып тора. Йыр әҙипкә халыҡ образын тыуҙырырға булышлыҡ итә. Яҙыусының үҙенә лә бала саҡтан уҡ

юлдаш була, сөнки был жанр уға халыҡтың героик үткәне, батырлығы, ҡаһарманлығы, көндәлек хеҙмәте, һөйөү шатлығы һәм айырылышыу ғазаптары тураһында һөйләй. Мәҫәлән, «Эй-й «Ерән ҡашҡа»ны бигерәк һәйбәт йырлай бит ул», тип ярһып уйланы Емеш тә. Ләкин Байрас бөгөн «Ерән ҡашҡа»ны түгел, ә «Шәүрәкәй»ҙе йырланы.

Шәүрә килен кейгән еләненең,
Итәк осҡайҙары мунсаҡлы.
Айға ла ғына көнгә тиңләмәйем,
Һылыулығың, Шәүрәм, шул саҡлы [3: 236]. Был жанр башҡорт халҡының бай рухи мираҫын күрһәтә, әҫәрҙең уҡыусы тарафынан ҡабул ителеүен еңеләйтә. Йырҙар менән тарих бер рәттән үрелеп килгән өҙөктәренә лә күҙ уңында тотор кәрәк. Мәҫәлән, Бер саҡ Уралда, Ирәндек буйында, Азамат атлы бик ғәйәр батыр йәшәгән. Илгә именлек, халыҡҡа ирек даулап бик батыр һуғышҡан. Ҡурайсылар, йырсылар уны данлап йыр сығарған. Ул йырҙы «Азамат» көйө тип атағандар. Ирәндек буйы башҡорттарында был йыр бер телдән дә төшмәй йырланып йөрөй тиҙәр, – тип тағы бер тарих һөйләп алды. Ошо рәүешле автор әҫәренә йыш ҡына халыҡ ижады ынйыһы булған йырҙарҙы һәм уларҙың легендаларын ҡушып ебәрә. Был интертекстуаль алым әҫәрҙең стилен байыта, тәрән мәғәнәле, уҡымлы итә, уның тәрбиәүи әһәмиәтен көсәйтә.

Шулай итеп, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева ябай һөйләү тәғәйенләнешендә, персонаждар телмәрендә мәҡәл, халыҡ йырҙары, әйтемдәр, йомаҡтарҙы һ.б. урынлы ҡулланыу юлдарын төплө белеп, туған тел нескәлектәрен асыҡ тойоп, улар менән оҫта эш итә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Дегтяров Т.А. Выразительная сила слова // Язык и стиль. – М.,1965. – С. 62
2. Кейекбаев Ж.Ғ. Ғилми хеҙмәттәр һәм һайланма әҫәрҙәр йыйынтығы. II том. – Өфө, 2014.
3. Биишева З.А. Кәмһетелгәндәр. Роман. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. – 432 бит.
4. Биишева З.А. Һайланма әҫәрҙәр. Ике томда. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1969. – 284 бит.


*© Вәлиева Г.Р., 2021*

**УДК 398.21**

*Галлямова В.В., студент*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

# КЛАССИФИКАЦИЯ СКАЗОК В ИССЛЕДОВАНИИ СКАЗОЧНОГО ДИСКУРСА

Фольклор считается феноменом духовной культуры социума. Общее значение «фольклор – народное творчество; система народных обрядовых действий» [4: 2146]. Содержание фольклора – способы формирования связи с окружающим миром и является одним из компонентов в воздействии на действительность и также способом ее познания. Это особый культурный феномен со специфическими свойствами, основанные на способности индивидуума создавать, функционировать, хранить, обучать, передавать, воспринимать, осмысливать информацию, получаемую из окружающего мира.

Особенно изученный жанр фольклора – сказка, которая сформировала самостоятельный вид дискурса – сказочный. Само понятие «дискурс» в современной лингвистике обусловливает обоснованность появления сказочного дискурса.

По Красных В.В. «дискурс» (от лат. discursus – беседа, круговорот, разговор, движение) является многозначным термином. Он представляет собой вербализованную речемыслительную деятельность, общность процесса и результата, которая обладает лингвистическими и экстралингвистическими планами [2: 15]. Так, лингвистика рассматривает термин «дискурс» как процесс и результат.

Кубрякова Е.С. в труде «Язык и знание» приводит семь формулировок дискурса, которые отражают его признаки: «дискурс представляет собой форму коммуникации людей, которая обладает целеполаганием и интенциональностью» [1: 193].

Таким образом, использование словосочетания «сказочный дискурс» возможно объяснить с помощью следующих факторов:

- Сказка выражает личность и социум, выделяя ее антропологичность.
- Сказочный дискурс характеризуется коммуникативной функцией (передачей информации об окружающей среде).
- Сказка связана с конкретной концептосферой, включающей в себя концепты.

Сказочный дискурс – это часть фольклора. Он выражен в формате повествования сказки и имеет характеристики мифологических черт. Первоначально весь фольклор отражал обряды, а воспроизведение сказок, песен и былин регулировалось сроками исполнения, действия и места. Сказку воспринимали в качестве обыденного традиционного явления.

Понятие «сказка» является основной составляющей понятия «сказочный дискурс». Первобытное общество включало сказку в общую систему представлений: природа и мироустройство.

По Афанасьеву А.Н. «сказка – чужда всему историческому; предмет ее повествования – не человек и не его общественные тревоги, подвиги, а разные явления природы» [3: 10]. Сказку в традиционном обществе воспринимают в качестве специфического феномена, имеющего много родовых признаков. Сказка включает в себя общественные представления, религиозные догмы, этнографические и культурологические особенности народа. На основе этихэлементов произошло формирование классификации сказочного дискурса.

Классификация сказок является одной из значительных проблем в современной фольклористике. Многие исследователи-практики, такие как Миллер В.Ф., Вундт М., Пропп В.Я. озвучивали свои классификационные модели. Самые актуальные классификации были описаны Проппом В.Я. в его труде «Исторические корни волшебной сказки» [5]. Пропп В.Я. среди них выделял, по его мнению, более удачную классификацию Миллера В.Ф., поскольку она имела совпадения с его собственной. В соответствии с классификацией Миллера В.Ф., сказки можно подразделить на:

- сказки-пародии;
- новеллистические сказки;
- легендарные сказки;
- детские сказки;
- волшебные сказки;
- сказки о животных [6: 4].

На основе вышеизложенной классификации, Пропп В.Я. представил свою, где сказки он разделил на:

- сказки о предметах и животных, неживой природе и растениях;
- кумулятивные сказки;
- сказки-небылицы;

- бытовые (новеллистические) сказки;
- волшебные сказки;
- докучные сказки [6: 33].

Существуют и зарубежные классификации сказок. Классификация сказок Аарне А. и Томпсона С. считается более популярной и общепринятой в англоязычном фольклоре [3: 14]. Она состоит из следующих видов сказок:

- сказки о животных;
- волшебные сказки;
- религиозные сказки;
- сказки новеллистические;
- сказки о людоедах;
- шутливые и анекдотичные сказки;
- сказки-бланки;
- неклассифицируемые сказки.

Данная классификация сказок Аарне А. и Томпсона С. имеет разнообразие в отличие от классификации, которую предложил Пропп В.Я. Но в состав «неклассифицируемых» Аарне А. и Томпсон С. отнесли более 2400 сказок. К ним они не смогли подобрать ни один вид сказок.

Популярная классификация сказок во Франции – это классификация Тенез М.Л. и Деларю П. [3: 15]. Сказки имеют подразделение на:

- сказки-перечисления;
- шутливые сказки;
- сказки традиционные;
- сказки о животных;
- сказки-мудрости.

Классификация исследователей Франции, можно сказать, имеет совпадения с классификацией Проппа В.Я. Первоначально, совокупность данных классификаций представлена «сказками о животных», встречающихся в трудах всех исследователей сказочного дискурса.

Сравнивая более детально представленные классификации, возникает вопрос о соотношении терминологии содержанию сказок. Соединение разных классификаций дает возможность утверждать следующее: сказки о животных, предметах неживой природе и растениях являются более распространенным видом сказочных текстов, встречающихся во всех лингвистических культурах.

Далее следуют традиционные волшебные сказки. Обязательный элемент таких сказок – волшебство, состоящее из превращений, чудодейственных предметов, ирреальных событий. Следующие – это новеллистические сказки, включающие в себя и бытовые, и сказки-мудрости. В этих сказках имеет место быть бытовой сюжет. Но иногда появляются и необычные персонажи, такие, как домовые, привидения, черти и многие другие.

Религиозные сказки и сказки-легенды имеют схожесть в структуре и в значении с притчами и мифами. Шутливые сказки, анекдотичные и докучные сказки, сказки-пародии пародируют форму сказки. В них встречаются повторяющиеся элементы, вызывающие бессмыслицу. Докучная сказка представляет собой рассказ, в котором происходит успокоение читателя посредством повторения сюжета, например, сказка «Про белого бычка».

Кумулятивные сказки, сказки-перечисления и сказки-бланки представляют собой многократное повторение какого-либо звена, которое разворачивает структуру сказки, к примеру, «Репка» или «Колобок».

Вопреки тому, что много жанров сказочных текстов имеют общие черты, Миллер В.Ф. выделяет детские сказки. Но этот жанр мало изучают в фольклористике и выделяют его не все исследователи. Согласно Проппу В.Я. сказки-небылицы представляют собой нереальные события. Данный жанр мало распространен в рамках изучения сказочного дискурса и его подчеркивание осложнено присутствием жанра волшебных сказок.

По Аарне А. и Томпсону С. сказки о людоедах являются распространенным жанром сказок в западноевропейском сказочном дискурсе. В русском сказочном дискурсе подобные сказки могут встретиться в качестве перевода либо пересказа [3:100].

Неклассифицируемые сказочные тексты представляют собой спорный вопрос в современной фольклористике, поскольку огромное количество лингвистических исследователей отрицают их наличие и обусловленность.

Таким образом, в русской и англоязычной фольклористике исследователи более существенными считают волшебные сказки. Данный жанр сказочных текстов описали и классифицировали большинство исследователей в своих трудах, которые посвящены сказочному дискурсу.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Карасик В.И. Языковой круг: личность, концепты, дискурс. – Волгоград: Перемена, 2002. – 477 с.
2. Красных В.В. Этнопсихолингвистика и лингвокультурология: курс лекций. – М.: ИТДГК «Гнозис», 2002. – 284 с.
3. Ласкова М.В., Ивченко М.В. Особенности функционирования лингвокультурного концепта «волшебство» в сказочном и рекламном дискурсах: Монография. – Ростов н/Д: ИПО ЮФУ, 2013. – 116 с.
4. Ожегов С.И. Толковый словарь русского языка [Электронный ресурс]: портал «slovaronline.com» / С.И. Ожегов, Н.Ю. Шведова. – 2010. – 2314 с.
5. Пропп В.Я. Исторические корни Волшебной сказки [Электронный ресурс]: электронная библиотека BooksCafe.net. – 2015–2016. – Режим доступа: https://bookscafe.net/book/propp_vladimir-istoricheskie_korni_volshebnoy_skazki-22520.html. – Дата обращения: 30.07.2020.
6. Пропп В.Я. Морфология «волшебной» сказки [Электронный ресурс]: электронная библиотека BooksCafe.net. – 2015–2016. – Режим доступа: https://bookscafe.net/read/propp_vladimir-morfologiya_volshebnoy_skazki-22522.html#p25. – Дата обращения: 5.08.2020.

*© Галлямова В.В., 2021*

**УДК 81**

*Гареева М.Б., учитель английского языка*
*МБОУ Школы № 157, г. Уфа*

## ПОЗДРАВЛЕНИЯ И БЛАГОПОЖЕЛАНИЯ В БАШКИРСКОЙ И АНГЛИЙСКОЙ ЯЗЫКОВОЙ КАРТИНЕ МИРА

В последние десятилетия в лингвистической науке активно разрабатывается направление, где язык рассматривается как культурный код нации. Изучение поздравлений, благопожеланий дает возможность увидеть тот культурный фон, который стоит за единицей языка и который позволяет соотносить поверхностные структуры языка с их глубинной сущностью. Поздравления и

благопожелания башкирской и английской языковой картины мира в сопоставительном аспекте еще не изучены.

Понятия поздравление и благопожелание как социальное явление занимает важное место в жизнедеятельности общества. Восприятие данных явлений башкирскими и английскими народами, а также своеобразность ощущений, вызываемых данными знаниями у башкир и англичан, характер представлений, ассоциаций во многом обусловлены ценностными приоритетами современного общества.

Неотъемлемой составляющей речевого этикета является благопожелание, играющее важную роль в повседневной жизни традиционного общества. Пожелание блага, по мнению Н.А. Трофимовой, – одно из наиболее ярких и интересных речевых актов, заслуживающих внимание. Благопожелание, с точки зрения лингвистики, может представлять собой слово, пословицу, заговор, формулу речевого этикета, стихотворение, знахарские магические тексты, календарно-обрядовые песни и заговоры, оно может быть частью свадебного фольклора и похоронного обряда; поэтому можно считать, что строгого соотнесения с какой-либо конкретной языковой единицей оно не имеет [1: 92].

Речевые ситуации поздравления и благопожелания являются реакцией на нечто уже произошедшее в реальной жизни (наступил праздник, достигнуты успехи и т.д.), то есть данные речевые действия как бы спровоцированы прошлыми событиями. И в то же время они направлены на будущие жизненные успехи и удачи.

Поздравление собеседника – означает проявление к нему внимания, создать у него хорошее настроение. Наиболее частая форма поздравления в башкирском языке образована от глагола «ҡотла» с распространителями: *уҡытыусылар көнө менән, сығарылыш эшен яҡлауың менән, юбилейың менән ҡотлайым. Что касается поздравлений и пожеланий в английском языке наиболее часто употребляемым глаголом является «congratulate»: «I congratulate you...» (Я поздравляю тебя ...). on your promotion (с повышением), on buying a new flat (с покупкой новой квартиры) и т.п*

Пожелания бывают стандартные, общие и частные, индивидуальные. Общие пожелания реализуются во фразах: *Желаю счастья (успехов, удачи, здоровья)! Желаю всего хорошего (всего доброго, всего наилучшего)!*

Частные пожелания реализуются с помощью конкретного указания на то, чего желают: *Желаю сдать экзамен (хорошо отдохнуть, поскорее выздороветь, приятного аппетита, счастливого пути)!*

Если в русском языке опорным компонентом поздравлений и пожеланий являются глаголы «поздравлять», «желать», в башкирском – *котлайым, теләйем, тәбрик итәм. В английском языке – «wish».*

Наиболее типичные формулы поздравления и пожелания в башкирском языке образованы от глаголов с распространителями (как и в русском и английском языках): *Һеҙҙе яңы йыл менән тәбрик итәм!*

Наиболее ярко специфика башкирского речевого этикета проявляется в употреблении благопожеланий. Благопожелания – небольшие по объему речевые формулы, используемые в повседневном общении по тому или иному поводу: рождение ребенка, оказание услуг, покупка, постройка дома, женитьба и т.д. Так, тем, у кого родился ребенок адресуют следующие пожелания: *тәүфиҡлы булһын (пусть будет благонравным, дисциплинированным),оҙон ғүмерле булһын (пусть живет долго*). В Америке существует такой обычай: для будущей матери устраивают вечеринку и празднуют рождение будущего ребенка. Такая вечеринка называется «baby shower», день, когда будущему ребенку дарят подарки . Традиционно в такой день произносится много благопожеланий. Вот некоторые примеры: **We wish that yourbaby will grow up happy!** – Мы желаем вашему малышу расти счастливым!

- **We wish that every day will bring your child new friends and new ideas!** – Мы желаем, чтобы каждый день приносил вашему малышу новых друзей и новые идеи!
- **We wish that all your baby's dreams will come true in life!** – Мы желаем, чтобы все мечты вашего ребенка исполнялись!

У башкир запрещалось заранее сообщать о беременности женщины. По поверьям это могло сглазить женщину и принести к печальным последствиям. «Беременная – она святая. Одной ногой в могиле, другой – на земле. Коль обидишь ее – на голову твою падут проклятия и беды» [2: 60]. Поэтому люди старались бережно относиться к беременной. При встрече обязательно здоровались и пожимали обе руки, желали ей благополучно разрешиться, говоря «*Имен-аман ҡотолорға яҙһын!*», читали молитвы. Они верили, что, искренние пожелания непременно сбудутся и у них самих счастье наполнится, грехи уйдут.

При виде работающих говорят: *Алла ярҙам бирһен, (Бог в помощь), Good luck (Удачи), Алла көүәт бирһен (пусть Аллах даст силы), Have a good job (желаю плодотворной работы)*. Человеку, купившему новую вещь, желают: *йылы тәнеңдә туҙһын (пусть износится на теплом), теле ҡотло булһын (пусть будет с душой*), *It dress fits you very well* (это платье тебе идет).

С точки зрения семантики, в языке часто употребляются назидательные, свадебные, прощальные, благодарственные, функции просьбы, пожелания здоровья, пожелания богатства, событийные благопожелания. В назидательных благопожеланиях ярко выделяются такие составные части воспитания, как нравственное, умственное, трудовое, физическое. *Һыны булһын батырҙың! Let it be a stately batyr*! (Пусть будет статным батыр!) *Намыҫы булһын батырҙың! Let the batyr be honest* (Пусть будет честным батыр!) *Тәүфиҡлы бул!* (Будь благочестивым!) *Be Pious! Шәфҡәтле бул! Be merciful!* (Будь милосердным!) *Мөхәббәтле бул! Be pleasant!* (Будь приятным!)

Таким образом, пожелания и поздравления и у башкир, и у англичан направлены на подбадривание собеседника, на создание у него хорошего настроения, на оказании положительного воздействия на эмоции собеседника, которые должны быть искренними и уместными. Они разнообразны и широко употребляются в различных речевых ситуациях.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Трофимова Н.А. Экспрессивные речевые акты в диалогическом дискурсе. Семантический, прагматический, грамматический анализ / Н.А. Трофимова. – СПб. : Изд-во ВВМ, 2008. – 376 с.

2. Хусаинова Г.Р. Виды запретов в башкирской волшебной сказке // Культура народов Башкортостана: история и современность: Материалы региональной научной конференции (Уфа, 18 апреля 2003 г.) – Уфа: РИО БашГУ, 2003. – С. 174-176.

© *Гареева М.Б., 2021*

УДК 81`221

*Гейт М.В., студентка 5-го курса*
*Научный рук.: Тагирова С.А., к. пед. н.,доцент*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

# ЯЗЫК ЖЕСТОВ КАК КУЛЬТУРНЫЙ ФЕНОМЕН БАШКИРСКОГО ЭТНОСА

Невербальная коммуникация, а иначе называемая языком жестов, исторически сложилась как одна из первых способов общения людей на земле. Язык жестов очень богат и имеет свои специфические черты благодаря многообразию этнических групп на планете. Национальная культура башкир с давних времен имеет собственные невербальные жесты, которые выражаются в народных обрядах, традициях, поверьях, этикетных нормах, легендах, различного рода празднованиях и танцах.

Невербальный этикет общения включает в себя требования к жестам, позам, мимике, дистанции общения, физическим контактам между собеседниками во время разговора. Правила башкирского этикета содержат в себе вербальные и невербальные компоненты общения, которые следует знать при беседах с представителями башкирского народа.

Несмотря на повышенный интерес к языку этикета башкир, данная область остаётся малоизученной сферой. В настоящее время существует лишь малое количество исследований культурно-национальной специфики невербального этикета башкирского языка в сравнительно-типологическом аспекте. Научные работы ученых А.А. Акишиной, Н.И. Формановской, Л.А. Введенской, А. Вежбицкой, А.Ю. Сынбулатовой, Р.Р. Баязитовой, Ф.Р. Надршиной, Ю.Е. Прохоров., Ф.Г. Хисамитдиновой, А.Н. Сынбулатовой, Р.З. Султангареевой и др. являются фундаментальными трудами в данной сфере.

В наше время жестовый запас языка важен как для повседневной жизни, так и для деловых встреч, межкультурных взаимодействий и интеграций. Ученые, изучающие «невербалику» разных общностей создают специальные словари жестов. Словари для русской жестовой культуры был составлен Г.Е. Крейдлиным, А. Григорьевой, Н.В. Григорьевым.

В башкирской же культуре еще нет отдельных словарей жестов, но есть работы, где подробно описываются невербальные способы общения, их знаковое и культурное истолкование, история возникновения и применение в разные временные эпохи. Это издания профессора-лингвиста Ф.Г. Хисамитдиновой «Мифологический словарь башкирского языка» (2010), «Словарь башкирской мифологии» (2019), монографии ученого-этнографа Р.Р. Баязитовой «Речевой этикет башкир (2003), «Традиционный этикет в башкирской семье» (2006), «Традиционный семейный этикет башкир» (2010), работа филолога А.Ю. Сынбулатовой «Башкирский речевой этикет: семантика и средства выражения» (2011), научные статьи М.В. Гейт «Тактильные средства общения как способ межкультурных коммуникаций в РБ» (2018), «Невербальное средство, используемое при приветствии в башкирской культуре» (2018), а также совместные исследовательские публикации М.В. Гейт и Г.Р. Ижбаевой «Невербальный способ интерпретации культуры башкирского этноса – народный танец» (2019), Гейт М.В. и С.А. Тагировой «Башкирский театр и кино как способ выражения культуры башкирского народа» (2020).

Чем взрослее становится человек, тем он больше учится правильно интерпретировать и правильно использовать невербальные жесты, как своей, так и любой другой культуры. Для чего? В цивилизованном обществе существует целый «набор» универсальных жестов, но человеку все же необходимо изучать «азбуку невербального общения», так как процесс коммуникативного акта содержит в себе не только информативность, но и эмоциональность собеседников, более того, интерпретация жестов в зависимости от этнической культуры может значительно разниться.

Невербальные средства общения чаще всего используются для установления благоприятного коммуникативного контакта с собеседником, для фиксации того, насколько хорошо человек владеет собой, а также для получения информации о том, что люди в действительности думают о других. Неречевые средства общения, своего рода, это эмоциональный язык человека. Они не только дополняют речь, но и дают информацию об эмоционально-психологическом состоянии человека. Невербальный жест есть реализация эмоциональных состояний и оттенков этих состояний. Любое телесное проявление в какой-то мере сказывается трансляцией

внутренних переживаний. Разговаривая с помощью языка жестов, люди выражают те или иные эмоции, благодаря этому, собеседник может понять намерения, эмоции, переживания и чувства того, с кем ведет беседу.

Жест как культурный феномен имеет устойчивый в данной культурной общности и осваиваемый в процессе социализации знак. Один и тот же жест у разных народов может трактоваться по-разному и нести определенную коммуникативную нагрузку в контексте данной культуры. Чтобы понять значение того или иного неречевого знака, необходимо учитывать этническую принадлежность, статус участников и ситуацию общения. Это позволяет избежать конфликтов и сделать беседу благоприятной для обеих сторон коммуникантов.

«Отправляясь за границу, в отпуск или деловую поездку многие рассчитывают компенсировать незнание языка жестами и мимикой, мол, «на пальцах объясню» и меня поймут. Но значения одних и тех же жестов в различных странах настолько отличаются, что, используя тот или иной жест, можно не только поставить себя в глупое положение, но и навлечь на себя неприятности» [2: 268].

Изучение выражения культурной самобытности башкирского этноса через невербальную составляющую дает информацию о бытующих нормах и верованиях, лирических мотивах и об исторических фактах башкирской национальной общности. «Анализ моделей вербального и невербального языкового поведения, вербализующих культурные стереотипы этноса, открывает перед нами картину мира и ценностные установки башкирского этноса» [1: 69].

Таким образом, в репертуаре человеческого поведения язык жестов является одним из значимых компонентов общения. Определенные телодвижения могут быть показателем соблюдения культурного этикета, а эмоциональные выражения прямым отражением внутреннего состояния собеседника. В культуре невербальной коммуникации башкирского этноса присутствует немало знаков, соблюдение которых не должно противоречить традиционным нормам башкир.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Гейт М.В., Тагирова С.А. Башкирский театр и кино как способ выражения культуры башкирского народа // Мир культуры

глазами молодых исследователей: Материалы XLV всероссийской студенческой научно-практической конференции. – Пермь: ПГИК, 2020. – С. 69.

2. Чернов А.А. Язык жестов: национальная и культурная специфика // Международный научный журнал «Инновационная наука». – 2015. – №11 – С. 268.

© *Гейт М.В., Тагирова С.А., 2021*

**УДК 372.8**

*Ғәйнуллина А.С., 5-се курс студенты*
*Ғилми етәксеһе: Ғ.Ғ. Ғәлина, филол.ф.к., доцент*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## ДӘРЕСТӘН ТЫШ ЭШМӘКӘРЛЕКТӘ ИКТ КОМПЕТЕНЦИЯЛАР ФОРМАЛАШТЫРЫУ

Информация дәүерендә һәм мәктәптә уҡытҡанда универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыуҙы яңы методикалар ярҙамында башҡарғанда, төрлө цифрлы техник сараларҙы, компьютерға һәм интернетҡа нигеҙләнгән технологияларҙы ҡулланыу талап ителәә.

Хәҙерге заман мәктәптәрендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә улар икт компетенцияларҙы формалаштырыу йүнәлешендә башҡарыла. Балаларҙың компьютер ҡулланыу, төрлө техник саралар ярҙамында интернет селтәрендә, цифрлы ресурстарҙа мәғлүмәт табыу оҫталығына эйә булмайынса белеме тулы булмай. Шуға ла, икт компетенция тигәндә, беҙ универсаль уҡыу эшмәкәрлегенең мөһим бер өлөшөн аңлайбыҙ.

«Икт компетенция ошо төшөнсәләрҙе үҙләштереүҙе күҙаллай:

– мәғлүмәтте билдәләй алыу;
– уны икт технологиялар ярҙамында табыу;
– уның менән һөҙөмтәле эш итеү;
– мәғлүмәтте баһалау;
– икт технологиялар ҡулланып, мәғлүмәт ярҙамында айырым блоктар барлыҡҡа килтереү, ғилми һәм тикшеренеү эштәре алып барыу;
– мәғлүмәтте төрлө икт технологиялар һәм күргәҙмәлелек саралары ярҙамында еткереү» [3: 215].

Кластан тыш эшмәкәрлектә икт компетенциялар формалаштырыу – башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә хәҙерге заманда торған төп

бурыстарҙың береһе. Дәрестән тыш эштәрҙә балалар туған тел серҙәрен, яҙыусылар әҫәрҙәрен төрлө цифрлы ресурстар ярҙамында өйрәнә ала, тикшеренеү эштәре алып бара. Улар телекоммуникацион бәйләнеш нигеҙендә уҡыу эшмәкәрлеге хаҡында үҙ фекерҙәрен белдерә, интернет селтәре аша аралашыу ситуациялары тыуҙырыла.

«Икт компетенцияһының төп бурыстарының береһе – балаларҙың цифрлы ресурстар менән ҡуллана белеүенә өлгәшеү» [1: 210]. Дәрестән тыш эшмәкәрлектә халыҡ ижады өлгөләре тупланған байтаҡ ресурстар ҡулланыла. Уларҙың күп өлөшө интернет селтәрендә урынлашҡан. Мәҫәлән, Bashmusik.net порталы балалар менән дәрестән тыш эшмәкәрлектә төрлө йырҙар тыңларға, уларға бәйле эштәр алып барырға ярҙам итә. Мәҫәлән, дәрестән тыш сарала сайттағы медиатеканан йырҙың аудиояҙмаһы тыңлана («Кәкүк» халыҡ йыры, Г. Бикбулатов башҡарыуында). Балалар уны фонограммаға ҡушылып күмәкләп тә башҡара ала, был ваҡытта проекторҙа йырҙың һүҙҙәре компьютерҙан онлайн режимда күрһәтелеп тора.

Шунан балалар йырҙың мәғәнәһе тураһында фекер алыша. Былдай йырҙарҙы халыҡ йолаларын, төрлө ырым-ышаныуҙарын, легендаларын белгәндә генә аңлап була. «Башҡа ҡоштарҙан айырылып торған кәкүк элек-электән кешеләрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп иткән, уға бәйле төрлө легендалар, йырҙар, юрауҙар барлыҡҡа килгән. Легендаларҙан күренеүенсә, кәкүк – кеше, ҡатын-ҡыҙ затынан яралған йән эйәһе» [2: 288]. Халыҡ аңында кәкүк моңло, әммә бәхетһеҙ ҡош булып иҫәпләнә һәм уның саҡырыуын кешеләр үтә шомло ҡабул иткән. Ырым-юрауҙар буйынса, ҡоштоң йорт тирәһендә ҡысҡырыуы – яҡшыға түгел, ул хатта үлемде иҫкәртеү билдәһе. Ошо инаныу йырҙа ла сағылдырыла.

Интернет селтәре ярҙамында балалар йырға бәйле риүәйәттәрҙе эҙләп, уның сығанаҡтары тураһында һөйләй ала. Дәрестән тыш эшмәкәрлектә балаларға төрлө йырҙар тарихын цифрлы ресурстар ярҙамында табыу һәм мәғлүмәт менән ҡулланырға өйрәтеү уларҙың икт компетентлығын формалаштыра.

Интернет-ресурстар менән ҡулланырға өйрәтеү балаларға төрлө бай мәғлүмәт һандыҡтарын аса. Мәҫәлән, «тел һабантуйы» үткәргәндә, һабантуй программаһына бәйле ярыш-уйындар ойошторола һәм Википедиянан да алынған материалдар ҙа ҡулланыла, тик улар тел дәрестәрендә өйрәнелә торған программа материалы нигеҙендә төҙөлә. Яңы һәм традицион дәрестәрҙең яңы варианттары формаһында үткәрелгән дәрестәрҙә һәр уҡытыусының булдыҡлығына юл асыу, ижади

эҙләнеүҙәренә ярҙам итеү, ҡыҫҡаһы, тормошта үҙ урынын таба алырҙай йәштәр тәрбиәләү кеүек мәсьәләләр хәл ителә. Стандарт булмаған дәрестәрҙә киңерәк ҡулланыу уҡыусыларҙы ижади эшмәкәрлеккә әйҙәй, әҙәбиәткә һәм телгә һөйөү тәрбиәләй.

Балаларға башҡорт википедияһына бәйле дәрестәге эштәр:

1-се эш. Википедиянан «Карауанһарай» һүҙен табығыҙ. Уның аңлатмаһын уҡып, ҡайҙан килеп сығышын аңлатығыҙ.

Уҡыусылар алмашлап википедиянан түбәндәге бүлектәрҙе уҡый:

– Тарих;
– Карауанһарайҙың төҙөлөүе;
– Карауанһарай бөгөн.

2-се эш. Балалар һәр бер бүлектәге сығанаҡтарҙы анализлай, үҙ фекерҙәрен әйтә, бәхәстәр ойошторола.

Күркәм телмәр үҫтереү дәрестәрендә балаларҙың икт технологиялар ярҙамында аралашыу эшмәкәрлеген ойоштороу уларҙың мәғлүмәт менән киң эш итә белеү оҫталығын үҫтерә бара. Уҡыусылар персональ компьютерҙар йәки мәктәптә ҡабул ителгән бәләкәй моноблоктар, улар булмаған осраҡта кеҫә телефондары ярҙамында дистанцион уҡыған ваҡытта чатта бәйләнешкә инә. Уҡыусыларға һүҙҙәр өлгөләре бирелә: Урал, ҡурай, Башҡортостан, заман, интернет, башҡорт теле.

Балалар чатта бер-бер артлы һөйләмдәр төҙөп яҙа, диалогтар төҙөү эше ойошторола. Иң актив ҡатнашыусы, чатта матур һөйләмдәр яҙған, фекерен дөрөҫ еткәрә алған уҡыусы билдәләнә. Балаларҙың һөйләмдәре проекторҙа күрһәтелә һәм шунда уҡ хаталар өҫтөндә эш тә эшләй алалар.

Шулай итеп, был эштә балаларҙың икт компетентлығын формалаштырыуҙың мөһим бер юлы – цифрлы интернет-ресурстары һәм телекоммуникация саралары менән ҡулланырға өйрәтеүҙе ҡарап сыҡтыҡ. Һаулығы яғынан сикләнгән, дистанцион уҡыған балалар ҙа интернет селтәре аша башҡа уҡыусылар менән бергә уҡый ала. Икт технологиялар башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә балаларҙың мәғлүмәт менән төрлөсә эш итеүен тәьмин итә, кластан тыш эшмәкәрлекте йәнләндерә, төрлө сараларҙы, уҡыусыларҙың үҙ аллы эшендә алыштырғыһыҙ ярҙамсы була.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Баҡыева Р.З. Башҡорт теле дәрестәрендә заманса технологиялар, инновацион алымдар ҡулланыу // Опыт реализации Федерального государственного стандарта в образовательных учреждениях: Материалы Всероссийской научно-практической конференции. – Уфа: БГУ, 2016. – С. 210–219.

2. Нәҙершина Ф.Ә. Башҡорт халыҡ йырҙары, риүәйәттәре (Өс телдә: башҡорт, урыҫ, инглиз). – Өфө: «Китап», 1997. – 288 бит.

3. Полат Е.С. Новые педагогические и информационные технологии в системе образования. – М: Омега-Л, 2004. – 215 с.

4. Федеральный государственный образовательный стандарт основного общего образования. – М.: Просвещение, 2016. – 54 с.

© *Ғәйнуллина А.С., Ғәлина Ғ.Ғ., 2021*

**УДК 821.512.141**

*Ғәниева Г.З., магистрант*
*Нәбиуллина Г.М., филол.ф.к., доцент*
*М. Акмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## Ф. ҒӘЛИМОВ ТРИЛОГИЯҺЫНДА ДИНИ-МИФОЛОГИК МОТИВТАРЫНЫҢ ФУНКЦИОНАЛЬ ӘҺӘМИӘТЕ

Хәҙерге әҙәбиәттә дини-мифологик мотивтарға яҙыусылар ҙур әһәмиәт бирә. «Мотив» термины – фәнни әйләнешкә Антти Аарне-Томпсон тарафынан индерелеп, латин теленән хәрәкәтләндереү тип тәржемә ителһә, Ю.Е. Берёзкиндың биргән билдәләмәһе буйынса фольклор-мифологик мотив – әҫәрҙең сюжет-композицияһында осраған фольклорға йә мифҡа бәйле бер эпизод, йә ваҡиға булараҡ ҡабул ителә.

Һәр яҙыусы юғарыла аталған мотивтарҙы үҙенсә ижади файҙалана: ысын булып үткән ваҡиғаларға йә иһә халыҡ ижады, мифология аша билдәле образдарға, ваҡиғаларға таянып геройҙың эске донъяһын төрлө психологик ҡаршылыҡтарға ҡуя, үткер әхлаҡи проблемалар күтәреп сыға.

Талантлы яҙыусы Флүр Ғәлимовтың «Аҙғын тәүбәһе» исемле трилогияһы дини-мифологик мотивтары менән байытылған, әҫәрҙә халыҡ ижадынының афористик жанрҙарынан мәҡәл һәм әйтемдәр йыш осрай.

Мәҫәлән, һәр кемдең күрәсәге алдан билдәле тигәнде: «*Тәҡдир инде, әжәлең етһә – сәбәбе табыла...*» [5: 105], – тип аңлата автор. Урлашыуҙың ҙур гонаһлығын белдереүсе мәҡәл: «*Эйе, дөйә урлаған да бур, төймә урлаған да бур...*» [5: 122]. Заманаларҙың боҙолоуы*:* «*Ата – улды, инә ҡыҙҙы белмәгән заман ошолор инде...*» [5: 238], – тигән мәҡәл аша аңлатыла. Эшлеклелек һәм ялҡаулыҡты һүрәтләүсе мәҡәлдәр*: «Күҙ ҡурҡа – ҡул эшләй, тигәндәй, кәсептәрен һөйрәп алдылар ҙа киттеләр. Көн уҙһын, сабата туҙһын, тип һөйрәлеп йөрөргә был хөкүмәт эше түгел* [5: 414] һ.б.

Күренеүенсә, мәҡәлдәр трилогияла функциональ әһәмиәткә эйә. беренсенән, әҫәрҙе уҡымлы итә, тавтологиянан ҡотҡара, икенсенән, яҙыусының тел маһирлығын билдәләй. Әҫәрҙә мәҡәлдәр тормоштағыса, йә әйткән һүҙҙе, теләкте ҡеүәтләп, раҫлау, йә инҡар итеү, йә персонаждарҙың эш-хәрәкәт, ҡылыҡтарына аңлатма биреү өсөн ҡулланыла. Берҙән, мәҡәлдәр тик персонаждар ауыҙынан әйттерелә, тапҡыр һүҙҙәр иһә күберәген автор телмәрендә, ремаркаларҙа осрай. Икенсенән, мәҡәлде әйтеүсе мотлаҡ боронғоларға, ололарға, башҡаларға һылтанып ҡуя («тигәндәр боронғо бабайҙар», «тигән боронғолар», «ти»). Шуның менән персонаж үҙенең әйткәндәренең бәхәсһеҙ икәнлеген белдермәксе, был һығымтаны ул үҙе яһамай, йылдар, быуаттар һынауын үткән тәжрибәгә таяна. «Аҙғын тәүбәһе» трилогияһында тупланған мәҡәлдәр ҙә әхлаҡ-әҙәп нормаларын, кешеләрҙең йәмғиәттә үҙ-үҙҙәрен тота һәм йәшәй белеү ҡағиҙәләрен дә иҫкә төшөрә.

Афористик жанр төрөнә ҡараған ҡарғыш жанрын йыш осратырға мөмкин. *«Лилиә ҡысҡырып илап ебәрҙе. – У-у-у, ҡәбәхәт йән! Нәҫел үгеҙе! Туймаҫ арлан эт! Үлһәм, ҡәҙеремде белерһең әле!.. Яҡты көндә ун бармаҡ араңа һигеҙ шәм ҡыҫтырып эҙләп йөрөрһөң – әммә мин булма-а-ам!..»* [5: 21] *«Их, һин, шаҡшы! Әшәкелегеңде миңә япһырып, үҙеңде яҡларға маташаһыңмы? Ғаиләбеҙҙе, нәҫел-ырыуыбыҙҙы нәжескә батырҙың, тыпырсынма! Барыбер таҙарына алмаҫһың!»* [5: 257].

Был ҡулланылған ҡарғыштар әҫәрҙәге геройҙарҙың образын асыуға, уларҙың характерын билдәләүҙә ҙур роль уйнай. Ире Салауаттың хыянатына әрнеп, илаған Лилиттың телмәрендә ҡарғыш һүҙҙәрен йыш күҙәтергә мөмкин. Тик был әр һүҙҙәре Лилитты китап уҡыусыһынан ситкә этәргәндәй. Бер яҡтан, ҡарғыш һүҙҙәре геройҙың эске рухи донъяһын аса, икенсе яҡтан, Лилит телмәрендә

ҡарғыштарҙы ҡулланыу китап уҡыусыһына тәьҫир көсөн арттырыуға, ҡатындың иренә булған асыу хис-тойғоларының тағын да тәрәнерәк, хислерәк итеп еткерергә ярҙам итә.

Беренсенән, трилогияла ҡулланылған «Сибай», «Ашҡаҙар» кеүек халыҡ йырҙары милли колорит өҫтәһә, икенсенән, төп герой Байгазиндың күңел донъяһын асырға ярҙам итә: геройҙың йөрәгендә тәрән тойғолар, ғазаптар йөрөтөүен, унын уйһыҙ кеше түгеллеген әйтеп бирә.

«Аҙғын тәүбәһе»ндә башҡорт фольклорының функциональ жанры булған төрлө йола жанры осрай. Әҫәрҙә бирелгән «Тиҙәк һуғыу», исем ҡушыу, ерләү, талаҡ әйтеп айрылышыу һ.б. йолалары ла телгә алына. Әйтеп үтергә кәрәк, башҡорт халҡы борон-борондан уҡ тәбиғәт көстәренә ышанған, уның менән ризалыҡта йәшәргә ынтылып, уға табынып, төрлө махсус йолалар башҡарған. Башҡорт халҡында Ер, Һыу, Тау, төрлө хайуандар культы киң билдәле. Хәҙерге көндә лә Башҡортостандың изге ерҙәре булып һыналған Арҡайым, Торатау, Мөжәүер хәҙрәт ҡәбере, Шүлгәнташ мәмерйәһе менән бәйле халыҡтың йола-ышаныуҙары тасуирлана: *«Бәхет шишмәһенән һыу эскәндә:*

*– Был шишмәлә һыу ингән кеше бәхетле була икән, тип ишеткәйнем, – тине Лилит, шишмәнең бәләкәй генә быуаһын күрһәтеп. Уның һүҙҙәре Нәүфиләгә етә ҡалды:*

*– Шулаймы, апай, ысынмы?Бик бәхетле булаһым килә! – тигәс, эске күлдәктән генә ҡалып, теш ҡамыштырғыс һалҡын шишмә һыуына төшөп тә китте»* [5: 151].

Халыҡ борон ҡара китапсыларға, сихырсыларға, күрәҙәсе, һынсыларға, бағымсыларға ныҡ инанған. Ф. Ғәлимовтың «Аҙғын тәүбәһе» трилогияһында сихырсылыҡ әмәле, ҡара көстәргә йыш урын бирелә. Мәҫәлән, Лилиә иренең кәҫәһенән сәс, энә таба. Халыҡ ышаныуҙарына ярашлы, сихырланған әйберҙә ғәҙәттә энә, йөн, сәс, тырнаҡ, көл, ҡан, тупраҡ, тәлмәрйен ағзаһы була икән. Был сихырҙан ҡотолоуҙоң үҙ әмәлдәре тасуирлана. Сюжет дини һәм мифологик мотивтар менән тығыҙ үрелеп, төп геройҙар яҙмышын асыуҙа яңы әҙәби алым функцияһын башҡаралар.

Шулай итеп, Флүр Ғәлимовтың «Аҙғын тәүбәһе» трилогияһында ҡулланылған дини һәм халыҡ ижады өлгөләре ҙур әһәмиәтле роль уйнай һәм ижади табыш булып һынала. Яҙыусының ижади донъяһын тойорға, әйтергә теләгән фекерен ишетергә ҙур ярҙам итә. Тағы ла

геройҙарҙың эске донъяһын, ҡылыҡтарының мотивын асыҡлауҙа ҙур әһәмиәте бар.

Ғөмүмән, «Аҙғын тәүбәһе» трилогияһында халыҡ ижады һәм дини мотивтары киң ҡулланылған, уларҙың һәр береһенә, үҙ маҡсатына ярашлы, йөкмәтке һәм функция һалынған.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Аминев З.Г., Ямаева Л.А., Региональные особенности ислама у башкир. – Уфа: Дизайн- ПолиграфСервис, 2009. – 184 с.
2. Башҡорт халыҡ ижады. Йола фольклоры / Төҙ., башһүҙ һәм аңлатмалар авт. Ә.М. Сөләймәнов, Р.А. Солтангәрәева. Яуаплы ред. Ғ.Б. Хөсәйенов. – Өфө, 1995. – 557 бит.
3. Ветловская В.Е. Анализ эпического произведения: Проблемы поэтики. – СПб.: Наука, 2002. – 213 с.
4. Гәрәева Г. Хәҙерге проза үҙенсәлектәре. – Өфө: Китап, 2009. – 223 бит.
5. Ғәлимов Ф.М. Аҙғын тәүбәһе: трилогия. – Өфө: Китап, 2015. – 472 бит.
6. Ғәниева Г.З., Нәбиуллина Г.М. Ф. Ғәлимов ижадына башҡорт халыҡ ижадының йоғонтоһо // Материалы Республиканской научно-практической конференции. – Уфа, 2019. – С. 191–193.
7. Минлебаева Л.М., Нәбиуллина Г.М. Флүр Ғәлимовтың «Аҙғын тәүбәһе» трилогияһында дини-мифологик мотивтар // Гуманистическое наследие просветителей в культуре и образовании: Материалы XII Международной научно-практической конференции. Уфа, 2018. – С. 105–107.
8. Набиуллина Г.М. Духовные поиски героя трилогии Ф. Галимова «Аҙғын тәүбәһе» («Покаяние распутника») // Проблемы востоковедения. – 2019. – № 3 (85). – С. 56–62.
9. Нәбиуллина Г.М., Әлибаев З.А. Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте. – Өфө: БДПУ, 2013. – 328 бит.
10. Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө: Китап, 2003. – 392 бит.


*© Ғәниева Г. З., Нәбиуллина Г.М., 2021*

**УДК 81'1**

*Ғүмәрова В.Ю., 5 курс студенты*
*БГПУ и. М.Акмуллы*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЛЕКСИКАҺЫ ӨЛГӨҺӨНДӘ УҠЫУСЫЛАРҘА ТЕЛ КОМПЕТЕНЦИЯҺЫ ФОРМАЛАШТЫРЫУ

Телде үҙләштереү һүҙҙәрҙән башлана. «Һүҙҙәр донъяһы иһә икһеҙ-сикһеҙ булғанлыҡтан, телде өйрәнгәндә, уҡыусының тәүҙә билдәле бер күләмдәге һүҙҙәр теҙмәһен үҙләштерә. Был теҙмәне ғәҙәттә лексик минимум тип исемләйҙәр» [2: 33].

Тел компетенцияһы телдең үҙен, унының төҙөлөшөн һәм ҡулланыу нормаларын, йәғни тел системаһын, тел материалын белеүҙе күҙ уңында тота. Бында уҡыу, яҙыу һәм телмәр нормалары – орфоэпик, орфографик, пунктуацион грамоталылыҡ, телмәрҙең тасуирлығы, эмоционаллеге, аныҡлығы инә.

«Лексика һүҙе грек теленең lexikos «һүҙ» тигән һүҙенән яһалып, һүҙлек составы, һүҙҙәр йыйылмаһы мәғәнәһен аңлата. Лексика тип ниндәй ҙә булһа конкрет бер телдең һүҙлек составын да, теге йәки был яҙыусы йәки әҫәр телендә булған һүҙҙәр йыйылмаһын да атайҙар.

Донъяла бик ҙур үҙгәрештәр бара, яңы сәйәси, иҡтисади һәм ижтимағи бәйләнештәр көсәйә. Халыҡтар араһында матди һәм рухи ҡиммәттәр менән алмашыу арта, был ҡиммәттәр үҙҙәре лә үҙгәрештәр кисерә. Ошо шарттарҙа телебеҙгә башҡа телдәр аша бик күп яңы териминдар, һүҙбәйләнештәр үтеп инә һәм беҙҙең телдә урын ала бара. Улар күберәк матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары аша халыҡтың дөйөм аралашыу теленә үтеп инәләр. Шунлыҡтан терминологик лексика хәҙерге ваҡытта йылдам үҫеүсе ҡатлам булып тора. Ул һүҙлек составын тулыландыра һәм байыта. Был һүҙҙәрҙең күбеһе тәржемәһеҙ килеп инә, яңы һүҙҙәрҙең тәржемәһе булғанда ла, улар һөйләү телендә бик ҡулланылмайҙар.

Шунлыҡтан башҡорт теленең ижтимағи-сәйәси лексикаһын өйрәнеү һәм уларҙың өлгөһөндә уҡыусыларҙа тел компетенцияһы формалаштырыу бурысы киҫкен тора.

Тел компетенцияһын формалаштырыу маҡсатында, телдең лексикаһын өйрәнеүгә күскәнгә тиклем, иң элек лексик берәмек

булыу яғынан һүҙҙең асылын аңларға, уның тел системаһында тотҡан ролен билдәләргә кәрәк.

Телдең төп берәмеге – һүҙ. Һүҙҙәрҙең атау функцияһы (һүҙҙең лексик билдәһе) беҙҙе солғап алған донъя күренештәрен исемләргә мөмкинлек бирә.

Мәктәп курсы булараҡ, башҡорт теленең лексикаһы системалы рәүештә 5-се класта өйрәнелә башлай, һәм уның күләме түбәндәгесә билдәләнә:

- лексика тураһында дөйөм төшөнсә;
- һүҙҙең лексик мәғәнәһе һәм күп мәғәнәлелеге омонимдар;
- күп мәғәнәле һүҙҙәр менән омонимдар араһында айырма;
- һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәлә ҡулланылыуы;
- синонимдар;
- антонимдар;
- нығынған һүҙбәйләнештәр (фразеологик берәмектәр);
- башҡорт теленең һүҙлек составы;
- төп башҡорт һүҙҙәре;
- рус, ғәрәп, фарсы телдәренән һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр;
- башҡорт әҙәби теленең дөйөм ҡулланылышлы һүҙҙәре;
- профессиональ һүҙҙәр һәм архаизмдар;
- историзмдар;
- неологизмдар;
- диалектизмдар;
- башҡорт теле һүҙлек составының үҙгәреп, байып тороуы.

Тимәк, уҡыусылар дәрестәрҙә үҙҙәренең һүҙлек запасын байытып ҡына ҡалмайҙар, ә билдәле күләмдә лексик төшөнсәләрҙе, башҡорт теленең лексикаһы буйынса теоретик материалдарҙы ла үҙләштерәләр.

Лексиканы өйрәнеү барышында уҡыусылар тел тураһындағы белемдәрен үҫтерә, телдең тел берәмеге – һүҙ менән танышa, лексика менән телдең башҡа кимәлдәре араһындағы бәйләнештәрҙе (фонетика – лексика, лексика – һүҙбәйләнеш, лексика – морфология, лексика – синтаксис, лексика – стилистика) күрә, һүҙгә уның аңлатҡан мәғәнәһенән сығып ҡарау мөнәсәбәте тыуа, йәғни лексик-семантик ҡараш формалаша. Һүҙҙең ҡулланыу сфераһындағы, башҡорт теленең һүҙ байлығын арттырыуҙағы, байытыуҙағы мөһим сығанаҡтар менән танышалар. Бына шулай итеп, һәр саҡ үҫә барыусы ижтимағи күренеш булған телгә ҡарата уҡыусыларҙың зиһенендә материалистик ҡараш формалаша.

Ошо класта уҡ уҡыусыларҙы «Башҡорт теленең һүҙлеге», синонимдар, омонимдар, антонимдар һүҙлектәре менән таныштырырға һәм уларҙы файҙаланырға өйрәтергә кәрәк. Бындай күрһәтмә мәктәп программаһында ла бирелгән. Бынан тыш В.Ғ. Аҙнағолов етәкселегендә «Урыҫса-башҡортса ижтимағи-сәйәси терминдар һүҙлеге» лә баҫылып сыҡты. Һүҙлектә 7600-ҙән артыҡ термин, һүҙ һәм һүҙбәйләнеш тупланған.

Күп кенә ижтимағи-сәйәси терминдар дөйөм һүҙлектәрҙә, шул иҫәптән урыҫса-башҡортса һүҙлектәрҙә лә урын алған. Әммә улар, әҙәби телдә йыш ҡулланғанлыҡтан, үҙҙәренә айырым мөнәсәбәт талап итә.

6-сы класта иһә уҡыусыларҙың белемдәре һәм күнекмәләре киңәйтелә, тәрәнәйтелә. Улар һүҙлек составының ҡулланылыу (дөйөм ҡулланылышлы һүҙҙәр, архаизмдар, историзмдар, неологизмдар, диалектизмдар), барлыҡҡа килеү (төп башҡорт һүҙҙәре, рус, ғәрәп, фарсы телдәренән һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән, йәғни интернациональ һүҙҙәр) осраҡтары менән танышалар.

Ижтимағи-сәйәси терминдар өҫтөндә эш алымдары башҡа төр төшөнсәләр өҫтөндә эшләү алымдарынан айырыла. Тәбиғәт, географик һ.б. терминдар өҫтөндә эш, нигеҙҙә, дедуктив метод менән алып барылһа, ижтимағи-сәйәси төшөнсә уҡыусының аңына күберәк дедуктив алымдар аша еткерелә. Терминдар өҫтөндә эш логик операциялар (анализ, синтез, сағыштырыу) аша тормошҡа ашырыла. Уҡытыусы дәрестә дөрөҫ йүнәлеш биреп, терминдарҙың йөкмәткеһен асырға, уларҙы төп билдәләре аша төрлө төркөмдәргә бүлергә өйрәтә.

Дәреслектең 122-се битендә Й. Солтановтың әҫәренән Башҡортостан республикаһы тураһында өҙөк бирелгән (5 класс). Был өҙөктә ижтимағи-сәйәси терминдарға *өлкә, күҙаллау* һүҙҙәре ҡарай.

Терминдарҙың мәғәнәһен һүҙлектән табырға була. Был текста ниндәй мәғәнәлә ҡулланылыуын да асыҡларға кәрәк.

Өлкә – 1) өлкә: Мәскәү өлкәһе, автономиялы өлкә; 2) илдең, дәүләт территорияһының билдәле бер өлөшө – Рәсәйҙең көньяҡ өлкәләре; 3) тармаҡ, өлкә – фәндең яңы бер тармағы; 4) белгес – математика өлкәһендәге белгес.

Был һүҙ менән һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр төҙөлә.

179-сы биттә (6 класс) күнегеүҙә *тарих, шәхес, ихтилал, башлыҡ, ҡазаҡ, үзбәк, ҡалмыҡ, ғәрәп, Яҡын Көнсығыш, Мәккә-Мәҙинә, илсе-дипломат, сәсән, яугир* һ.б. һүҙҙәр ижтимағи-сәйәси терминдарға инә. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлаткандан һуң һүҙҙәрҙе бер нисә билдә буйынса төркөмдәргә бүлергә була. Мәҫәлән: кешеләрҙе һәм географик атамаларҙы

белдереүсе һүҙҙәр. Шулай уҡ был һүҙҙәрҙе килеп сығышы буйынса ла тикшерергә мөмкин: төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр.

Әгәр уҡыусыларҙа лексика дәрестәренә ысын мәғәнәһендә ыҙыҡһыныу тәрбиәләнһә, уҡытыусы балаларға аңлайышлы телдә аңлатһа, уларҙың үҙ аллы танып белеү һәм эҙләнеү һәләттәрен үҫтерерлек, иғтибарҙарын йәлеп иттерерлек күнегеүҙәр өҫтөндә эш алып барһа ғына, мәктәптә башҡорт теленең лексика курсын өйрәнеү маҡсатка ярашлы буласаҡ һәм тел компетенцияһы формалаштырып буласаҡ.

Тағы ла шул әһәмиәтле: лексиканы һүҙбәйләнеш, һүҙъяһалыш, һөйләм составында, йәғни контекста, өйрәнергә кәрәк, сөнки күп осраҡта һүҙҙәрзең мәғәнәһе бер-береһе менән бәйләнештә, грамматик-логик мөнәсәбәттә тулыраҡ асыла.

Ижтимағи-сәйәси темаға яҙылған күнегеүҙәр уҡыусыларҙың йәмғиәт тураһындағы белемен киңәйтеүҙе, танып белеү һәләтлеген камиллаштырыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Былдай төр текстар һәр ваҡыт конкрет белем бирә, мәғлүмәттәр өҫтәй, күп осраҡта таныш булмаған яңы материал йәки яңы термин була.

Терминдар менән танышыу синыфтан тыш эштәрҙә башҡарыла. Башҡа предмет буйынса ла терминдар менән танышыу дауам итә. Башҡорт теле уҡытыусыларына башҡа фәндәр менән предмет-аша бәйләнеш урынлаштырыу мөһим.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Әхтәмов М.Х. Хәҙерге башҡорт теле. Лексикология: Уҡыу ҡулланмаһы. — Өфө. Баш ҡорт дәүләт университеты баҫмаһы. 1986. – 136 бит.
2. Йәғәфәрова Г.Н. Башҡорт теленән лексик минимум тураһында // Тенденция развития науки и образования: Сборник научных статей по материалам научно-практической конференции. — Уфа: 2020. — 33-36- сы бб.
3. Урыҫса-башҡортса ижтимағи-сәйәси терминдар һүҙлеге // В.Ғ. Аҙнағолов етәкселегендә. — Уфа: Тау. – 256 бит.


*© Ғүмәрова В.Ю., 2021*

**УДК 821**

*Идрисов Ф.С., магистрант*
*Научный руководитель: Алибаев З.А., к.филол.н., доцент*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

# ХАРАКТЕРЫ В РОМАНЕ-ЭПОПЕЕ «БУРЕНУШКА»

Характер (от греческого character) – черта, особенность. По мнению М.М. Бахтина понятие «характер» в литературном произведении: «Характером мы называем такую форму взаимодействия героя и автора, которая осуществляет задание создать целое героя как определенной личности ... герой с самого начала дан как целое ... все воспринимается как момент характеристики героя, несет характерологическую функцию, все сводится и служит ответу на вопрос: кто он» [3: 151].

Герои произведений Т. Гариповой рассказывают не столько о личных переживаниях и о своих проблемах, сколько о своем этносе, об историческом пути, пройденном башкирским народом. Эти размышления о родной земле, о судьбе страны и ее людей исполнены героического пафоса и трагизма. Прозаику, в первую очередь, свойственно пронзительное ощущение Родины и своей личной слитности с родной землею и отчим краем. Это отражается и в ее произведениях.

Самым ярким и самым востребованным у читателя произведением Тансулпан Хизбулловны является роман-эпопея «Буренушка».

Т. Гарипова сумела показать социальные потрясения в судьбах нескольких поколений семей Муратовых, Мирхайдаровых, Камалетдиновых, Ирназаровых, Шамсутдиновых, Харисовых и др. Паутина взаимоотношений как бы переплела все семьи запутанными, часто тайными событиями. Чтобы понять, насколько тесно переплетаются в романе социальные, исторические и этические проблемы, достаточно проследить за судьбой семьи Муратовых, бывших богатых башкирских тарханов – Дингезхана и Барсынбики.

В центре романа-эпопеи – судьба талантливой красавицы Мадины, по характеру очень прямого и честного человека, доярки. Она – преданная дочь, любящая жена, необыкновенно нежная и трепетная мать, мечтающая достойно воспитать своих детей. Ее

любят все: дети, отец Хашим, бабушка Барсынбика, муж Абдельахат, любит все родное село и тайно влюблен в нее и секретарь горкома партии Аюп Камалетдинов.

Настойчивость, желание подняться с колен помогают Мадине стать независимой, предприимчивой. Они с отцом Хашимом заводят пасеку, возрождают промыслы, прославленный башкирский мед помогает им материально: она выучит и отправит в армию сыновей, потом решит послать дочерей на учебу в училище искусств в Уфу и Ленинград.

Мадина не только вынослива, но и талантлива. На празднике Каргатуй Мадина исполняет народную «Ашкадар», после чего Давид, скрипач, плача, произносит: «Это не вмещается в мое сердце, Мадина».

И умирающий Абдельахат просит Мадину спеть песню «Ашкадар». А когда замолк последний звук, послышалось дважды: «Спасибо». Третье «спасибо» муж унес с собой в мир иной.

Дед Мадины по материнской линии Дингезхан из рода тарханов, он убил родителей Аюпа – супругов Камалетдиновых. Аюп и сестра Хатира воспитывались в детдомах и только в конце жизни узнали друг друга.

Сложный характер у Ихсанбая Муратова, сына Дингезхана и Барсынбики. Он коварный, настойчивый, не испытывающий мук совести, творит все время только зло. Убийца двух детей Гульбану, он присвоил себе имя убитого им Ишмухамета и жил в деревне, долго не узнаваемый никем. Это от него родились у Галимы дочь, у Сабили – сын, у Гульбану – близнецы-мальчики. Их судьбы не менее драматичны, чем судьбы матерей. Возмездие наступит для Ихсанбая, но позже.

А Барсынбика и Муглифа! Ведуньи, травницы, не только лечащие неподвластные медицине болезни, но и исцеляющие людей от душевных мук. В них воплощены доброта, страдание, терпение, выносливость, ум, мужество башкирских женщин. Они сохранили природную цельность, родственность с землей, глубокое понимание законов ее жизни.

В романе-эпопее судьба каждого героя драматична, вплетена в жизни других действующих лиц необычно, часто неожиданно и загадочно. Именно так Т. Гарипова рассматривает положительные и отрицательные стороны характера людей, в истории государства, в межнациональных взаимоотношениях. Она старалась максимально правдиво проанализировать и оценить ситуацию, доверяясь полностью художественной правде, художническому постижению. У

писательницы Т. Гариповой поиск правды вел к добру и гуманизму, которые восходили к общечеловеческим ценностям. Поэтому у него положительные герои, независимо от национальности, – чуткие, справедливые и добрые люди.

Проза Т. Гариповой оригинальна и неповторима. Автор рассказывает нам о событиях, людях, трагедии и радости жизни, о любви, что соединяет человека и человечество.

В произведении находим функции пейзажа. Он необходим для развития действия, сопровождает развитие внешних событий, играет роль в духовной жизни персонажей, играет роль в их характеристиках.

В эпопее присутствуют разные виды литературных характеров:

- трагические (Дингезхан, Ихсанбай, Галима, Салима, Малика и др);
- романтический (дети Мадины)
- героический (Барсынбика, Мадина, Гульбану, Абдульахат, Хашим и др.);
- сентиментальный (Давид);
- сатирический (Шангарей).

Автор использовала все способы создания характера: авторская характеристика и взаимохарактеристика, портретная характеристика, речь персонажа, интерьер, пейзаж, художественные детали, психологизм, внутреннюю речь и т.д.

Т. Гариповой помогают острее воспринимать позитивные и негативные моменты в характере своих героев глубокое знание своего народа и любовь к нему. В творчестве писателя выявляется могучий дух башкирского народа, его огромный потенциал, способности в искусстве, но также и отрицательные качества.

## ЛИТЕРАТУРА


1. Аҙнағолов Р.Ғ. Йәйғор төҫтәре: ижади портреттар. – Өфө: Китап, 2011. – 464 бит.
2. Аҙнағолов Р.Ғ. Өйөрмәле йылдар ауазы: Таңсулпан Ғарипова ижады. – Өфө: РУҒМҮ, 2005. – 100 бит.
3. Бахтин М.М. Из лекций по истории русской литературы. Вячеслав Иванов // Бахтин М.М. Эстетика словесного творчества. 2-ое изд. М., 1986:394.

4. Ғарипова Т.Х. Илекәй. Повестар һәм хикәйәләр йыйынтығы. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2013. – 408 бит.

5. Гарипова Т.Х. Буренушка: роман-эпопея. – Уфа: Китап, 2006. – 768 с.

6. Гарипова Т.Х. Луна и солнце неразлучны. Повесть, рассказы: [на баш. яз.]. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1990. – 272 с.

© *Идрисов Ф.С., Алибаев З.А., 2021*

**УДК 821.512.141**

*Илсебаева Т.Т., студент*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## УЧАЛЫ РАЙОНЫНДАҒЫ ТУҢҒАТАР АУЫЛЫНЫҢ КИЛЕП СЫҒЫШЫ ХАҠЫНДА

Һәр төбәктең үҙ атамаһы, риүәйәте бар: улар ниндәйҙер тарихи ваҡиғаға, йә кешегә бәйле рәүештә барлыҡҡа килгән һәм халыҡ хәтерендә бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланған.

«Топонимик риүәйәт һәм легендалар араһында генеалогик хикәйәләргә яҡын торған үҙенсәлекле бер төркөм бар: ул – ауыл тарихы» [1: 26], тигән фекерҙә Ф. Нәҙершина. Ғалимә уларҙы ике төркөмгә бүлеп ҡарай, беренсеһен ауылға нигеҙ һалыусы аҡһаҡал исеме менән бәйләп аңлатһа, икенсенсеһенең иҫтәлекле ваҡиғаға алып барып тоташыуын әйтә.

Ауыл исемдәре, тарихы өлкәһендә эшләүсе Ә. Әсфәндийәров, Р. Шәкүр, Ф. Хисаметдинова, М. Усманова, Ю. Әбсәләмов, М. Роднов кеүек ғалимдарҙы ла билдәләп үтергә кәрәк.

Беҙҙең Туңғатар тирә-яҡ ауылдарға ҡарағанда иң олоһолор, уға сама менан иң кәмендә 400 йыл, унық да тарихы Ф. Нәҙершина билдәләп үткәнсә, ике юл [1: 26] менән аңлатыла. Тәүгеһе – ауылға нигеҙ һалыусы Туңғатар ҡартҡа барып тоташа.

Ололар һөйләүе буйынса: бер ҡарттың ике малайы була, береһе – Туңғатар, икенсеһе – Турғай. Улар хәҙерге Ҡаҙаҡстандың Турғай өлкәһенә ҡараған далала йәшәгән. Бер заман шул сал ҡарттың байтак йылҡыһы юк була, быларҙы йән-фарман эҙләйҙәр ти, ләкин тирә-яҡта бер ҡайҙан да тапмағандар.

Аҡһакалдың оло улы Туңғатар бер заман эҙҙәренә төшә лә

төньяҡҡа юл тота. Бик оҙаҡ барғас, әллә күпме көндәр үтә. Туңғатарға йыраҡтан оҙон булып ятҡан тау күренә. Был егет (Туңғатар) әҫелә әллә күпме аттар арытып, алыштырып йылҡыһының юлына төшөп Ирәндек тауының Уй йылғаһы буйында һыу эсеп торған йылҡы малын күрә. Бик ҡыуанып Туңғатар атаһына хәбәр ебәрә:

– Атай, йылҡыны таптым, әйҙә бөтөн зат-ырыу менән бында күсеп киләйек, – ти.

Был Туңғатар Уй йылғаһы буйында нигеҙ һалған һәм күп тә үтмәй ҡалған ырыуҙары ла күсеп килгән. Тик Турғай ҡустыһы атаһы менән ҡалған, ти:

– Беҙ үзебеҙҙең тыуған ерҙә ҡалабыҙ, тигән ти, ә инде уларҙың ырыуҙаштарының яртыһы Турғай менан ҡалған, ә яртыһы Туңғатарға күсеп килгәндәр.

Туңғатар үҙенең ырыуҙаштарын ҡаршы алып, яңы йорттар һалып йәшәп киткәндәр, ауылға Туңғатар исеме биргәндәр, ә Турғай икһеҙ далала ҡалғас ул ҡаҙаҡ далаларының бер өлөшөн Турғай далаһы тип йөрөтә башлағандар.

Бында берҙән, ауыл кеше исеме менән бәйле булһа, икенсенән, башҡорттарҙың кәсебе – йылҡысылыҡ менән шөғөлләнеүе лә уларға яңы ерҙәр асырға ярғам итә, сәбәпсе булып тора.

Икенсе төргә ҡараған, атай-картатайҙарыбыҙ һөйләгән риүәйәттәр ҙә, үҙенең ҡыҙыҡлы ваҡиғаһы менән иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә. Был риүәйәттең килеп сығышын 1608 йылдарға алып барып бәйләйҙәр. Ул түбәндәгесә:

Борон-борон заманда йәшәгән ти бер сал бабай. Ул замандарҙа беҙҙең халыҡ йылҡы, һарыҡ, һыйыр малы аҫрап, күсмә тормош менән көн күргән. Ултырған ерҙәрендә малдар үләндәрҙе тапап бөтһә, ата-бабаларыбыҙ тирмәләрен йыйып, кәрәк-ярағын аттарға тейәп, икенсе урынға күсер булған.

«Яңы урынға килеп еткәс тирмә йылытырға, аш бешерергә утын кәрәк булған, күсмә халыҡтар алдан утын әҙерләмәгән (бөгөнгө һымаҡ) йәш ир-егеттәр утын ҡырҡып ташымаған, уларҙың эше һунар, балыҡ аулау, көтөү көтөү йә ил һаҡлау булған, шуға күрә ҡатын-ҡыҙҙар, йә булмаһа йәш егет-елкенсәктәре, ҡарт бабайҙар ҡайһы йәйәүләп, ҡайһы үгеҙ егеп утын ташығандар».

Был риүәйәтә лә беҙҙең бик боронғо сал бабайыбыҙ үгеҙ егеп ауылдан алыҫыраҡ ергә утынға сығып китә. Бабай балтаһын тотоп ҡоро-һарыны күп итеп йығып арбаһына тейәгәнсе эңер төшә, эш

башламаҫ борон айыу тунын бер ағасҡа элгән була. Арбаһына утын тейәп арҡан менән бәйләгәнсе ҡараңғы ла төшөп китә. Үгеҙен ҡайтыу юлына бора ла мылтығын алып тунына ынтылһа, ҡараһа бер ҙур айыу баҫып тора. Бабай һыҙма мылтығын тоҫҡап атып ебәрә, үгеҙе мылтыҡ тауышына ҡурҡып, йән-фарман ҡайтыу яҡҡа саба, ә ҡарт үгеҙенең һыртынан…

Икенсе көн ҡарт ауыл халҡы менән утын ҡырҡҡан ергә барып ҡараһалар, бер кәкре-бөкрө үҫкән тәпәш кенә ҡарағаста эленеп торған тишелеп бөткән айыу тунын күреп ҡарттың күҙен дә астырмай көләләр, ти. Шул ҡарт оятынан нимә эшләргә белмәй шул ергә өй һалып ғаиләһе менән тороп ҡала, ти. Аҙаҡтан яйлап «заводчиктар» башкорт ерҙәрен талап ала башлағас, башҡорттың иркенләп күсеп йөрөргә ере бөткәс, яйлап күсмә тормоштан ултыраҡ тормош менән йәшәй башлайҙар.

Шулай итеп, Туңғатар нигеҙ һалған тигән вариант менән бер рәттән был көләмәс формаһындагы версия ла беҙҙең ауылда бик борондан һаҡланып килә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Икенсе том. – Өфө: Китап, 1997. – 440 бит.
2. Усманова М.Г. Имя отчей земли: Историко-лингвистическое исследование топонимии бассейна реки Сакмар. – Уфа: Китап, 1994. – 272 с.
3. Хисамитдинова Ф.Г. Башкирская ойконимия XVI–XIX вв. – Уфа: Башк. кн. Изд-во, 1991. – 304 с.
4. Шакуров Р.З. По следам географических названий. – Уфа: Башкнигоиздат, 1986. – 184 с.


*© Илсебаева Т.Т., 2021*

**УДК 821.512.141**

*Ишкина А.И., студент*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## НОҒМАН МУСИНДЫҢ «КЕШЕ ҺУҠМАҒЫ» ӘҪӘРЕНДӘ ГЕРОЙ КОНЦЕПЦИЯҺЫ

Герой концепцияһы төшөнсәһе эсендә ике терминды күҙалларға

мөмкин: герой һәм концепция. Герой терминын тикшеренеүселәр төрлөсә төҫмөрләй. Шулай ҙа улар араһында уртаҡ фекер булып герой – ул әҫәрҙәге төп персонаж тигән раҫлау тора. Төрлө авторҙар биргән аңлатмалар араһынан Драгомирецкая биргән термин күңелгә ятышлыраҡ.

«Герой – это конкретная личность, персонаж произведения. В то же время это и народ, и природа, и человечество, и весь мир, входящие в ткань произведения» [3]. Ысынлап та, герой әҫәрҙә төп урынды биләй, сюжет ағышын билдәләй торған феномен. Ә концепция төшөнсәһенә килгәндә, уға шундай аңлатма бирелә: «концепция (от лат. Conceptio понимание, система), определенный способ понимания, трактовки какого-либо предмета, явления, процесса, основная точка зрения на предмет или явление, руководящая идея для их систематического освещения» [2].

Шулай итеп, был ике төшөнсәне берләштереп, беҙ герой концепцияһы тигән яңы термин килтереп сығарабыҙ. Герой концепцияһы – ул әҫәрҙәге төп персонаждың әйләнә-тирәгә, донъяға ҡарашы. Был тикшеренеү эшендә беҙ ошо герой концепцияһын бөгөнгө көндә лә актуаллеген юғалтмаған темаға арналған Ноғман Мусиндың «Кеше һуҡмағы» әҫәрендә күҙәтеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Яҙыусы геройҙарын төрлө ситуацияларға ҡуйып, уларҙың кем икәнен күрһәтә. Кеше тигән бөйөк исемгә лайыҡ булыу өсөн кәрәк булған төп төшөнсәләр, шулар араһында намыҫлылыҡ, үҙ тыуған төйәгенә, туғандарына һөйөү, эшенә яуаплылыҡ менән ҡарау тураһында бәйән итә.

Герой концепцияһы был әҫәрҙә бер нисә аспекттағы бәйләнеш аша асыла һәм кешенең донъя менән бәйләнешенә тап килә. Кеше – тәбиғәт, кеше – кешелеклелек, кеше – эш, кеше – тыуған яҡ, кеше – ғаилә.

**Кеше – эш** мөнәсәбәтенә килгәндә, әҫәр башында уҡ беҙ Айнурҙың эшенә нисек иғтибарлы ҡарауын күрәбеҙ. Газета редакторы Айнурҙы заводка материал ойоштороп алып ҡайтырға ебәрә. Завод директоры Айнурҙы бер материал да юҡ әле, тип сығара. Юл аръылы Айнур, буш ҡул менән ҡайтмайым тип, төҙөлөш тресына һуғыла. Ләкин унда эштәр һүлпән була, тәнҡит мәҡәләһе генә яҙырлыҡ. Айнур, юл аръылы ғына һуғылған ер тураһында тәнҡит мәҡәләһе яҙып тормайым тип, китә. Ошо командировкаһынан, эште эшләй алмауына, уның кәйефе төшөп ҡайта.

Эшенә Айнур ныҡ иғтибарлы ҡарай. Дежур булған ваҡыттарында ла иртүк килеп етә эшкә, һәр ваҡыт үҙ эшенең һөҙөмтәһен ҡабат-ҡабат тикшерә. Редактор уның газетаһында хата тапҡас, Айнур ҡайғыра,

төшөнкөлөккә бирелеп, икенсе бүлеккә эшкә күсәм тип тә уйлап бөтә, ләкин, ныҡлап уйлап, тағы ла тырышыбраҡ эшләргә кәрәк, тигән ҡарарға килә.

Редакцияға, әллә нисәмә эшсе ҡул ҡуйған хат килгәс, уны тикшереү кәрәк була, һәм эшенә нисек ҡарауын тикшереү ниәте менән редактор был эште Айнурға ҡуша, уның ҡатынының атаһы ошо төҙөлөштә етәксе вазифаһын башҡара. Аталмасов бер объектты төҙөлөп бөттө тип, акт сығарып, тапшырған була. Эшселәр ундағы эште бөтөрә алмайынса ыҙаланып, редакцияға хат яҙалар. Был һорау буйынса Айнур ныҡ итеп уйлана. Был тикшеренеүҙе өҫтөнә алмаһа, үҙенең намыҫы тыныс булмаясағын аңлай. Тиккә генә ул «эшем – минең намыҫым» тип әйтмәй.

Редактор, Айнурҙы бүлек мөдире итеп ҡуйғас, тәүҙә ул квартал планын үҙгәртеп ҡорорға тотона. Эшен яңы күҙлектән, үҙенсә башлай.

Уның икенсе шөғөлө булып, шиғыр яҙыу тора. Айнур берәй шомло, йәнде тетрәткес ваҡиғалар булған ваҡытта яҙырға ятҡан була уларҙы. Башлаған шиғырының осона сыҡмайынса, урынынан ҡуҙғалмай. Быныһы, шулай уҡ, уның эшендәге ныҡышмалылығын күрһәтә.

**Икенсе, кеше – тыуған яҡ мөнәсәбәтендә** Айнурҙың ике йыл буйы ҡайтмаған ауылына булған хистәренә, уйланыуҙарында сағылыш таба. Әсәһенән хат алғас, Айнур үҙ ауылының тарихын барлап сығып, ауылына ҡайтырға була. Юлдан атлап барғанда күңеленә һалҡынлыҡ йүгерә, сөнки юлдар ныҡ бөткән була, унда ат, арба эҙе лә булмай, ә тракторҙар ерҙе боҙоп, соҡорлап бөткән була. Ауылына һырттан ҡарап та, иҫе китә, ул үлгән һымаҡ була. Ауыл буйлап йөрөргә сыҡҡас та, ғәжәпләнеүе тағы арта. Өйҙәр ҡурҡыныс хәлдә була. Тере йәне булған ете-һигеҙ өйҙө генә күрә. Шунан, Айнур үҙ ауылының яҙмышы тураһындағы уйҙарын мәҡәлә итеп баҫтырып сығарырға була.

Фәниләнең әсәһе – Нәбирә менән күрешкәс, Нәбирә уның сыҡҡан китабы уларҙа барлығын әйтә һәм шунан Айнурҙың Йәнүҙәккә арналған шиғырын уҡырға ҡуша. Айнур уны китаптан уҡымай, ә яттан һөйләй, сөнки ул ихлас яҙылып, тыуған яҡҡа һөйөү хисе менән тулы була. Күңелендәге ауылына булған ярһыуын ул шиғыр аша булһа ла баҫҡан була.

**Кеше – тәбиғәт мөнәсәбәте лә айырым урынды биләй.** Ауылына йәйәү атлаған ваҡытта, тәбиғәт яҙмышы тураһында уйлана: киҫелеп бөтөп барған урмандар, ҡороған йылға...

Урман хужалығы министерствоһында министр менән диалогында:

«Урман – ерҙең күрке, матурлығы, биҙәге. Күркәмлек, матурлыҡ – эстетик категорияның төп элементтары, тимәк, урман байлыҡ һәм әхлаҡи категория ғына түгел, эстетик категория ла» [1: 182], тигән фекере буйынса Айнур үҙен ысын мәғәнәһендә урман һаҡсыһы тип күрһәтә.

**Кеше – ғаилә** мөнәсәбәтенә туҡталып китһәк, бында беҙ Айнурҙың бик тә бәхетле түгел икәнен күрәбеҙ. Ҡатыны уны үҙ тоҙағына ныҡлап алған була. Айнур ҡайһы бер саҡтарҙа уға аптырай, ҡатынын ныҡлап аңлап та етмәй. Ҡатыны һәр саҡ һәр нәмәгә зарланған була. Уның характерындағы Айнурға оҡшамаған төп һыҙат булып, уның мәҙәниәтле булып ҡыланыуы. Ҡатыны һигеҙ класлы белем менән генә, бер ҡайҙа ла эшләп тә ҡарамаған килеш, театр, кино сфераһында ныҡ шәп фекер йөрөтә. Шулай ҙа Айнур уны хөрмәт итә. Мөхәббәтте лә Айнур намыҫ эше, ти. Гөлнараның әсәһе килеп тауыш ҡуптарып киткәс, Айнур әгәр ҙә уны өйҙән ҡыуһалар, нимә булыр икәне тураһында ла уйлай. Бигерәк тә ҡатынын йәлләй. Шулай уҡ, ниндәй генә ауырлыҡтар булһа ла, ҡыҙын етем итмәйем, ти.

**Кеше – кешелеклелек аспектына** килгәндә, беҙ Айнурҙың әхлаҡи яғына байҡау яһаясаҡбыҙ. Әҫәрҙең башында уҡ беҙ Айнурҙың китапка булған мөнәсәбәтен күрәбеҙ. Китапты ул «күңел аҙығы», ти. Ә ҡатыны сит ил авторҙарының китаптарын өйҙә йыһаз һымаҡ күреп кенә йыйған була. Айнур менән Гөлнараның ҡыҙы ла шул сит ил авторҙарының китаптарын уҡый башлаған була. Айнур шуға ла үҙен ғәйепле һанай.

Ярҙамсыллыҡ төшөнсәһенә килгәндә, беҙ уның әҫәрҙә ныҡлы сағылышын күрәбеҙ. Тәүҙә ул сағылыш ала Айнурҙың Фәниләгә, яңы ғына ҡалаға килгән ауылдашына, бар яҡтан да ярҙам күрһәтеүе, уны төҙөүселәр әҙерләй торған училищеға урынлаштырыуы.

Ҡала кешеләренең бер-беренә ярҙам итеүҙе нисек аңлауы Айнурҙы аптырата. Әсәһенең күршеһе Сабирйән ярҙам тураһында шундай мәғәнәле һүҙҙәр әйтә: «Ярҙам тип... Әҙәм балалары әүәл-әүәлдән бер-береһенең ярҙамына мохтажлыҡ кисергән. Донъяның бар йәме – ярҙамлашып йәшәүҙә, Әминә», ти. Ошо һүҙҙәрҙән һуң, Айнур бер хәлде иҫенә төшөрә. Ҡалала күршеләре мебель ташыған була өйҙәренә, Айнур шунда уларға ярҙамлаша. Мебель хужаһы шунда уға, ярҙамлашҡан өсөн, аҡса һона. Ләкин, Айнур алмай, ә ныҡ аптырай. Ҡатыны ла уға асыулана, авторитетты төшөрөп, кешегә ярҙам итеп йөрөйһөң, ти. Бына бит, ҡала кешеһе бер-беренә ярҙам тигән нәмәне бөтөнләй белмәй йәки икенсе төрлө аңлай, тип ғәжәпләнгән була

Айнур ул саҡта.

Айнурҙың кешелекле икәнен күрһәткән тағы бер сифат булып, уның кеше яҙмышы менән ҡыҙыҡһыныуы була. Бүлек мөдире Айнурға леспромхоздың дәүләт планын нисек үтәүе, үтәмәһә, ниңә үтәмәүе хаҡында мәҡәлә яҙырға ҡуша, ләкин Айнурҙың күңелендә икенсе ниәт була. Ул урман-тау араларында ултырған ауылдарҙың яҙмышы, тимәк, шунда йәшәүсе кешеләрҙең киләсәге тураһында яҙырға уйлай. Был уйын тормошҡа ашырыр өсөн герой төрлө ойошмаларға йөрөй, кешеләр менән аралаша, фекер туплай.

Ауылы тураһында уйлап ятып, Айнур әсәһен ҡалаға үҙе янына алып ҡайтырға тип уйлап ҡуя. Өйө менән хушлашҡанда, әсәһе үҙе менән кәфенлектәрен дә алыуы тураһында әйтә һәм берәй хәл булып ҡуйһа ире янына алып ҡайтып күмергә ҡуша. Айнур, уның кәйефен боҙмаҫ өсөн, теләгенә ҡаршы бармай, ризалыҡ белдерә.

Өй менән хушлашҡанда, Айнур үҙенең балалығын иҫенә төшөрә. Ошо өй эсендә нәмәләр бар икәнен ҡарап сығып, үҙендә әйтеп аңлатҡыһыҙ ғәйеп тойғандай була.

Редакцияла эштәр күбәйеп киткәс, редактор, отпускынан Айнурҙың хеҙмәттәшен саҡыртырға тәҡдим итә. Ләкин Айнур, үҙем дә өлгәшермен тиеп, хеҙмәттәшен отпускынан тартып алмаҫҡа ҡуша.

Үҙ эше менән мауығып, ябай кешеләрҙән үҙен өҫтөн тотмай геройыбыҙ. Әсәһе янына ҡайтырға булғас, Республика газетаһының хәбәрсеһе булараҡ, юлда ул махсус машина ла алырға мөмкин ине, ләкин ул башҡа ябай кешеләр һымаҡ, үткенсе машиналар менән йөрөй. Ауылына ла ат көтөп тормай, ә йәйәү атларға сыға.

Әллә нисәмә эшсе ҡул куйып ебәрелгән хатты тишерергә барыр алдынан, Айнурҙы төрлө уйҙар солғап ала. Был эште башҡарыуҙан ул баш та тартырға итә, ул да булһа ғаиләһе, әсәһе өсөн. Ләкин намыҫы уға тынғылыҡ бирмәйәсәген аңлай Айнур. Икеләнмәҫкә, икегә бүленмәҫкә, йөрәк ҡушҡанса эшләргә һәм йәшәргә. Шунан башҡа юл юҡ! Тигән бойороҡ менән эш итә ул.

Геройҙың концепцияһын төрлө аспекттар аша сағылышын тикшергәс, беҙ Айнурҙың уйҙарына туҡталып китәйек. Был уйҙар ҙа геройҙың концепцияһын асырға ярҙам итә. Ул кешенең тормошо, ғүмере, йәшәү мәғәнәһе тураһында уйлана, көрһөнә. Һәр кешене, дәрәжәһенә лә ҡарап тормай, тормош аҙағында бер генә яҙмыш көтә – ул үлем. «Әгәр кеше үҙенең һуңғы көнө тураһында ғына уйлап йәшәһә, ер йөҙөндәге тормош бер урында ҡатып ҡалыр ине. Кешенең ғүмер

юлы – уның үлемгә ҡаршы көрәшеп үткәргән күҙ асып йомған аралағы мәл генә түгелме? Һәм ошо көрәш донъяны үҙгәртеүсе, тормошто алға алып барыусы төп көстәр, моғайын», – тигән уй килә Айнурға. Әлбиттә, был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк көслө. Кешенең тормошо – ул көрәш булырға тейеш.

Әҫәрҙең исемен, төп фекерен аңлатҡан һуҡмаҡтар тураһындағы уйҙары бигрәк тә күңелгә ятышлы. Һәр әҙәм балаһының донъяла үҙ һуҡмағы бар, ти Айнур. Кеше ул һуҡмаҡтарҙы үҙе һала. Кемдәлер ул һуҡмаҡтар намыҫлы, кемдәлер серле, йәшерен, әшәке уйлы.

Үрҙә әйтелеп киткәндәрҙән Айнур беҙҙең күҙ алдына идеаль герой булып баҫа. Әммә, кешелә бөтә нәмә лә идеаль була алмай. Шул йәһәттән, Айнурҙың оҡшамаған яғы булып, уның йәшлектәге килгән ҡарары булып тора. Герой, армиянан ҡайтып, Өфөлә ҡала. Ауылы ташландыҡ хәлдә булғас, унда ҡайтырға ла уйламай. Тик, был хаталаныу булалыр тип тә уйларға була. Уның былай ауылын, әсәһен ташлап китеүе бик тә оҡшап етмәй. Өйләнер, донъя ҡыуа башлар, уҡыу һәм шиғыр яҙыу ҡайғыһы ла китер – бына шундай уйҙар менән йөрөй ул Өфөлә. Бәлки, ҡайтып, әсәһе янында булып, ул тағы ла яҡшыраҡ тормош ҡорор ине тигән уйҙы ла ситтә ҡалдырырға ярамай. Ләкин, ул үҙенең хатаһын аңлап, үҙ күҙе менән күреп, уны төҙәтер өсөн аҙымдар яһай башлай.

Был статьяны Джордано Бруно әйткән фәһемле һүҙҙәр менән тамамлау уңышлы буласаҡ тип уйлайбыҙ. «Стремление к истине – единственное занятие, достойное героя». Ысынлап та, Айнурға был һүҙҙәр тап килеп тора, уның ысын аҫылын беҙгә асып бирә. Шулай итеп, геройҙың концепцияһын беҙ асыҡ күҙ алдына килтерәбеҙ: ул ниндәй генә ваҡиғалар булһа ла, саф намыҫлы булып ҡалыу һәм дөрөҫлөккә ынтылыуға өндәй.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Мусин Н.С. Кеше һуҡмағы. Повестар. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1987. – 304 бит.
2. Ильичёв Л.Ф., Федосеев П.Н., Ковалёв С.М., Панов В.Г. Философский энциклопедический словарь. – М.: Советская энциклопедия, 1983. – Режим доступа: https://dic.academic.ru/dic.nsf/enc_philosophy/2537/КОНЦЕПЦИЯ. – Дата обращения: 10.10.2020.

3. Муллагулова А.М. Концепция героя в социально-бытовых башкирских рассказах [Электронный ресурс]. Режим доступа: **https://cyberleninka.ru/article/n/kontseptsiya-geroya-v-sotsialno-bytovyh-bashkirskih-rasskazah**. – Дата обращения: 10.10.2020.

*© Ишкина А.И., 2021*

**УДК 81**

*Иштуганова Л.Р. ,студент*
*Научный руководитель: Г.Х. Бухарова, д. филол. Н., профессор*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

## О ЛЕКСИЧЕСКИХ СРЕДСТВАХ ВЫРАЖЕНИЯ ЭМОЦИЙ В БАШКИРСКОМ МИФОЛОГИЧЕСКОМ ЭПОСЕ

Эмоции составляют неотъемлемую часть человеческого существования и играют значительную роль в жизни людей. В процессе познания предметов и явлений действительности мы реагируем, проявляем свое отношение в различных оценках, чувствах, что, несомненно, находит свое выражение в языке. Всевозможные эмоциональные переживания, обнаруженные в словах и высказываниях, идентичны всем использующим данный язык. По крайней мере, трактуется это тем, что эмоциональный состав указанной языковой общности явно социологизированы и психологизированы или другими словами, являются видовым национальным опытом народа, поскольку имеют в себе, как форму оценивания среды обитания языка, так и являются значительным фрагментом данной среды обитания и картины мира в целом. Исходя из вышесказанного, эмотивность, являющаяся лингвистической категорией, обладает имманентным свойством языка проявлять психологические (эмоциональные) состояния и переживания личности, сквозь особые единицы языка и речи – так называемые эмотивы [4: 5-6].

Эмотивность как одна из базовых категорий текста является одним из основных его коммуникативных качеств. Данная категория текста соотносится с содержащимися в нем определенными знаниями, которые воплощают эмоциональные интенции и моделируют возможные эмоции адресата, связанные с восприятием и

интерпретацией действительности. Эмотивность текста актуализируется в речи через эмотивно нагруженные текстовые компоненты.

Эмоциональность – тесно связана с экперссивностью. Термин «экспрессивность» трактуется как «выразительность», а «экспрессия» — как выразительно-изобразительные качества речи, отличающиеся от её обычной (стилистически нейтральной) формы, придающие ей образность и эмоциональную окрашенность [1: 515].

Эмоции как лингвистический феномен реализуются двумя способами: вербальным и невербальным. На невербальном уровне выражений, эмоции осуществляется с помощью жестов, мимики, поведения. А на вербальном уровне выражением эмоций является эмотивно-оценочная лексика, маркерами эмоций выступает лексика, выражающая эмоции, лексический повтор, междометия и т.д. Эмотивное пространство текста реализуется в блоках высказываний, содержащих семантику эмоционального состояния [2: 217].

В данной статье мы проанализируем некоторые вербальные средства выражения семантики эмоционального состояния в эпосах «Урал батыр», «Аҡбуҙат».

В эпосе «Аҡбуҙат», средством выражения эмоциональной экспрессии выступает междометие, где герой выражает печаль на определенную ситуацию.

*– **Ай**, олатай, әле һин уны һөйҙәйһең, буғаны буған инде.*

*– Ох, дедушка, что об этом говорить, что было, то было).*

Чаще всего для выражения эмотивности в тексте используются эпитеты. В эпосе «Урал-батыр» эпитет *«яуыз»* выступает в качестве выражения эмоции *«ужаса»* по отношению к смерти.

| | |
|---|---|
| *Йәнде алыр **яуыз Үлем*** | *Смерть, что лютой злобой полна.* |
| *Кешегә ҡулын һалғанда,* | *Смерть, что нашим глазам не видна,* |
| *Ирмен тигән ир-батыр* | *Пред нашими не взойдет ли глазами.* |
| *Шып-шым ҡарап торормо?* | *Не расправится ли и с нами?»* |

Одним из приемов, которые применяются для выражения эмоций, выступает метафора:

*Ҡан эсергә уҡталған*
***Уҫал йөрәгең** бөтһөн.*
*(Кровь пить устремившееся*
*Злое сердце твое пусть погибнет). («Урал-батыр»)*

В эпосе «Аҡбуҙат» фразеологизм *«ҡанлы күҙ йәше»* описывает эмоциональное состояние героя, пережившего душевную боль и горе:

*Шунан бирле аҫҡа ҡаңғырып йөрөйөм, – тип* ***ҡанлы күҙ йәше*** *менән һөйләп, илай торғайны ул ҡатын.*

*(С тех пор хожу я голодная, – с кровавыми слезами на глазах рассказывала женщина).*

Как показывают примеры, в эпосах «Урал-батыр» и «Аҡбуҙат» одним из средств выражения эмоционального состояния героев выступают лексические средства: *уҫал йөрәк, ҡанлы күҙ йәш, яуыз үлем* и т.д. Можно сделать вывод о том, что эмотивность является важным компонентом любого текста. Она проявляется на лексическом уровне, на уровне предложения и текста. Эмотивность – важная текстообразующая категория, а также инструмент для выделения и подчеркивания необходимых логических связей, убеждения читателей и фокусировки внимания на ключевых моментах текста.

## ЛИТЕРАТУРА


1. Ахманова О.С. Словарь лингвистических терминов. – М.: КомКнига, 2007. – 576 с.
2. Бухарова Г.Х. Башкирский народный эпос «Урал батыр»: когнитивно-дискурсивный и концептуальный анализ. – Уфа: Вагант, 2010. – 352 с.
3. Ионова С.В. Эмотивность текста как лингвистическая проблема: Дис.канд.фил.наук. – Волгоград, 1998. – 197с.
4. Шаховский В.И. Значение и эмотивная валентность единиц языка и речи // Вопросы языкознания. – 1984. – №6. – С. 97–104.
5. Шаховский В.И. Категоризация эмоций в лексико-семантической системе языка. – Воронеж, 1987. – 190 с.


© *Иштуганова Л.Р., Бухарова Г.Х., 2021*

**УДК 821.512.141.09**

*Йыһанова Н.Р., магистрант*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

# БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫ ЙЫЛДАРЫНДА БАШҠОРТ ПОЭЗИЯҺЫ

Бөйөк Ватан һуғышында башҡорт яҙыусылары ла ил азатлығы өсөн көрәштә ҡатнаша. Тыуған илдең азатлығы өсөн көрәш әҙәбиәт алдында ҙур һәм яуаплы бурыстар ҡуя. Шағирҙар ҡәләм һәм штык менән дә көрәшә. Нәфис һүҙ ярҙамында халыҡта Тыуған илгә тәрән һөйөү, яуыз дошманға тәрән нәфрәт тойғоһон тәрбиәләү кәрәк була. Уларҙың шиғырҙары үҙ заманында яҡташтарыбыҙҙы хеҙмәткә һәм көрәшкә рухландырһа, улар бөгөн дә сафта ҡала, халыҡ күңелендә лайыҡлы урын тота, кешеләрҙе уяулыҡҡа саҡыра, тыныслыҡҡа өндәп тора.

Х. Кәрим, Ә. Вәли, Ғ. Әмири: Кулибай, Н. Нәжми, Т. Арслан, Ғ. Рамазанов һәм башҡа бик күп яҙыусылар фронт яланында дошманға ҡаршы аяуһыҙ көрәштә ҡатнашалар. М. Кәрим, А. Карнай, Ә. Бикчәнтәев, Ҡ. Даян кеүек әҙиптәр, төрлө фронт газеталарында эшләйҙәр, хәрби хәбәрсе булалар.

Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай. Рәхимһеҙ һуғыш тиҫтәләгән йәш шағирҙарҙың ғүмерен өҙә. Мәҫәлән, М. Харис, М. Хәй, Н. Ҡәрип, Х. Ҡунаҡбай кеүек яҙыусылар һуғыш яланында батырҙарса һәләк булып ҡалдылар. Яу ҡырында ятып ҡалған, әле таланттары ла ныҡлап асылырға өлгөрмәгән йәштәр араһында М. Абдуллин, Ғ. Йосопов, Б. Моҡамай, Т. Морат: Ханов: Кинйәкәй кеүек өмөтлө ижади ҡәләмдәр байтаҡ була.

«Шағир һәм һалдат… Былар, әлбиттә, үҙ-ара һыйышмаған төшөнсәләр түгел. Илде дошман килеп баҫҡанда, борон-борондан сәсәндәр ир-егеттәрҙе изге яуға саҡырып оран һалыр булғандар, ҡулдарына уҡ-һаҙаҡ алып, ат менгәндәр, яу батырҙарын данлап ҡобайырҙар, йырҙар, бәйеттәр сығарғандар», – тип яҙа Нур Зарипов. Һуғыштың тәүге көндәренән үк яҙылған шиғырҙарҙа Тыуған илгә ҡайнар һөйөү, дошманға ҡарата нәфрәт мотивтары сағыла. Һуғышҡа киткән яугирҙар ил алдына еңеү менән ҡайтырға ант итәләр. Мәҫәлән:

Хуш бул, Башҡортостан!
Һине
Артыҡ һөйгән өсөн

Ҡалдырам,

Эйе, беҙ ҡайтырбыҙ
Тиңһеҙ шатлыҡ,
Еңеү алып,
Бөйөк дан менән (Төхфәт Морат «Хуш бул»).

Патриот шағир Хәниф Кәримдең шиғыры бар халыҡтың күңелендә тыуған тойғоно сағылдыра һәм күп митингыларҙа хәрби оран булып яңғырай, ир-егеттәрҙе яуға саҡыра:

Бер кемгә лә бирмәҫ халҡым
Заводтарын, шахта, тау-ерен.
Үлемен һиҙенеп ҡоторонған дошман
Ошо ерҙә табыр ҡәберен!

Йәки:

Үлер, иптәш, белмә ҡыҙғаныу,
Ер хаҡына үлтер дошманды,
Үлтер уны дуҫлыҡ хаҡына,
Ҡырҙарҙан ҡыу ҡанлы томанды (М. Харис. «Үлтер уны»).

Поэтик әҫәрҙәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе, мотивтары бер үк булһа ла, һәр яҙыусы уны үҙенсә сағылдыра.

Ҡайһы бер шиғырҙар дошман яуына ҡаршы берҙәм күтәрелеүгә саҡырыусы Ватан ораны булып яңғырай. Ғ. Әмири «Ҡуҙғал, Урал!» тигән шиғырында ҡобайыр стилендә яҙа, уны агитшиғыр поэтикаһына яйлаштыра:

Урал, Урал,
Ҡалҡын, Урал,
Талпын Урал!
Ҡуҙғал, Урал! Ҡуҙғал, Урал!
Ҡулға ал ҡорал! Ҡулға ал ҡорал!

Яу йылдарында публицистик лирика киң таралыу ала. Мәҫәлән:

Ғәфү ит, дуҫҡай, ҡәбереңде
Сәскә менән биҙәп торманыҡ,
Һәйкәл өсөн баш осоңа тағы
Йондоҙ-фәлән яһап ҡуйманыҡ.
Үҙ окобың – һинең ҡәбереңбулды,
Һәм һин – һалдат – уны аңларһың:
Хаҡыбыҙ юҡ беҙҙең үпкәләргә
Ҡаты яҙмышына һалдаттың (Ф. Бикбов. «Ҡотлоғужа һалдат»).

Публицисик лириканың киң таралған төрө – наказдар. Улар, ғәҙәттә, улын яуға оҙатҡан ата-әсәнең фатихаһы. Быҙдай әҫәрҙәрҙә әсә образы Ер-әсә образын аса, әсә фатихаһы Тыуған ил наказы дәрәжәһенә күтәрелеп дөйөмләштерелә. М. Кәримдең «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!» шиғырында әсә образын Тыуған ил-әсә образына тиңләп һүрәтләү ярылып ята.

Сәләх Кулибайҙың һуғыш йылдарындағы ижадына ла шул осор бөтә поэзияға хас булғанса патриотизм, халыҡтар берҙәмлеге хас. Һуғыш йылдарында «Н-гә», «Йылдар, йырҙар», «Әле көҙ», «Окоптағы йыр», «Һөжүм мәле», «Йоҡоһоҙ төндәрҙә», «Һалдат хәтирәһе» һәм башҡа шиғырҙарын яҙа. Уның халҡына, иленә һөйөү, дошманына нәфрәт тулы лирик геройы тыуған яҡтарына еңеү менән ҡайтып, тыныс тормошта йәшәргә хыял итә:

Хәҙергә көҙ. Ошо ерҙә
Шундай сыуаҡ яҙ булыр;
Дошман уты яумаҫ унда,
Сауҡа үҫтерер суғын («Әле көҙ»).

Һуғыш башланғас күп кенә шағирҙар яугирҙарҙың батырлығын һүрәтләй:

– Ватан өсөн! –
Ауыр снарядтар
Дошман окоптарын ҡуптара.
– Ватан өсөн!
Танкылар, «катюшалар»,
Самолеттар алға уҡтала (Т. Морат. «Ватан өсөн»).

Мәлих Харистың поэзияһында ла батыр һалдат образы үҙәктә тора. Ул «Батыр тураһында баллада», «Хат», «Онотмаһын мине Тыуған ил» тигән поэтик әҫәрҙәрендә батыр һалдаттың үлемһеҙлеген данлай. Бала әсәһен ҡосҡан кеүек, яу ҡырында ерҙе ҡосаҡлап ауған йәш егеттең үлемен күреп, ул:

Эй, ғүмерҙең һуңғы сәғәте,
Һин миңә лә шулай күкрәп кил.
Батырҙарын иҫкә алғанда,
Онотмаһын мине лә Тыуған ил, – тип яҙа.

М. Харис үҙенең «Хат» шиғыры һалдаттың әсәһенә яҙған хаты формаһында яҙылған, ул һалдат батырлығының үлемһеҙлегенә ишара яһай. Хатта Тыуған ил, ҡәҙерле халҡы һәм әсәһе өсөн яуға инеүен дәлилләй: «иртә таңдан һуғыш барҙы һинең өсөн дә» тип күрһәтә

шағир. Шулай уҡ шағир әсәһен йыуата. Ул үҙенең үлемен алдан һиҙгәндәй була. Ысынлап та, шағирҙың ғүмере яу ҡырында иртә өҙөлөп ҡала, ә ижады күптән инде үлмәҫ йырға әйләнгән.

Х. Кәрим, Ғ. Әмири, Ә. Вәли, Б. Вәлид, Н. Нәжми, Ғ. Рамазанов, Т. Арслан, Х. Ғиләжев, Ш. Биҡҡол кеүек шағирҙарҙың яу юлдары, һалдат тормошо, һуғыш күренештәре төрлө яҡлап һүрәтләнә.

Б. Моҡамайҙың «Дөмөк һин әйҙә», «Дошман еңелде», «Урал егете», «Ун алты батыр», «Исеме билдәһеҙ герой», «Иҙел егете» кеүек героик темаға яҙылған шиғырҙарында ла һуғышсыларҙың ҡаһарманлығы яҡтыртыла.

Ҡ. Даян «Тыуған ил» шиғырында илһөйәрлек идеяһының көсөн лирик герой исеменән бик нескә һәм үтемле итеп әйтеп бирә. «Шайморатов генерал» шиғыры (З. Исмәғилев көйө) менән шағир дивизия командирына ғына түгел, ә үҙенә лә үлемһеҙ һәйкәл ҡоя.

Дүрт йыл эсендә шағирҙар утыҙға яҡын баллада һәм поэма ижад итә. М. Кәримдең «Декабрь йыры», «Үлмәҫбай»: Кулибайҙың «Бөйөк дуҫ тураһында», Ғ. Рамазановтың «Украина тураһында йыр», Ә. Вәлиҙең «Ғата Иҙелбаев» поэмалары, М. Харистың «Батыр тураһында баллада» кеүек әҫәрҙәре поэтик оҫталыҡтың аныҡ өлгөләре булып торалар.

Б. Моҡамайҙың фронт шарттарында ижад ителгән «Таня» исемле поэмаһы Зоя Космодемьянскаяға бағышланған, был әҫәр ҙә илһөйәрлек рухы менән һуғарылған. Әҙип Таняның батырлығын бына нисек сағылдыра:

Ул килә, унын билендә
Бензинлы бутылкалар.
Килә, хәрби складҡа
Ҡабыҙырға тип пожар.
…кеҫәһенән шырпы ала
Ут төртөргә бензинға.
Ул һыҙыр бына шырпыһын
Складты ут алыр…

М. Харис «Батыр тураһында баллада» әҫәрендә лә героик темаға мөрәжәғәт итеп, немец илбаҫарҙарына ҡаршы барған һуғышта ҡаһарманлыҡ күрһәткән һәм үлемесле яраланған батыр һалдат образын тасуир итә:

Ул йығылды…
Дошмандарға утлы асыу менән

Янды унның тынмаҫ йөрәге. Һуғыш ваҡытында Ҡ. Даян: Кулибай кеүек шағирҙарҙың ижадында таҡмаҡ һәм сатирик йырҙар ҙа әүҙемләшеп китә. С. Кулибайҙың «Сатирик куплеттар», Ҡ. Даяндың «Фронт йырҙары» тигән таҡмаҡтарын халыҡ поэзияһы рухында ижад итәләр.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында поэзия күтәренкелек һәм үҫеш кисерә. Яңы тема, яңы геройҙар барлыҡҡа килә. Шағирҙар үҙ иңдәренә төшкән бурысты һәйбәт үтәйҙәр, үҙҙәренең ижади әҫәрҙәре менән халыҡты батырлыҡҡа һәм хеҙмәткә өндәйҙәр. Үҙҙәре лә ҡулдарына ҡорал алып, бөтә яугирҙар менән бергә батырҙарса һуғышалар.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Башкорт әҙәбиәте тарихы // Ғ. Хөсәйенов мөхәррирлегендә. – Өфө: Китап, 1993. – 446 б.
2. Йыр сафта ҡала // Ватандаш. – 2015. – №5. – 77-88-се биттәр.
3. М. Карим. Огненные берега. – Уфа. Башкирское книжное издательство, 1974. – 160 с.
4. Мостафина Р.Д. Тыныслыҡ һағында тороусы һалдат // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 2010. – №7. – 10-12-се биттәр.
5. Утлы йылдар ауазы. Шиғырҙар, поэмалар // Төҙөүсеһе Ғабдулла Байбурин. – Өфө: Китап, 1985. – 408 бит.


*© Йыһанова Н.Р., 2021*

**УДК 81’1+811.512.1+39**

*Йәғәфәрова А.М., 1 курс магистранты,*
*Гәрәева Г.Н., филол. ф. докторы, профессор*
*БДУ, Өфө ҡ.*

## НАЖИӘ ИГЕҘЙӘНОВАНЫҢ «ӨЙӨРӨЛМӘК» ҺӘМ «МУЛЛА» ХИКӘЙӘЛӘРЕНДӘ ЗАМАН ПРОБЛЕМАЛАРЫ

Әҙәбиәт, ғөмүмән, мәҙәниәт өсөн иң мөһиме – йәмғиәтте рухи катаклизмдан иҫкәртеү, кеше күңелендә йәшәүгә булған өмөттө юғалтмау, бөгөнгө көндә кешеләрҙе рухи төшөнкөлөктән һаҡлап

ҡалырлыҡ, улар араһындағы мөнәсәбәтте көйләй алырлыҡ маҡсат ҡуйырға бурыслы. Әҙәбиәт алдына ҡуйылған төп талап – кешеләр күңеленә һәм аңына тәьҫир итерҙәй юғары художестволы әҫәрҙәр ижад итеү.

Һәр яҙыусы яңы тема, проблема, характерҙар аса. Нажиә Игеҙйәнова башҡорт прозаһы үҫешенә ҙур өлөш индергән күренекле яҙыусыларҙың береһе. Ул башҡорт прозаһын үҙенең үҙенсәлекле әҫәрҙәре менән байыҡтырҙы. Уның замандың актуаль проблемаларын, дәүерҙең социаль, әхлаҡи, этик мәсьәләләрен, кеше һәм йәмғиәт мөнәсәбәттәре ҡатмарлылығын яҡтыртҡан әҫәрҙәре яратып уҡыла, өйрәнелә. Хәҙерге башҡорт прозаһында кеше һәм йәмғиәт араһындағы мөнәсәбәт, кеше һәм заман кеүек проблемалар күтәрелә, беренсе планға ябай, беҙҙең арала булған геройҙар сыға, уларҙың хис-тойғолары, кисерештәре асыла. Нажиә Игеҙйәнованың үҙ ауылындағы күренештәрҙе, хәл-ваҡиғаларҙы, эргәлә генә йәшәгән кешеләрҙе әҫәр геройҙарына әүерелдереүе уларҙың тормошсанлығын тәьмин итә. Яҙыусы әҫәрҙәрендә халыҡтың йәшәү рәүешен, эскелек, эшһеҙлек, енәйәт, йәштәрҙең аҙыуы кеүек төрлө проблемаларҙы тәрән мәғәнәле, уйландырырлыҡ итеп асып бирә.

«Тәҡдир» йыйынтығына ингән «Өйрөлмәк» хикәйәһендә заман тыуҙырған социаль, рухи-әхлаҡи проблемаларға бәйләнешле герой коцепцияһы яҡтыртыла, быуындар күсәгилешлеге, әсә һәм балалар мөнәсәбәте, йәш быуындарҙың ололар алдындағы яуаплылығы мәсьәләләре киҫкен күтәрелә. Яҙыусы Нуриҙә әбейҙең яҙмышын, әлеге мәлдәге рухи халәтен, хәсрәтле, әрнеүле кисерештәрен ҡарт өйәңкегә йәнәшә ҡуйып һүрәтләй. Ҡарт өйәңкенән башҡа нәмәне әбейҙең ҡартайған, нурҙары һүрелгән, моңһоуланған күҙҙәре күрмәй, ҡолаҡтары япраҡтары шауынан башҡаны ишетмәй. Героиня, үткән тормош юлын күҙ уңынан үткәреп, яңғыҙы йылға ярында ултыра.

Ғүмеренең аҙағында Нуриҙә әбей өйөрөлмәккә ҡарап хәсрәтле уйҙарға тарый. Был өйрөлмәк байтаҡ кешенең башына еткән. Колхоз етәкселәре йылға ағышын бороп та ҡарай, тик кешеләр ғүмерен үҙенә һурыусы упҡын юғалмай, шул килеш ҡала. Тормошта кешене һағалаған ауырлыҡтарҙы, бәлә-ҡазаларҙы автор ошо ҡара ятыу, өйрөлтөп үҙенә тартыусы афәтле соҡор образы аша кинәйәләп һүрәтләй.

Нуриҙә әбейҙең ҡыҙҙары, әсәләренең өйөн алдап-йолдап һаттыртып, аҡсаһын бүлешеп алалар. Әсә ҡәҙерен белмәгән, үҙ һүҙле,

бәғерһеҙ Фәриҙәһенең өйөндәге Нуриҙә әбейҙең тормошо тамуҡҡа әйләнә. Сәғиҙәһе үҙе иренән туҡмалып, йәберләнеп йәшәй, әсәгә унда урын юҡ. Күҙ терәп барған улы Сәғит меҫкен булып, ҡатыны бойороҡтарын ҡолдарса үтәп йәшәй. Әсәһен, мин ҡәйнәмде ҡарайым, тип рәнйетеп ҡыуып ебәрә. Ҡарттар йортона барыуҙы Нуриҙә әбей иң хурлыҡлы хәл тип һанай. Бер балаһыҙ булғандар сараһыҙҙан унда йәшәгәндә, дүрт балаһы булып та, балаһыҙҙар, ҡараусыһыҙҙар рәтендә был йортта йәшәүҙән үлемде артыҡ күрә.Йәш сағында балалары хаҡына ғүмер биреүҙе Алланан ялбарған Нуриҙә әбей шул уҡ өйрөлмәккә, хоҙай биргән ғүмерен аҡтыҡҡаса йәшәп бөтөүҙең мәғәнәһен юғалтып, үҙе теләп атлай.

Яҙыусы был хикәйәһендә йәмғиәттә һәм ғаиләлә хөкөм һөргән бәғерһеҙлек, рухи ярлылыҡ, һаңғыраулыҡ, әҙәп-әхлаҡ тәрбиәһе мәсьәләләрен фажиғә кисереүсе герой яҙмышына бәйләп киҫкен күтәрә.

Нажиә Игеҙйәнова «Мулла» хикәйәһендә йәшәү рәүеше, күңел паҡлығы, изгелеклеге, хоҙай ҡаршыһында ла, кешеләр алдында ла тотҡан дин юлына тоғролоғо менән һоҡландырған мулла Шәфиғулла һәм уға контраст планда бөгөнгө көндә үҙен мулламын тип танытырға маташып йөрөүсе Сәйәхетдин образдарын кәүҙәләндерә.

Утыҙынсы йылдарҙа педучилище тамамлап, ауылға уҡытырға ҡайтҡан Сәйәхетдин тирә-яҡта оло ихтирам ҡаҙанған, халыҡ яратыуын яулаған атаһы Шәфиғулланы бик ныҡ йәберләй, мәктәп директоры вазифаһына үрләтмәүҙәренең сәбәбен атаһының мулла булыуында күреп, уны туҡтауһыҙ эҙәрлекләй, түҙеп торғоһоҙ яуызлыҡтар ҡыла.

Яҙыусы Шәфиғулла бабайҙың заманы өсөн бик аңлы, уҡымышлы, киң ҡарашлы кеше булыуын күрһәтә. Ҡәрҙәш тейешле үҫмер ҡыҙ Зәйтүнәгә ул ҡәҙерләп һаҡлаған китаптарын ҡомартҡы итеп тапшыра. «Донъя гел генә динһеҙ тормаҫ, торған хәлдә лә ҡыҙыҡ өсөн генә булһа ла уҡырһың. Быныһы – бик боронғо Ҡөрьән, атайым бер ат биреп алды. Ә быныһы – Аҡмулла тигән мосафирҙың вәғәздәре. Берәй заман Аҡмулланы ла аҡҡа сығарырҙар, харап аҡыллы, белемле, аҡ күңелле мулла булған. Йәбер-золомға ҡаршы сыҡҡан, күңеле ҡара, ауыҙы ала, ирене ямаҡ бәндәләрҙе яратмаған, уйлағанын тура әйткән, шуға ла уны күрә алмағандар байғуралар... Был китапта балалар тәрбиәләү тураһында яҙылған...» тигән һүҙҙәрендә уның һис тә фанатик, сикләнгән дин әйәһе булмайынса, Аҡмулла рухы менән рухланған, халыҡты иманлы, инсафлы,

ихтирамлы, изгелекле итеп тәрбиәләүҙә тоғро мәғрифәтсе муллалар һалған юлдан барыусы шәхес икәнлеге күренә.

Сәйәхетдиндең мәсет манараһын киҫеп ырғытыуы Шәфиғулла бабай өсөн иң ауыр яза була. Үҙен күпме ыҙалатһа ла, ул Сәйәхетдинен һис бер яманламай, зарланмай, түҙеп йәшәй. Әммә изге йортҡа ҡул күтәргәнен ҡартабул итә алмай, хоҙай алдында улы ҡылған ҡот осҡос енәйәт өсөн ҡайғырыуҙан уның күҙҙәре һуҡырая. Тома һуҡыр, яҡлаусыһыҙ, кеше ярҙамына мохтаж Шәфиғулла бабайға күршеләге йәш ҡыҙҙар Зәйтүнә, Сәрүәрә таяныс булалар. Сәйәхетдин өйҙә саҡта тар ғына үҙ бүлмәһенән сығырға ла ҡурҡҡан Шәфиғулла бабай намаҙ уҡыр алдынан тәһәрәт алыу тәртибен «үҙенсә» башҡара: алдына бүрек ҡуйып, шундағы һыу менән «йыуына». Был ғибрәтле хәлде күргән Зәйтүнәгә бабай былай тип аңлата: «Мине күрһә, ене ҡотора бит, аҡыра ла баҡыра. Аптырама, Зәйтүнә ҡыҙым, һыуҙы күҙ алдына килтерәм дә йыуынғандай итәм, күңелем тыныслана. Хоҙайҙы түгел, үҙемде алдайым».

Сәйәхетдин оло йәштәге атаһына ғына мыҫҡыллы йәберләүҙәр яуҙырмай, ҡул күтәреп, уны тән ғазаптарына дусар итмәй, ун биш йәшлек һыу һөлөгөләй сибәр, үкһеҙ етем ҡыҙ Сәрүәрәне мыҫҡыллай, уның ғәрлегенән аҫылынып үлеүенә сәбәпсе була. Был вәхшилектән тетрәнгән, паралич һуғып түшәккә ятҡан, телдән ҡалған ҡатыны эргәһенә, һөйәркәһен алып ҡайтып, оятһыҙ ҡылана.

Эшенән ҡыуылған, халыҡ нәфрәтен күтәрә алмай, ситкә сығып киткән Сәйәхетдин, ҡырҡ йылдан һуң ауылға ҡайтып, мәсет һалдырырға, мулла булырға самалай.

Күренеүенсә, Нажиә Игеҙйәнованың «Мулла» хикәйәһендә метаморфозалар, ғибрәттәр тулы бөгөнгө тормоштағы рухи-әхлаҡи проблемалар күтәрелә, заманына яйлашып, битлек кейеп, үҙенең ысын асылын йәшереп йөрөүселәр фашлана. Шулай итеп, Нажиә Игеҙйәнованың халыҡсан һутлы тел менән яҙылған, тәрән образлылыҡҡа дәғүә иткән һәр әҫәренең үҙәгендә заман проблемалары һәм замандаш герой образы тора, йәмғиәттең ижтимағи-социаль һәм рухи-әхлаҡи күренештәре сәнғәтсә юғарылыҡта тормошсан һынландырылыш таба.

Нажиә Игеҙйәнованың һәр бер әҫәрендә йәмғиәт һәм кеше мөнәсәбәтен асыҡ күрәбеҙ. Йәмғиәт үҙ кешеһен упҡынға этәреүсе, ярҙамһыҙ ҡалдырыусы ла, шул уҡ ваҡытта уны көслө рухлы шәхес итеп әүәләү, рухи донъяһын байытыу һәләтенә лә эйә икәненә төшөнәбеҙ. Рухи байлыҡтың бөйөклөгө һәм ҡәҙере – кеше һәм

йәмғиәттең бер-береһен ҡурсалауында, яҡлауында икәнен күңелгә һеңдерәбеҙ. Үҙенең тынғыһыҙ эшмәкәрлеге, уҡымлы әҫәрҙәре менән Нәжиә Игеҙйәнова бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙең үҫешендә ҙур роль уйнай.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Гәрәева Г.Н. Башҡорт прозаиктары: Ғилми баҫма: Монография. – Өфө: Р БДУ ҒИҮ, 2012. – 494 бит.



© *Йәғәфәрова А.М., Гәрәева Г.Н., 2021*



**УДК 398.221,**
**УДК 82-09**



*Йәғәфәрова Г.Д., 4-се курс студенты*
*Ғилми етәксеһе: Хөснуллина Р.Д., филол.ф.к., доцент*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*


# МИФТАХЕТДИН АҠМУЛЛА ШИҒЫРҘАРЫНДА ҒӘРӘП-ФАРСЫ ҺҮҘҘӘРЕ

Мәғрифәтселек йырсыһы Мифтахетдин Аҡмулла шиғырҙары үҙенең аң-белемгә өндәүҙәре менән генә түгел, ә тел байлығы менән дә оло иғтибарға лайыҡ тип уйлайым.

Аҡмулла шиғырҙары үҙ заманаһы телен сағылдырыуы менән ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Ул заманда ата-бабаларыбыҙ ғәрәп графикаһында нигеҙләнгән уртаҡ төрки телен әҙәби әҫәрҙәр яҙыуҙа, уларҙы баҫып сығарыуҙа файҙаланған [2: 36]. Ғалимдарыбыҙ яҙыуынса, быңдай һүҙҙәр бик боронғо һәм телебеҙҙә элек-электән йәшәп килә. Ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр башҡорт теленә ислам дине менән бергә уҡымышлылар теле, китап теле аша килеп ингән. Шуға ла, ғәрәп һүҙҙәре күберәк китап теленә, әҙәби әҫәрҙәргә хас. Мәҫәлән, *китап, әлифба, хәреф, ҡәләм, дәфтәр, хат, сәғәт, ғариза* һ.б. Башҡорт теленең һүҙлек составы формалашыуында фарсы һүҙҙәре лә ҙур ғына урын тота. Боронғо башҡорт ҡәбиләләре башҡорттарға ислам дине килеп инмәҫтән бик күп замандар элек үк Хорезм, Хиуа һәм Бохара ханлыҡтары менән ҡыҙыу сауҙа итер булған. Хорезм, Хиуа һәм Бохара ханлыҡтары фарсы телле ханлыҡтар булған. Бына ошо Урта Азия ханлыҡтары менән сауҙа элемтәһе арҡаһында башҡорт теленә байтаҡ һүҙҙәр килеп ингән. Һуңға табан фарсы теленән һүҙҙәр үҙләштереү китап теле, уҡымышлылар теле

аша булған, мәҫәлән урта быуаттарҙа фарсы әҙәбиәтенең йоғонтоһо араҡаһында әҙәби телгә күпләп үҙләштерелгән [4: 41].

Ғәрәп теленән үҙләштерелгән берәмектәр, башҡорт теленең тархи үҫеше процесында, телдә күпләп ҡулланылған. Айырыуса, белем һәм мәғрифәтселек, сәйәси-ижтимағи ҡоролошҡа бәйле абстракт мәғәнәле һүҙҙәр күпләп үҙләштерелгән. Ғәрәп һүҙҙәре лексикаһы совет дәүерендә күпселек осраҡта русизмдар менән алмаштырылды, әммә үткән быуаттың 90-сы йылдарында башҡорт телендә онотолған байтаҡ арабизмдар яңынан тергеҙелде. Рус теленән ҡала башҡор телендә ғәрәп һүҙҙәре иң ҙур ҡатлам булып тора. Был лексик төркөмдөң составы яйлап үҙгәреп тора һәм ул телдә нығынған ҡатлам. Фарсы теленән ҡасандыр килеп ингән һүҙҙәр башҡорт теленең лексик составында артабан үҫмәүсе бер ҡатлам булып ҡына ята. Шул яғы менән башҡорт лексикаһындағы фарсы һүҙҙәренең яҙмышы ғәрәп теленән килеп ингән һәҙҙәр менән бер төрлө. Шуның өсөн дә был һүҙҙәрҙең башҡорт әҙәби телендә күпләп ҡулланылыуы һәм нығыныуы тәбиғи. Фарсы теленән килеп ингән һүҙҙәр ниндәйҙер стилистик хеҙмәт үтәмәй, улар башҡорт теленең битараф лексикаһын характерлаусы күренеш булараҡ, дөйөм лексик ҡатлам пластын булдыра.

Бөйөк шағирыбыҙ әҫәрҙәре телендә был һүҙҙәрҙе өйрәнеү бик актуаль мәсьәлә, сөнки, уның шиғырҙарындағы ғәрәп-фарсы берәмектәрен өйрәнеп, телебеҙ тарихын күҙ алдына баҫтыра алабыҙ. Күптән юғалған һәм телдән иҫкереп төшөп ҡалған архаизмдар яңынан тергеҙеп була тип уйлайым. М. Аҡмулланың лексик яҡтан бай теле беҙгә ярҙамға килә.

Шағир әҫәрҙәренә күҙ һалһаҡ, бик күп ғәрәп һүҙҙәрен осратырбыҙ. Килеп сығышы яғынан уларҙың күбеһе иҫкергән һәм шул замана тормошонда киң ҡулланылған берәмектәргә ҡарай. Мәҫәлән, Аҡмулланың киң билдәле «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» шиғырында ғәрәп теленән ингән һүҙҙәр ҡулланылған. Айырыуса был әҫәрҙә түбәндәге ғәрәп теленән алынған архаизмдар осрай: «*илтифат ит*: уҡыуҙалыр шәрафәттәр»; *илтифат* (ғ.) – иғтибар, диҡҡәт; *шәрәфәт* (ғ.) – ҡәҙер, хөрмәт; «Юҡтыр унда *әүлиәлек* (ғ.) (изге кеше, изге йән) *кәрамәттәр* (ғ.) (мөғжизә, ғәжәп нәмә)»; «Уҡығанға был донъяла *жәләл* (ғ.) (бөйөклөк) булыр»; «*Харам*(ғ) (ярамай тип табылған, килешһеҙ, насар) тигән күп *шәйҙәр хәләл(ғ)* (көс түгеп,

хеҙмәт менән табылған) булыр»; «Ғилем-һөнәр берҙән-бер *әмәл* (ғ) (киләсәккә булған ышаныс; өмөт) булыр».

Билдәләнгән һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр лексик архаик һүҙҙәр булып, белемгә дан йырлай, белемле кешеләрҙең абруйы ла оло булыуын билдәләй. Әҫәр идея йүнәлеше йәһәтенән мәғрифәтселек ҡараштары менән һуғарылған. Мәҙәниәттең нигеҙе – ғилем, әхләҡи сафлыҡ. Шуның өсөн дә шағир мәҙәни үҫешкә ҡамасаулыҡ итеүсе иҫкелекте әҫәрендә аяуһыҙ тәнҡитләй, уларға йәбешеп ятыусыларҙы, мораль яҡтан тарҡалған кешеләрҙе иң ҡара буяуҙар менән ҡылыҡһырлай. Изгелек менән яуызлыҡ араһында ла бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡ, тигән идеяны үткәрә Аҡмулла.

М.Аҡмулланың «Нәсихәттәр» исемле шиғырында архаизмдар ҡулланылышына күҙ һалайыҡ.

Һеҙ *бикәр* бер муллаһыҙ ултырмағыҙ,
Өйрәнмәй *фарыз, вөжүб,* тик тормағыҙ.
Ул мулланың *ҡираәте* яҡшы булһын,
Күргән, тип, мулла *жәлал,* ҡотормағыҙ.

Был өҙөктә бурыс; *бикәр* (ғ.) – бер ҡасан да мәғәнәһендә; *ҡираәте* (ғ.) – уҡыу, яттан уҡыу; *жәлал* (ғ.) – бөйөклөк, ололоҡ, ҡәҙер-хөрмәт; *фарыз, гөжүб* (ғ) – мотлаҡ үтәлергә тейешле дини бурыс.

М. Аҡмулланың «Фазыл Мәржәниҙең мәрҫиәһе» шиғырында архаизм һүҙҙәр һәр бер юлда тиерлек осрай. Заманында яҙма һәм һөйләү телмәрендә ғәрәп, фарсы һүҙҙәрен ҡулланыуға ҙур урын бирелгән, хәҙер инде был һүҙҙәр иҫкергән һүҙҙәр рәтен тулыландыра. Мәҫәлән, атап үтелгән шиғырҙа заманында түбәндәге ғәрәп һүҙҙәре ҡулланылып хәҙер улар архаизм формаһын башҡаралар.

Ҡазанда бер *фазыл* сыҡты *алмас* булып,
Көнсөләре күбәйҙе *гам, хас* булып.
Гәүһәрҙәй фекерҙәрен ҡулға элгән,
Хәҡиҡәт диңгеҙендә *гаууас* булып.

Миҫалдар: *фазыл* (ғ.) – ғалим, аҡыл эйәһе; *гам* (ғ.) – ябай халыҡ; *хас* (ғ.) – юғары ҡатлам, аҡһөйәктәр; ғауuас – шаһит.

Аҡмулла шиғырҙарында фарсы һүҙҙәре лә күпләп ҡулланыла. Уларҙың күбеһе китап теле аша үҙләштерелгән. Фарсы һүҙҙәрен беҙ телсе ғалимдар кәңәш иткәнсә, морфематик үҙенсәлектәре буйынса таныйбыҙ. Морфематик үҙенсәлектәре буйынса ла фарсы һүҙҙәрен танып була. Мәҫәлән, «би-префикслы һүҙҙәр (бимаза, битараф), на-префикслы һүҙҙәр (насар, нахаҡ), бәд-префикслы һүҙҙәр (бәдбәхет,

бәддоға), гәр-, ҡәр-префикслы һүҙҙәр (сауҙагәр, фиҙаҡәр) фарсы теләнән үҙләштереләгән һүҙҙәр булып иҫәпләнә» [4: 49].

Аҡмулланың «Нәсихәттәр» шиғырында:

*Шаһбаздар* Ҡаф тауын күсеп киткән,
Урынын ҡоҙғон байғош ҡунып ҡалған.
Һөйәккә һеңгән *бидғәт* айырылмай,
Йәшенә үк яман ғәҙәт ҡыуып ҡалған.
Бындайы бидғәт эштә табылалар
Әҙәмһенгә аҡылға тулыҡтарҙан.

Шаһбаздар – шаһтар мәғәнәһендә; бидғәт – ярамаған, тыйылған эш.

Шул уҡ «Нәсихәттәр» шиғырында:

Ҡанса әйтһәм дә, татлы ҡылып, баллағандай,
Хоҙай өсөн әфсүн укып, арбағандай,
Үҙегеҙҙе телегеҙсә асыҡ ҡылып,
Балаһы мосолманды аңлағандай.

*Әфсүн* фарсы телендә «сихыр, осоҡлау, им-томлау» һүҙҙәре рәтенә инә.

Аҡмулла шиғырҙарында фарсы һүҙҙәре тик иҫкергән берәмектәрҙән генә тормай. Шағир бөгөнгө әҙәби телдә киң ҡулланылған фарсы һүҙҙәрен дә файҙалана. Мәҫәлән, «Бикмөхәмәт Ҡарый улына» тигән арнауында:

Күп түкте *бәдбәхеттәр* күҙҙең йәшен,
Мөьминдәрҙе илатҡанды күҙ күрмәһен.
Майҙанд һәр кем алһыу үс мөсәһен,
Эйәрсендәр арғымаҡта уҙҙырмаһын.

*Бәдбәхеттәр* бөгөн дә әҙәби телдә кире характеристика биреүсе һүҙ булараҡ ҡулланыла килә.

Фарсы теленән килеп ингән һүҙҙәрҙең күбеһе материаль мәғәнәле һүҙҙәр, йәғни йорт ҡаралтыларының исемдәре. Был йәһәттән фарсы теленән алынған һүҙҙәр, рус теленән ингән һүҙҙәр кеүек үк, тормош, көнкүрешкә бәйләнгән, һәм ислам диненә бер ниндәй ҙә бәйләнеше юҡ. Уларҙың ҡайһы берҙәренең сауҙа эшенә бәйләнгән булыуы быны асыҡтан асыҡ күрһәтеп тора. Мәҫәлән, *сирек, тиҫтә* йәки *тәҫтә, дана* (үлсәү берәмектәре).

Ғалимә Х.Д. Ишбулатова ла үҙенең хеҙмәтендә: «Фарсы теленән үҙләштерелгән атамаларға анализ шуны асыҡлай: һауыт-һаба атамалары, яҡтылыҡ сығанаҡтары исемдәре башҡа лексик-семантик төркөмдәге атамалар һанына ҡарағанда күберәк. Фарсы теленән

ҡасандыр үҙләштерелгән һүҙҙәр башҡорт теленең лексик составында артабан үҫмәүсе бер ҡатлам һанала, сөнки һуңғы йылдарҙа фарсы һүҙҙәрен үҙләштереү бөтөнләй туҡтаған. Ләкин бынан мең йылдан артыҡ элек инеп урынлашҡан фарсы һүҙҙәре башҡорт теле һүҙлек фонында нығынған һәм уларҙың үҙләштерелгән һүҙ икәне күптәргә хәҙер тойолмай ҙа» – тип билдәләй [3: 21].

М. Аҡмулланың теле хәҙерге башҡорт теленә яҡын, әммә арҙаҡлы шағир фарсы һүҙҙәрен бик күп ҡуллана. Беҙ ул заманда традициялары ғына түгел, ә авторҙың фарсы телен яҡын күреп, уның тел сараларына йыш ҡына мөрәжәғәт итеүенән дә килә:

Аҡмулланың «Ибрай Теләүгә» шиғырынан бер өҙөк:

Барҙығыҙ *шәһәренә* Петербурҙың,
Күрҙегеҙ тамашаһын байтаҡ юлдың.
Яшыҡ менән аҫылдың арзан-ҡиммәтен
Әҙәмһегеҙ айыра белгән иҫке малдың.

*Шәһәр (кала)* һүҙе был шиғырҙа фарсы берәмеге, ул хәҙерге башҡорт телендәге «ҡала» берәмегенең синонимы булараҡ ҡулланыла. Был фарсы һүҙен айырыу түбәндәгесә башҡарыла; төрки сығанаҡлы башҡорт һүҙҙәрендә, ҡағиҙә булараҡ *г* һәм *к* өндәре фәҡәт ҡалын һуҙынҡылар эргәһендә була. Шуға күрә *шәһәр* һүҙе фарсы һүҙе булып тора һәм «кала» мәғәнәһен бирә. Был формаһында ул бөгөнгө көндә татар телендә һаҡланған.

Шулай итеп, башҡорт лексикаһындағы фарсы һүҙҙәренең яҙмышы ғәрәп теленән килеп ингән һүҙҙәр менән бер төрлө. Шуның өсөн дә был һүҙҙәрҙең башҡорт әҙәби телендә күпләп ҡулланылыуы һәм нығыныуы тәбиғи. Бөгөн иһә фарсы теленән килеп ингән һүҙҙәр ниндәйҙер стилистик хеҙмәт үтәмәй, улар башҡорт теленең битараф лексикаһын характерлаусы күренеш булараҡ, дөйөм лексик ҡатлам пластын булдыра. Бөйөк шағирыбыҙ үҙенең шиғырҙарында ғәрәп-фарсы лексикаһын киң ҡуллана. Уның күбеһенең сығанағы – ислам дине, мосолман китаптарындағы тел. Аҡмулла шиғырҙары дини китаптарға хас ғәрәп-фарсы һүҙҙәрен бик күп ҡуллана. Беҙ уларҙы телебеҙ тарихын белеү, уның тамырҙарын тергеҙеү өсөн өйрәнергә тейешбеҙ.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Аҡмулла.: Шиғырҙар. Төҙөүсеһе Ә.Х. Вилданов. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. – 185 бит.

2. Ғәләүетдинов Н.Х., Ишбирҙин Э.Ф. Башҡорт әҙәби теленең тарихы. – Өфө, 1993. – 452 бит.
3. Ишбулатова Н.Х. Бытова лексика башкирского языка. – Уфа: Гилем, 2002. – 164 с.
4. Әхтәмов М.Х. Хәҙерге башҡорт теле. Лексикология. Фразеология. Лексикография. Өфө, БДУ, 2002. – 298 бит.

*© Йәғәфәрова Г.Д., Хөснуллина Р.Д., 2021*

**УДК 811.512.141**

*Казбаев В.Р., I курс магистранты*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## БАШҠОРТ ҺӘМ ИНГЛИЗ ТЕЛЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ ҠЫЛЫМ ҺӨЙКӘЛЕШТӘРЕН ӨЙРӘНЕҮ

Һөйкәлеш – һөйләүсе күҙлегәнән процестың ысынбарлыҡҡа мөнәсәбәтен белдереүсе лексик-грамматик категория. Эш, хәл-торош, хәрәкәт ысынбарлыҡта реаль башҡарылырға йәки реаль булмаҫҡа, бойороҡ, теләк, өндәү, маҡсат, шарт рәүешендә сағылыш табырға мөмкин. Һөйкәлеш формаларын тикшереүҙә профессор Ж.Ғ. Кейекбаевтың өлөшө ҙур. Башҡорт телен ғилми планда өйрәнеүгә нигеҙ һалыусы профессор Н.К. Дмитриев төрки тел ғилемендә һәм башҡорт филологияһы фәнендә ҡылым формаларын һөйкәлештәргә һәм төркөмсәләргә бүлеп тикшергән. Башҡорт теленең ҡылым системаһында Н.К. Дмитриев 4 һөйкәлеш булыуын күрһәткән: хәбәр һөйкәлеше; бойороҡ һөйкәлеше; теләк һөйкәлеше; шарт һөйкәлеше.

К.Ғ. Ишбаевтың «Хәҙерге башҡорт теле» китабында һөйкәлештәрҙең биш формаһы (хәбәр, бойороҡ, шарт, ниәт-маҡсат, теләк-өндәү) бар тип ҡаралһа [20: 123], М.В. Зәйнуллин үҙенең «Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология» хеҙмәтендә алтынсы һөйкәлеш формаһын индерә – ихтималлыҡ һөйкәлеше [19: 101].

Академик башҡорт телендә 6 һөйкәлеш формаһы бар, ә мәктәп программаһы буйынса һөйкәлештәрҙең 4 төрө өйрәнелә: бойороҡ, хәбәр, шарт, теләк һөйкәлештәре. Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһында «Ҡылымдың затлы формалары» параграфында

уҡыусылар беренсе тапҡыр һөйкәлеш тигән төшөнсә менән таныша башлайҙар.

Тәү сиратта бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының зат, һан һәм барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше өйрәнелә. Артабан хәбәр һөйкәлеше, хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының заман менән үҙгәреше, хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы, хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының хәҙерге заманы, хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының киләсәк заманы, шарт һөйкәлеше, теләк һөйкәлеше параграфтарында теҙеп кителгән тәртиптә темалар ҡаралған һәм уларҙы нығытыуға күп кенә күнегеүҙәр бирелгән.

5-се класта һөйкәлеш темаһын үтеүгә бөтәһе 10 параграф бирелгән.

Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһында «Сифат ҡылымдарҙың үткән, хәҙерге һәм киләсәк заман формалары» параграфында сифат ҡылымдарҙы хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарынан айырыу ысулдары аңлатылған.

*Сифат ҡылымдарҙы хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарынан нисек айырырға?*

*Тикшереү өсөн Айырылған ҡаҙ тупланған ҡарғаға ем булған тигән һөйләм бирелгән икән, ти.*

*Бында -ған ялғаулы өс ҡылым бар. Ҡайһыһы – сифат ҡылым, ҡайһыһы – хәбәр һөйкәлеше ҡылымы? Уларҙы айырыу өсөн, ошондай һорауҙарға яуап бирергә кәрәк:*

*1) Ул ҡылым һөйләмдең ҡайһы урынында тора?*

*Башында йәки уртаһында* → *сифат ҡылым (айырылған)*

*аҙағында* → *хәбәр һөйкәлеше ҡылымы (булған)*

*2) Ул ҡылым исем алдында торамы?*

*Эйе* ↓

*юҡ* ↓

| | |
|---|---|
| *сифат ҡылым (айырылған ҡаҙ)* | *хәбәр һөйкәлеше ҡылымы (булған)* |

*3) Был ҡылым ошо һөйләмдә исем урынында килә аламы?*

| | |
|---|---|
| *Эйе* | *юҡ* |
| ↓ | ↓ |
| *сифат ҡылым* (***айырылғанға*** *тип әйтергә мөмкин)* | *хәбәр һөйкәлеше ҡылымы* (***булғанға*** *тип әйтеп булмай)* |

*4) Был ҡылым ниндәй һорауға яуап була?*

| | |
|---|---|
| *ниндәй?*<br>*ҡайһы?*<br>*кем?* | *ни эшләгән?*<br>*ни эшләр?*<br>*ни эшләйәсәк?* |
| ↓ | ↓ |
| *сифат ҡылым* | *хәбәр һөйкәлеше ҡылымы* |

Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм системалаштырыу тигән параграфта ҡылымдарға грамматик анализ яһау тәртибе бирелә. Анализ тәртибендә 3-сө пункт булып ҡылымдың һөйкәлешен билдәләү тора.

Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-се, 8-се кластары өсөн уҡыу ҡулланмаларында ҡылымдың һөйкәлеш категорияһы бирелмәй, ә бына 9-сы класс дәреслегенең 5-9-сы кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм тәртипкә килтереү өлөшөндә хәбәр һөйкәлешенә йомғаҡлау рәүешендә бирелгән.

Инглиз теле дәрестәрендә «Английский в фокусе» серияһы дәреслектәре буйынса һөйкәлеш темаһы программаға ярашлы 5-се кластан башлана, әммә был тик грамматик категория булараҡ ҡына 5-се

класта инә, сөнки хәбәр һәм бойороҡ һөйкәлештәренең хәҙерге заман формалары менән уҡыусылар 2-се класта таныша башлайҙар.

Инглиз теленең практик грамматикаһында 3 һөйкәлеш формаһы киң сағылыш тапҡан:

- the Indicative Mood (хәбәр һөйкәлеше),
- the Imperative Mood (бойороҡ һөйкәлеше),
- the Subjunctive Mood (шарт һөйкәлеше).

Башҡорт теленән айырмалы рәүештә инглиз телендә бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары һан менән үҙгәрмәйҙәр: берлектә лә, күплектә лә шул уҡ форма һаҡлана.

5-се класс дәреслегенә ярашлы 1-се модуль Imperative – бойороҡ һөйкәлеше менән башлана. 6-сы класта ла шулай уҡ улар хәбәр һәм бойороҡ һөйкәлештәренең Present, Past, Future Simple (Indefinite) замандарын ҡабатлайҙар, нығыраҡ иғтибар телмәрҙе лексик байытыуға һәм телде мөмкин тиклем күберәк практикала ҡулланыуға йүнәлтелә.

7-се класс дәреслегендә уҡыусылар the Subjunctive Mood – шарт һөйкәлеше менән танышалар. Инглиз телендә шарт һөйкәлешенең ике формаһы бар.

Синтетик, йәки ябай формалары If теркәүесе ярҙамында барлыҡҡа киләләр. Был бәйләнештә ярҙамсы ҡылымдар ҡулланылмай: If only I ***knew*** him! – Әгәр мин уны белгән булһам. *If I had time. – Ваҡытым булһа.*

***Be*** ҡылымының ***were*** формаһы күплектә һәм берлектә шарт һөйкәлешенең синтетик перфект булмаған формаларына инә: *If it were autumn now! – Әгәр хәҙер көҙ булһа! If I were grown-up. – Әгәр мин оло булһам.*

Шарт һөйкәлешенең аналитик формаһы инглиз телендә күберәк ҡулланыла. Ул ярҙамсы ***would*** ҡылымы ярҙамында барлыҡҡа килә:. *I would go there. – Мин унда барыр инем. She would buy it. – Ул быны һатып алыр ине.*

8–11-се кластарҙа ошо үтелгәндәр нығытыла. Инглиз теленән уҡытыу программаларына һәм дәреслектәргә анализдан күренеүенсә, һөйкәлеш категорияһы менән уҡыусылар 2-се класта таныша башлайҙар һәм йылдан-йыл яңы белемдәр алалар.

Хәҙерге инглиз телендә ҡылым һөйкәлештәренең категориялары иң ҡатмарлы һәм сетерекле һорау булып тора. Әммә, уҡыусы өсөн төп мәсьәләрҙең береһе – грамматик конструкцияларҙа һөйкәлештәрҙең формаларын дөрөҫ итеп ҡуллана белеү.

Башҡорт телендә лә, инглиз телендә лә хәбәр, бойороҡ һәм шарт һөйкәлештәре бар. Улар бер үк мәғәнәне аңлата, ярҙамсы ҡылымдар, ялғауҙар ярҙамында барлыҡҡа килә.

Ике телде сағыштырма планда өйрәтеү башҡорт телен дә, инглиз телен дә өйрәнгән уҡыусылар өсөн бик файҙалы буласаҡ, сөнки ике телдәге оҡшашлыҡтар уҡыусыларҙың теоретик белемдәрен тәрәнерәк, төплөрәк итеп кенә ҡалмай, ике милләттең мәҙәниәтен дә сағыштырмаса планда өйрәнеп, уҡыусыларҙың белемен лингвокультурологик йүнәлештә лә яңы кимәлгә күтәрәсәк.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Английский язык. 2 класс: учеб. для общеобразоват. организаций с прил. на электрон. носителе / [Н.И. Быкова, Д. Дули, М.Д. Поспелова, В. Эванс]. – 4-е изд. – М.: Express Publishing: Просвещение, 2014. – 144 с. : ил. – (Английский в фокусе).
2. Английский язык. 3 класс: учеб. для общеобразоват. организаций с прил. на электрон. носителе / [Н.И. Быкова, Д. Дули, М.Д. Поспелова, В. Эванс]. – М.: Express Publishing: Просвещение, 2012. – 178 с. : ил. – (Английский в фокусе).
3. Английский язык. Английский в фокусе: учеб. для 4 кл. общеобразоват. учреждений / [Н.И. Быкова, Дж. Дули, М.Д. Поспелова, В. Эванс]. – М.: Express Publishing: Просвещение, 2007. – 168 с.
4. Английский язык. 5 класс: учеб. для общеобразоват. учреждений / [Ю.Е. Ваулина, Дж. Дули, О.Е. Подоляко, В. Эванс]. – М.: Express Publishing: Просвещение, 2012. – 164 с.: ил. – (Английский в фокусе).
5. Английский язык. 6 класс: учеб. для общеобразоват. учреждений / [Ю.Е. Ваулина, Дж. Дули, О.Е. Подоляко, В. Эванс]. – М.: Express Publishing: Просвещение, 2008. – 136 с.: ил. – (Английский в фокусе).
6. Английский язык. 7 класс: учеб. для общеобразоват. учреждений / [Ю.Е. Ваулина, Д. Дули, О.Е. Подоляко, В. Эванс]. – 12-е изд. – М.: Express Publishing: Просвещение, 2020. – 152 с.: ил. – (Английский в фокусе).
7. Английский язык. 8 класс: учеб. для общеобразоват. учреждений / [Ю.Е. Ваулина, Д. Дули, О.Е. Подоляко, В. Эванс]. –

М.: Express Publishing: Просвещение, 2012. – 216 с.: ил. – (Английский в фокусе).

8. Английский язык. 9 класс: учеб. для общеобразоват. учреждений / [Ю.Е. Ваулина, В. Эванс, Дж. Дули, О.Е. Подоляко]. 2-е изд., доп. и перераб. – М.: Express Publishing: Просвещение, 2010. – 216 с.: ил. – (Английский в фокусе).

9. Английский язык. 10 класс: учеб. для общеобразоват. учреждений / [О.В. Афанасьева, Д. Дули, И.В Михеева и др.]. – 5-е изд.– М.: Express Publishing: Просвещение, 2012. – 248 с.: ил. – (Английский в фокусе).

10. Английский язык. 11 класс: учеб. для общеобразоват. учреждений / [О.В. Афанасьева, Дж. Дули, И.В Михеева и др.]. – 2-е изд., доп. и перераб. – М.: Express Publishing: Просвещение, 2009. – 244 с.: ил. – (Английский в фокусе).

11. Апальков В.Г. Английский язык. Рабочие программы. Предметная линия учебников «Английский в фокусе». 5—9 классы: учеб. пособие для общеобразоват. организаций / В. Г. Апальков. — 3-е изд. — М.: Просвещение, 2016. — 84 с. — ISBN 978-5-09-038235-9.

12. Апальков В.Г. Английский язык. Рабочие программы. Предметная линия учебников «Английский в фокусе». 10–11 классы: пособие для учителей общеобразоват. организаций: базовый уровень / В.Г. Апальков. — М.: Просвещение, 2014 — 57 с.

13. Башҡорт теле: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / В.Ш. Псәнчин, Ю.В. Псәнчин, З.М. Ғәбитова, Р.Р. Әйүпов, Р.М. Мөхәмәтова. – Яңыртылған 7-се баҫма. – Өфө: Китап, 2017. – Һүрәттәре менән 264 бит.

14. Башҡорт теле: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Х.В. Солтанбаева, Л.С. Балапанова. – Өфө: Китап, 2017. – 212 бит.

15. Башҡорт теле. Ябай һөйләм синтаксисы: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы/ Ә.М. Аҙнабаев:А. Таһирова, М.Ә. Ғәзизуллина. – Өфө: Китап, 2017. – 208 бит.

16. Башҡорт теле. Ҡушма һөйләм синтаксисы: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының

8-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Л.Х. Сәмситова:А. Таһирова, Э.Ф. Рәхимова, Т.М. Исламова. – Өфө: Китап, 2017. – 208 бит.

17. Башҡорт теле: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Тулыландырылған 7-се баҫма / В.Ш. Псәнчин, Ю.В. Псәнчин, А.И. Игелекова, Ф.Ю. Үтәбаева. – Өфө: Китап, 2017. – 216 бит.

18. Габитова З.М. Примерная образовательная программа по учебному предмету «Башкирский язык (родной)» для 5-11 классов общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения. – Уфа, 2017. – 26 с.

19. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле: Морфология / Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек. – Өфө, 2002. – 388 бит.

20. Ишбаев К.Ғ, Ураҡсин З.Ғ. Хәҙерге башҡорт теле. – Өфө.: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. – 399 бит.

21. Хасанов М.А. Сопоставительный анализ английского и башкирского языков. Comparative analysis of the English and Bashkort languages. – Уфа: «Аэрокосмос и ноосфера», 2005. – 80 с.

*©Казбаев В.Р., 2021*

**УДК 398**

*Мукминова А.М., 5 курс студенты*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## «УРАЛ-БАТЫР» ЭПОСЫНДА БАШҠОРТ ДОНЪЯ ТЕЛ КАРТИНАҺЫ

«Урал батыр» эпосы — башҡорт халҡының бөйөк ҡомартҡыһы, ата-бабаларыбыҙ быуындан-быуынға тапшырған бай хазинаһы — ауыҙ-тел ижадының һоҡланғыс өлгөһө. Ул үҙенең боронғолоғо, күләме, йөкмәткеһе һәм әһәмиәте яғынан донъяла билдәле башҡа эпик әҫәрҙәр менән бер кимәлдә тора. Эпоста халҡыбыҙ асылы, тарихы, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йәшәү мәғәнәһе, изгелек һәм яуызлыҡ, яҡшы менән яман, тыуым, үлем һәм үлемһеҙлек кеүек мәңгелек төшөнсәләр үҙенсәлекле итеп сағылдырылған.

Ҡомартҡыбыҙҙы тел төҙөлөшө һәм боронғонан аманат булып килгән эпоста башҡорт теленең үҫеше һорауҙары әленән-әле тикшеренеүҙәр талап итә. Башҡорт тел ғилемендә фольклор телен өйрәнеү буйынса ҙур тәжрибә тупланған. Халыҡ ижады башҡорт теленең тарихи эволюцияһында мөһим урын тота, шуға ла фольклор теле билдәле телселәребеҙҙең иғтибар үҙәгенән төшмәй. Халыҡ ижады теле Ж.Ғ. Кейекбаев, Ғ.Ғ. Сәйетбатталов, В.Ш. Псәнчин, Д.С. Тикеев, М.В. Зәйнуллин, М.Х. Әхтәмов, Л.Х. Сәмситова, Г.Х. Бухарова һәм башҡа ғалимдар хеҙмәттәрендә лексикология, морфология, синтаксис, лингвокультурология күҙлегенән өйрәнелде, уларҙа лингвистика өсөн мөһим булған мәсьәләләр халыҡ эпостары, әкиәттәре, башҡа жанрҙары теле миҫалында ҡарала. Шулай ҙа, ҡомартҡының телендә башҡорт халҡының донъя картинаһының сағылышы һорауҙары әле лә актуаль мәсьәлә булып тора.

Донъяны ҡабул итеү рәүешен, халыҡтың әхлаҡи ҡиммәтәрен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, дини ышаныуҙарын һәм башҡа нәмәләрҙе туплаған менталитетын беҙгә еткереүсе берәмектәр булып мәҡәлдәр һәм әйтемдәр тора. Улар халыҡ теленең иң боронғо һәм бай ҡатламдарының береһе. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр телде ижади үҙләштереү һөҙөмтәһендә тыуып, борондан килеүсе тормош-көнкүреште, этник тарихты, менталь аңды үҙендә һаҡлайҙар [2: 31].

Ғалимдар халыҡтың милли характерын өйрәнгәндә иң беренсе булып уның мәҡәлдәр һәм әйтемдәр тел ҡатламына мөрәжәғәт итә. Улар телдә нығынған һәм үҙгәрешһеҙ ҡала килгән һүҙбәйләнештәр булып, образлы рәүештә тормошсан аҡылды, кешенең донъялағы үҙ-үҙен тотошона әхлаҡи баһаны, борондан килгән тарихты, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе йөрөтә. Эпос телендәге мәҡәлдәр һәм әйтемдәр милли яҡтан үҙенсәлекле һәм тик ошо халыҡта ғына тыуып, уның йәшәйешен билдәләй. Шуға ла былдай тел берәмектәрен беҙ халыҡ менталитетен сағылдырыусы хазиналар тип атайбыҙ.

Эпос халыҡтың йәнле һөйләү теленә хас булған ҡанатлы һүҙҙәргә, һүҙбәйләнештәргә, әйтемдәргә, мәҡәлдәргә бай. Күп һанлы мәҡәл, әйтемдәр, тапҡыр һүҙҙәр, афоризмдар әҫәрҙең тел байлығын тулыландырыусы, текстың эмоциональ-экспрессив мөмкинлектәрен киңәйтеүсе әһәмиәтле сара булып тора. Мәҫәлән:

*Күккә лә осор – яҡшылыҡ,*
*Һыуға ла батмаҫ – яҡшылыҡ,*
*Утҡа ла янмаҫ яҡшылыҡ,*

*Телдән дә төшмәҫ – яҡшылыҡ,*
Бары эшкә баш булыр,
Үҙеңә лә, кешегә
Мәңге йәшәр аш булыр.

Әйтелгән һүҙҙәр ҡобайыр теленең күркәмлеген, поэтикаһының аһәңлеген билдәләй, тыңлаусыға эстетик зауыҡ бирә, әҫәрҙе халыҡсан итә. Ул халыҡтың донъя картинаһын сағылдыра, был фекер – бар халыҡтарға ла хас яҡшылыҡ менән яманлыҡ проблемаһы – күпселек башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә ҡулланыла.

К. Әхмәтйәнов яҙыуынса, «ғөмүмән, мәҡәлдәр һәм уларға оҡшаш тапҡыр һөйләмдәр менән фекер йөрөтөү – ҡобайырҙар өсөн хас алым. Ихтимал, бөгөнгө халыҡ мәҡәлдәренең ҡайһы берҙәре ҡобайырҙарҙағы ана шул тапҡыр һөйләмдәргә, афоризмдарға ҡайтып ҡалалыр ҙа» [6: 34]. Тюрколог Ж.Ғ. Кейекбаев билдәләүенсә, «мәҡәл һүҙе башҡорт теленә килеп кергәнгә тиклем, боронғо башҡорт телендә уның мәғәнәһен биргән төрлө һүҙҙәр (терминдар) ҡулланылған, тип ҡарарға кәрәк; мәҫәлән, бабайҙар һүҙе, боронғолар һүҙе, тапҡыр һүҙҙәр һәм, ахыр сиктә, әйтемдәр» [6: 34].

«Урал батыр» эпосында беҙ халыҡ теленә хас, уның әхлаҡи мәҙәниәтен, донъяға ҡараштарын тел картинаһында сағылдырыусы мәҡәлдәрҙе һәм әйтемдәрҙе осратабыҙ.

*Икегеҙ ҙә — баламһыҙ,*
*Күҙебеҙҙең ҡарамһыҙ,*
Тешәр сағығыҙ үтмәгән,
Быуынығыҙ ҡатмаған;

Ата-әсәнең балға изге мөнәсәбәтен, башҡорт хаҡында ғаилә этикетын сағылдыра был мәҡәл.

Яҡышылыҡ һәм яманлыҡ әхлаҡи төшөнсәләренең донъя картинаһындағы әһәмиәте, башҡорт халҡының уға милли-мәҙәни ҡараштары ҡанатлы әйтемдәрҙә белдерелә:

*Яҡшынан эскәне – һыу булыр,*
*Ямандан эскәне – ыу булыр»,—*
Тигән Урал Шүлгәнгә.

Башҡорт халҡының донъя картинаһында тел – халыҡ яҙмышының, уның киләсәк йәшәйешенең тере күҙәнәге. Халыҡ мәҡәлдәрҙә телгә һаҡсыл ҡараш, әҙәплелек ҡиммәттәрен белдерә. Мәҫәлән, эпос телендә:

Һин тыңлаһаң, әйтәйем,

Бер серем бар, һөйләйем,
*Тел өҫтөнә тел ҡуймай,*
Яуабыңды көтәйем.

Халыҡтың донъя тел картинаһында мәҡәлдәр һәм әйтемдәр батыр образына айырым бер әхлаҡи символ тип ҡарай. Ул халыҡ мәҙәниәтендә яҡшылыҡ һәм яманлыҡ төшөнсәләренән айырылғыһыҙ. Урал батыр – кешелеклек, батырлыҡ һәм яҡшылыҡ идеалы. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр был төшөнсәләрҙе эпик тел картинаһында асыҡлап килә:

*Батырҙан ил тарыҡмаҫ,*
Батыр һис бер зарыҡмаҫ,
Яҡшылыҡтан ялыҡмаҫ,
Яуҙан да һис талыҡмаҫ.

Намыҫ төшөнсәһе – халыҡтың донъя картинаһының үҙәк ҡиммәттәренең береһе. Эпоста халыҡ намыҫ һәм уның батыр рухиәтендәге урыны тураһында фәлсәфәүи фекерләй. Намыҫлы ир-ат образы халыҡҡа һәм кешеләргә булған рәхимлелек, тыуған илгә һөйөү тип аңлана:

*Намыҫ тапар ир булһа,*
*Өмөтө булмаҫ көнөнән;*
Ил быуынын һанаған
Көнөн айырмаҫ төнөнән:
Йыртҡыс булған йәндәргә
Ҡара төнө көн булыр,
Күҙе ҡалғыр байғошто
Төндә аулап, шат булыр.

Башҡорт халҡының донъя картинаһының иң төп таяуҙарының береһе – аманат, васыят төшөнсәләре [3: 54]. Ул эпоста батырҙың атаһының һүҙен тыңлауы, уның васыяттары менән йәшәүе аша бирелә, ҡанатлы юлдар аша белдерелә:

*Атанан күреп, уҡ юнып,*
*Өлкәндән күреп, яу ҡыуып,*
*Ил эсендә үҫер ул,*
*Утын-һыуын кисер ул.*

Халыҡта васыяттарға тоғролоҡ ҡот, батыр рухының көсө билдәһе. «Ҡот» төшөнсәһе милли донъя кратинаһының үҙенсәлекле берәмеге, халыҡтың асылын, мәҙәниәтен сағылдырыусы һүҙ. Эпос телендәге мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә:

*Батыр атанан ҡот йәйгән,*
*Матур әсәнән һөт имгән,*

Һиңә тиңдәш булыр ҡыҙ,
Батырға әсә булыр ҡыҙ.

Тәрән мәғәнәле тапҡыр һүҙҙәр «Урал батыр» эпосында киң таралған. Тапҡыр һүҙҙәрҙең, мәҡәл, әйтемдәрҙең эпоста киң ҡулланылыуынан халыҡ аҡылының ни тиклем тәрән һәм зирәк икәненлеген, боронғо ата-бабаларыбыҙҙың теленең ни тиклем бай булыуына инанабыҙ. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр халыҡтың донъя картинаһын, уның төп әхлаҡи төшөнсәләрен сағылдыра. Мәҡәлдәр аша эпик донъя картинаһында яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, намыҫлы булыу, ата-әсә аманаты, васыят кеүек милли-мәҙәни үҙенсәлеккә эйә әхлаҡи төшөнсәләр белдерелә. Улар ҡомартҡының милли асылын да, донъя картинаһының паремииологик берәмектәрҙә ни тиклем сағыу рәүештә асылыуын да күрһәтә.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Сәмситова Л.Х.. Башҡорт теленең мәҙәниәт концепттары. – Өфө: Китап, 2010. – 480 бит.
2. Бухарова Г.Х. Башҡирский эпос «Урал-батыр»: когнитивно-дискурсивный анализ. Уфа: Китап, 2010. – 210 с.
3. Валеев Дж. Нравственная культьура башкирского народа. – Уфа: Китап, 1999. – 254 с.
4. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеолоигяһы. – Өфө: Китап, 2002. – 347 б.
5. Псәнчин В.Ш. Һүҙ күрке. – Өфө: Китап, 2001.– 310 бит.
6. Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө: Китап, 2002. – 354 бит.
7. Урал Батыр: башҡорт халыҡ эпосы. Баш һүҙ Ә.М. Сөләймәнов, башҡ. тәрж. Ғарипов Р. Ҡ. – Өфө : Китап, 2013. – 283 бит.

*©Мукминова А.М., 2021*

УДК 811.512.141

*Мухаметшина А.М., магистрант 2 курса*
*Научный руководитель: Хусаинова Л.М., д.филол.н.*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

# СРЕДСТВА И СПОСОБЫ ВЫРАЖЕНИЯ КАТЕГОРИИ ОТРИЦАНИЯ В БАШКИРСКОМ И РУССКОМ ЯЗЫКАХ, И ИХ СОПОСТАВИТЕЛЬНОЕ ИЗУЧЕНИЕ В УЧЕБНОМ ПРОЦЕССЕ

Отрицание базируется на собственном представлении о норме. Как правило, отрицание проявляется в качестве реакции на предоставленную информацию, не устраивающую по каким-либо параметрам партнера по коммуникации. Однако и инициативная реплика, скрыто или явно содержащая в себе отрицание, может повлечь несогласие и как следствие отрицание актуальной информации. Если утверждение оппонента, по мнению собеседника, является ложным или не соответствует его ожиданиям, тогда возможно появление отрицательного высказывания как способа проявления несогласия. Отрицание – одна из категорий языка, корни которой уходят глубоко в древность: в исторически ценных письменных памятниках языковой культуры категория отрицания выступает как законченная, обладающая собственной формой и содержанием, наряду с категорией утверждения. Таким образом, логично предположить, что необходимость выражения отрицание возникает уже после выражения категории утверждения, как необходимость опровержения.

Как категория языка, отрицание традиционно рассматривается как определенная, структурированная система, через совокупность глагольных и других форм, что находит подтверждение в исследованиях грамматического аспекта теории языка, практических пособиях и учебниках по грамматике. Само понятие грамматической категории отрицания может быть рассмотрено как отрицание, выраженное различными грамматическими средствами с употреблением любых временных форм и грамматических конструкций [5: 93].

Среди отечественных лингвистов, изучающих данную проблему, можно выделить таких, как Г.Х. Ахатов, А.В. Бондарко, Н.А. Булах, А.И. Бахарев, Ф.А. Ганиев, М.З. Закиев, Н.Г. Озерова, Ф.С. Сафиуллина, М.Н. Сметанина, Е.И. Шендельс, и др.

Отрицание в лингвистике – это выражение при помощи лексических, морфологических, синтаксических и других средств того, что связи, устанавливаемой между элементами высказывания не существует [3: 302].

В башкирском языке семантика отрицания выражается на четырёх уровнях: морфологическом, словообразовательном, лексическом, синтаксическом [1: 332–336].

Рассмотрим каждый из них.

1. Морфологический.

Отрицание на этом уровне, выраженное в башкирском языке с помощью аффиксов *-ма/-мә, -май/-мәй, -маҫ/-мәҫ, -майынса/-мәйенсә, -майса/-мәйсә, -мәк* (и его фонетические варианты), передается в русском языке чаще всего с помощью частиц *не, ни*.

Например: в башк. *Беҙҙә ҡыҙҙар һыуҙы көршәк менән ташы**май**, – тинем мин уға...* (З. Биишева). В рус. *Наши девушки воду носят **не** в кувшинах, – начал было я говорить ему*... (Ю. Аминев).

Если в башкирском языке в данных примерах имеется формальный показатель (аффикс отрицания), то в их переводах на русский такого конкретного показателя нет. Слово уже содержит в себе отрицательное значение, как в предыдущем примере.

2. Словообразовательный.

Отрицание на словобразовательном уровне, выраженное с помощью аффикса *-һыҙ/-һеҙ*, префиксов, заимствованных из других языков, словосложений, передается в русском языке чаще всего с помощью отрицательных префиксов *не-, ни-, без- (бес-), обез- (обес-), дис-, дез-, а-, им, ин-, ир-, вне-, о-, сверх-, недо*.

Например: В башк. *Һай, был иғтибар**һыҙ**лыҡ*!.. (З. Биишева). В рус. *Ах, эта **не**внимательность*! (Ю. Аминев). В свою очередь, и на данном уровне не все выражения в башкирском языке совпадают с их переводами на русский.

3. Лексический уровень.

Лексический уровень отрицания в башкирском языке, как нами отмечено выше, представлен модальными словами: *юҡ, түгел*; отрицательными местоимениями: *һис кем, бер кем, һис ҡасан, бер ҡасан, һис нимә, бер нимә, бер ни, бер ҡайҙа, һис ҡайҙа, бер нисек, һис нисек, бер ниндәй, һис ниндәй*. В русском языке отрицание выражается с помощью частиц *не, ни*; отрицательных местоимений

*некого, некому, нечего, некогда, незачем, некуда* и т.д.; предлога *без,* отрицательных слов *нет, нельзя; никогда, ничего* и др.

Например: В башк. *Улайғына ла* ***түгел,*** *дәрүиш*! (З. Биишева). В рус. ***Нет****, даже* ***не*** *ребенок! Дервиш!..* (Ю. Аминев).

4. Синтаксический уровень.

Для выражения отрицания на этом уровне характерно то, что синтаксическая конструкция, кажущаяся на первый взгляд утвердительной, на самом деле содержит отрицательное значение. Такие предложения можно встретить в живой разговорной речи. Здесь отрицание обогащается разными эмоциональными смыслами, например иронией, сожалением, удивлением, ехидством, горем и др. В данном случае очень важную роль играет контекст. Благодаря ему можно точно определить, содержит ли предложение имплицитное отрицание или нет.

Например: В башк. *Бындайҙы шәп булмаған егеттәр ала аламы ни?!* (З. Биишева). В рус. Много ли джигитов может похвастать этим? (Ю. Аминев) (как видим, в слове много имплицирована семантика отрицания: много значит немало). Итак, нами было изучены 4 вида (на семантическом уровне) средств и способов выражения категории отрицания в башкирском и русском языках.

Таким образом, категория отрицания с точки зрения лингвистики представляет собой сложное и многоаспектное явление, способы выражения которого различаются в разных языках. В обоих языках данные категории не всегда идентичны, что отражено в исследовании.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Абдуллина Г.Р., Хисамова Д.Д., Сафина Р.И. Средства выражения отрицания в башкирском, русском и английском языках (на материале рассказа З. Биишевой «Мастер и подмастерье» и его переводы на русский и английский языки) // Филологические науки. Вопросы теории и практики. – Тамбов: Грамота, 2019. – Т. 12. – № 5. – С. 332–336.

2. Андреева И.В. Грамматическая категория отрицания и ее стилистическая потенция: дис. … канд. филолог. наук: 10.02.04. – М., 1974. – 164 с.

3. Ахметова О.С. Словарь лингвистических терминов. 2-е изд., стер. – М.: УРСС: Едиториал УРСС, 2004. – 571 с.

4. Бондаренко В.Н. Отрицание как логико-грамматическая категория: монография. – М.: Наука, 1983. – 211 с.

5. Добренко М.М. Грамматические средства выражения категории отрицания в английском и русском языке // Вопросы филологии и переводоведения Сборник научных статей / Отв. ред. Н.В. Кормилина, Н.Ю. Шугаева. – Чебоксары, 2018. – С. 92–95.

6. Пешковский А. М. Русский синтаксис в научном освещении. 8-е изд., доп. – М.: Языки славянской культуры, 2001. – 544 с.

7. Сирота Е.В. Сопоставительный анализ способов выражения отрицания в русском и румынском языках (на материале художественных текстов) // Мова. – 2018. – № 29. – С. 110–114.

8. Хисамова Д.Д., Ахмадуллина И.Р. Типологическое исследование лексико-морфемных и морфологических средств выражения отрицания в разноструктурных языках // Успехи современной науки и образования. – 2017. – Т. 5. – № 3. – С. 73–76.

*© Мухаметшина А.М., Хусаинова Л.М., 2021*

**УДК 81.366.5**

*Мөхәмәтғәлиева А.Д.,*
*Ғилми етәксеһе: ф.фило.д., проф. Хөсәйенова Л.М.*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ студенты, Өфө ҡ.*

# МОСТАЙ КӘРИМ ПРОЗАҺЫНДА СИФАТТАРҘЫҢ СТИЛИСТИК ФУНКЦИЯЛАРЫ

Хәҙерге әҙәби телдә сифат һүҙ төркөмөнә ҡараусы һүҙҙәр художестволы әҫәрҙең күркәмлеген, образдарҙың сағыулығын тәьмин итә.

Быны беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим әҫәрҙәрендә күрәбеҙ. Сифаттарҙы, стилистик маҡсаттан сығып, яҙыусы үҙенең төрлө әҫәрҙәрендә бик уңышлы ҡуллана.

Мостай Кәрим сифаттарҙы геройҙарына тышҡы йәки эске яҡтан характеристика биргәндә оҫта файҙалана. Сифат һүҙҙәр нигеҙендә төрлө стилистик саралар барлыҡҡа килтерә.

М. Кәрим прозаһында төрлө сифат берәмектәре геройҙарҙың тышҡы ҡиәфәтен һүрәтләүҙә күпләп ҡулланыла. Автор тарафынан

файҙаланылған портрет характеристикалары үҙҙәренең үҙенсәлеге һәм ҡабатланмаҫ стилистик образ тыуҙырыу алымдары байлығы менән йәлеп итә. Образ-персонажды һүрәтләгәндә яҙыусы йыш ҡына уның портретына мөрәжәғәт итә. Был алым төрлөсә ҡулланыла: геройҙың портретын әҫәрҙең бер өлөшөндә (бүлегендә) тулы итеп тасуирлау, икенсе осраҡта ул төрлө урында бирелеүе мөмкин [1: 19].

«Өс таған» повесында малайҙарҙың портреты әҫәрҙең башында уҡ тулы итеп һүрәтләнә. Уларҙа сифат берәмектәренең әһәмиәтен ҡарап үтәйек: «Ыҫмала төҫлө *ҡуйы ҡара* сәсле, *ҡылыс танаулы* малай Ғабдулла исемле. Уның сәсенә ҡулыңды тейҙерһәң бармаҡтарың сатнап йәбешер һымаҡ. *Йәмшек танаулы табаҡ битле* йыуаны — Вәзир. Һыуыҡта ла, эҫелә лә уны ике бит алмаһы гел ҡыҙарып янып тора. Вәзирҙең күҙҙәрен сылт-сылт йома торған ғәҙәте бар. Бер саҡ яңы килгән уҡытыусы апай, үсекләшә тип уйлап, ошо ҡылығы өсөн уны кластан да ҡыуып сығарҙы. Үҙе шундай булһа ла, рогатканан һәләк мәргән ата ул. Өсөнсөһө – берҙән-бер *ерән сәсле, һипкелле малай* – Айҙар. Уның «Ҡыр кәзәһе» тигән ҡушаматы ла бар. Шәп йүгергән өсөн шулай тип йөрөтәләр. Дүртенсеһе саҡ ҡына ситтәрәк ултыра. Уның әле етеһе лә тулмаған. Сысҡан ҡойроғо кеүек кенә толомона *матур ҡыҙыл* таҫма ҡушып үргән. Исеме лә матур уның – Гөлнур. Тик алғы тештәре генә юҡ. Теше булмағас, ауыҙында һис кенә лә һүҙ тормай». Күреүебеҙсә М. Кәрим малайҙарҙың тышҡы ҡиәфәтенә хас һыҙаттарҙы һанау менән генә сикләнмәй, ә уларҙы образлы итеп төп һәм шартлы сифаттар ярҙамында тасуирлай. Бында *ҡара, ҡыҙыл* кеүек төҫ сифаттарының да ҡулланылыуын әйтеп үтергә кәрәк. Төҫ сифаттарының портрет характеристикаларындағы роле тураһында алдан әйтелгәйне инде.

Һүҙҙәрҙе һәм образлы һүрәтләү сараларын (эпитет һ.б.) билдәләү, портретты асыусы ҡайһы бер ҡылыҡтарҙы күрһәтеү, геройҙарҙың нисегерәк итеп күҙ алдына баҫтырылыуын күрһәтеү, әҫәрҙәрҙәге образдарға характеристика биреүҙә мөһим роль уйнай. Портрет характеристикаһын сифаттар нигеҙендә төҙөү образға анализ биреүҙә әһәмиәтле [3: 16].

Портрет характеристикаһын уҡығанда уҡ уларҙа ҡулланылған сифаттарҙың һәр береһе онотолмаҫ билдәне еткереүе менән хәтерҙә ҡала. Ә артабанғы хәл-ваҡиғаларҙа яҙыусы портрет характеристикаһына артыҡ иғтибар итмәй, кәрәк урында уҡыусыға таныш һыҙаттарҙы ҡабатлап ҡына китә, йәки малайҙарҙың үҙҙәренән

әйттерә. Мәҫәлән, «Өс таған» повесында йүгереү буйынса ярыш ойоштороғанда Айҙар алға сыға, Вәзир артта ҡала, шуға ла ул эстән генә «*Ерән* шайтан!» тип уны үсекләй. Рогатканан атыу ярышы ойоштороғанда Вәзирҙең «*һәлпәк* танауына бер серекәй килеп ҡунды» тип һүрәтләй автор. Әҫәрҙә яҙыусы һәр геройҙың портретына, холҡона бәйле ҡушамат та таба: береһе – Йүгерек, икенсеһе Күрәшсе, есенсөһө Мәргән. Тимәк, сифат берәмектәре әҫәрҙә төрлө образлы күренештәр тыуҙырып ҡына ҡалмай, мәғәнә мөнәсәбәттәре тыуҙырып, геройҙың эске холҡон асыуҙа ла мөһим хеҙмәт үтәй.

Автор оҫталығын асыу, унан бигерәк портрет деталдәренең, образдарҙың ниндәй роль уйнауын асыҡлау – былар барыһы ла геройҙарға характеристика биргәндә сифаттарҙың ролен өйрәнеү йүнәлешендә төп методтар.

М. Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәре лә портрет характеристикаларына ифрат бай. Мәҫәлән, Искәндәр Әсҡәте геройын М. Кәрим тәүбашлап «күҙҙәре лә етен сәскәһенә оҡшаған – зәп-зәңгәрҙәр» тип атай.

Артабан, әҫәр барышында Әсҡәткә тышҡы характеристика биреүҙә сифаттар киң ҡулланыла. Миҫалдар: Әсҡәттең инде арҡаһындағы ҡутырҙары ҡубып төшә башланы, йөҙөндәге *ҡара янған* урыны *һарғылт зәңгәргә* әйләнде. Минең башта ултырған *етен башлы, һыңар ҡолаҡлы* Әсҡәт, ҡапыл ҡарағанда, бер тотҡаһы төшкән самауырға оҡшап ҡалған.

«Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесында ҡатын-ҡыҙ героиняларына бирелгән портрет характеристикаларында сифаттар матурлыҡ төшөнсәһен биреүҙә, гүзәл заттың гүзәллеген еткереүҙә оло хеҙмәт үтәй. Миҫалдар: Тимәк, *сөм-ҡара* сәсле, *сөм-ҡара* күҙле, һул битендәге *ҡара* миңе балҡып торған *етем* ҡыҙҡа тиң түгел, сөнки мин яфа сикмәй йәшәнем. Аҡйондоҙҙоң ирендәре буйлап әлеге *арбаусан* йылмайыу йүгерҙе. Бер яғына уның *ыҡсым ғына* атыр көлмәһе төҫлө, төптән *йыуантыҡ,* күҙгә *мөләйем* генә бисәһе, икенсе яғына – *сөм-ҡара* сәсле, атаһыныҡы шикелле *зәп-зәңгәр* күҙле Аҡйондоҙ баҫҡан.

М. Кәрим әҫәрҙәрендә яһалма сифаттар күпләп осрай. Улар образдың үҫтәлмә билдәһен асыҡлауҙа, образлы стилистик биҙәк биреүҙә ҡатнаша. Яһалма сифаттарҙың айырым әҫәрҙәрҙә образдарҙы характерлауҙа үтәгән функцияларын ҡарап үтәйек.

«Өс таған» повесы яһалма сифаттарҙың үҙенсәлекле ҡулланылышы менән характерлана. Повеста улар бигерәк тә

образдарға портрет характеристикаһы биргәндә предмет билдәһен көсәйтеп килеп, геройҙарҙың тышҡы ҡиәфәтен асыҡларға ярҙам итә. Миҫалдар: Айҙарҙың ярылып бөткән *йүгерек* ҡулдарына, ысынлап та һоҡланып тумаҫлыҡ ине. Нескә, оҙон тал сыбыҡтары уның бәләкәс бармаҡтарында, ебәк таҫма урынына, бөгөлөп-һығылып унай.

«Өс таған» повесынан алынған текста, сифаттар геройҙың тышҡы хәлен һүрәтләүҙә әһәмиәтле: «Шундай татлы уйҙарға батып ағасын юна ғына башлағайны, үткер бысаҡ, кескәй генә бер ботаҡты киҫеп, һул ҡулдың баш бармағына килеп тә тейҙе. Бармаҡтан атылып ҡыҙғылт ҡан сыҡты. ... Күкрәктауҙың ослайып торған ҡаялы еренә барыр ҙа таштан ташҡа һикереп өйрәнер. Башлап ҡуйған бурысты үтәр. Әсәһенең *һиҙгер* күҙҙәре шикләнеп ҡарамаһын тип, башта яй ғына ҡапҡа төбөнә килде».

Һүҙҙе йомғаҡлап, М. Кәрим әҫәрҙәрендә геройҙарҙың тышҡы ҡиәфәтен һүрәтләүҙә төрлө сифат һүҙҙәрҙең күпләп ҡулланылыуына инандыҡ. Төҫ сифаттары портрет характеристикаһын биреүҙә ҙур роль унай, уларҙың дәрәжә формалары ла актив файҙаланыла. Шартлы сифаттар геройҙарҙың тышҡы ҡифәтендәге бығаса билгеһеҙ үҙенсәлектәрҙе асып, уҡыусыны ҡыҙыҡһындырыу, геройҙарҙың ҡабатланмаҫ индивидуаллеген биреү хеҙмәтен үтәй.

## ӘҘӘБИӘТ

1. Кәрим М. Өс таған. Повестар, хикәйәләр. – Өфө: Башҡртостан китап шәриәте, 1990. – 192 бит.

2. Псәнчин В. М. Кәрим – һүҙ оҫтаһы. – Өфө: Китап, 1972. – 210 бит.

3. Сәйетбатталов Ғ.Ғ. Стилистика. 6 том. – Өфө: Китап, 2006. – 451 бит.

© *Мөхәмәтғәлиева А.Д., Хөсәйенова Л.М., 2021*

**УДК 811.512.141**

*Мырҙабулатова Э., 5-се курс студенты*
*Ғилми етәксеһе: Л.М. Хөсәйенова, филол. ф. к.,*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ТЕРМИНОЛОГИЯ ФӘНЕНЕҢ ФОРМАЛАШЫУ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Термин – айырым эшмәкәрлек, белем – ғилем өлкәһендә билдәле бер төшөнсәне белдергән махсус һүҙ, икенсе төрлө әйткәндә, фәндә, техникала, сәнғәттә һ.б. ниндәй ҙә булһа бер төшөнсәнең рәсми рәүештә ҡабул ителеп, законлаштырылған атамаһы булған һүҙ йәки һүҙбәйләнеш ул. Әйткәндәй, «термин» һүҙенең (төшөнсәһенең) фәнни документтарҙа ҡулланылыштағы мәғәнәһе бик киң уның. Терминология 1) терминдарҙы өйрәнеүсе махсус дисциплинаны (термин ғилемен) ғына түгел, ә бәлки 2) теге йәки был фән тармағында ҡулланылған терминдар йыйылмаһын да аңлата: башҡорт терминологияһы; тел терминологияһы (терминдары) [3: 12].

Аңлашылыуынса, терминологияны шартлы рәүештә булһа ла халыҡ терминологияһына һәм фәнни терминологияға бүлеп ҡарауҙың нигеҙе, ерлеге бар һәм ул асылда милли терминологияның сығанаҡтары мәсьәләһенә барып тоташа. Халыҡ терминологияһын туплау, теркәү һәм өйрәнеү эше менән нигеҙҙә диалектологтар, тарихсы-этнографтар, гуманитар өлкәләрҙең энтузиаст ғалимдары, педагогтар шөғөлләнде һәм шөғөлләнә.

Үткән быуаттың һуңғы сирегендә үҙ аллы яңы фәнни таныр-белеү өлкәһе – ватан термин ғилеме формалашты һәм ныҡынды, уның 1) үҙ предметы; 2) объекты; 3) тикшеренеү методтары һәм методологияһы һәм 4) актив ойошоусы категориаль-төшөнсә аппараты һәм беренсел мета-теле бар. Был берәгәй лингвистик тәғлимәт үз сиратында ҡатмарлы һәм күп аспектлы дисциплинар структураһынан ғибәрәт: дөйөм термин ғилеме; хосуси (милли һәм тармаҡ) термин ғилеме; тасуири термин ғилеме; сағыштырма термин ғилеме; оҡшаштырма термин ғилеме; тарихи термин ғилеме; филологик термин ғилеме; типологик термин ғилеме; лингводидактик термин ғилеме; терминография (термино-логик лексикография); текстың, терминологик теорияһы; термин ғилеме тарихы һ.б.

Термин һәм терминология мәсьәләләре белгестәр иғтибарын һәр саҡ йәлеп итеп килде. Фәнни-техник революция ҡыҙыу темп менән

үҫкән беҙҙең дәүерҙә был проблема тағы ла актуалләшә төшә. Был турала 1959 йылдан бирле үткәрелеп килгән Бөтә Союз терминология кәңәшмәләрендә лә, һуңғы йылдарҙа донъя күргән башҡа хеҙмәттәрҙә лә күп әйтелде. Фәнни асыш һөҙөмтәләрен, техниканың һуңғы ҡаҙаныштарын практикаға индереү яңынан-яңы һүҙҙәр, терминдар барлыҡҡа килтерә.

1917 йылға тиклем башҡорт теленең ҡалыпҡа һалынған, формалашҡан фәнни терминологияһы булмай әле. Билдәле булыуынса, теге йәки был телдең һүҙлек составы шул телдә һөйләшкән йәмғиәт үҙ тарихында эш иткән төшөнсәләрҙе сағылдыра. Шуның кеүек үк, башҡорт теле лә башҡорт халҡының ул замандағы тормош-көнкүрешенә, мәҙәниәтенә хас булған бөтә нәмәне тулыһынса сағылдырырлыҡ бай була. Ләкин башҡорт халҡының революцияға тиклемге тормошонда әле булмаған фән, техника, сәнғәттең күп кенә төрҙәре һәм башҡалар өсөн унда, әлбиттә, тейешле атамалар булмай. Ниндәй ҙә булһа ғилми төшөнсәне сағылдырырға кәрәк булғанда, ғәрәп һүҙҙәре ҡулланыла, сөнки ғәрәп теле, ислам дине таралған башҡа бөтә телдәрҙәге кеүек үк, дин өсөн дә, фән өсөн дә берҙән-бер тел була. [6: 34].

1917 йылдан һуңғы башҡорт халҡының экономик, политик һәм мәҙәни тормошонда булған ғәйәт ҙур үҙгәрештәр милли телдәрҙең бөтә яҡлап үҫешенә килтерә. Башҡорт автономиялы республикаһы төҙөлгәс, башҡорт теле урыҫ теле менән бер рәттән рәсми дәүләт теле тип иғлан ителеп, туған телдә эш ҡағыҙҙары алып барыла, дәреслектәр, художестволы, фәнни-техник һәм ижтимағи-политик әҙәбиәт баҫыла башлай. Ләкин тәүге осорҙа матбуғат эшселәре, дәреслек төҙөүселәр, тәржемәселәр ҡыйын хәлдә ҡала, сөнки революция килтергән тарихи үҙгәрештәрҙе, яңы күренеш һәм төшөнсәләрҙе сағылдырыу өсөн туған телдә атамалар, терминдар булмай, һәр автор, һәр тәржемәсе терминдарҙы үҙ белдегенсә ҡуллана. Шулай итеп, милли терминологияны төҙөү эшен яйға һалыу, терминдарҙы тәртипкә килтереү көнүҙәк бурыс булып килеп баҫа.

Башҡорт теленең лексикаһының терминологик составы ғәрәп һәр рус, көнбайыш телдәре сығанаҡлы берәмектәргә шаҡтай бай. 20-се йылдарҙа башҡорт әҙәби теленең лексик составында ғәрәп һәм фарсы терминдары ҙур урын алып торһа, әҙәби телдең үҫеш процесында улар аҡрынлап йә төп башҡорт һүҙҙәре менән, йә урыҫ теленән үҙләштерелгән яңы һүҙҙәр менән, йә урыҫ теле аша килеп ингән интернациональ һүҙҙәр

менән алмаштырыла [2: 122]. Мәҫәлән (башта ул ваҡытта ҡулланылған ғәрәп һүҙе, – һуңынан уны алмаштырған һүҙ бирелә): *мөндәрәжә – йөкмәтке, мөхәррир – редактор, мәсьүл мөхәррир – яуаплы редактор, тәсдиҡ (итеү) – раҫлау, мәркәз – үҙәк, нотоҡ – телмәр, ғәреп – көнбайыш, матдә – статья, шәкел – форма, сәйәсәт – политика, һәндәсә – геометрия* һ.б.

Әлбиттә, терминология фәненең үҫеше эше еңел һәм шыма ғына бармай. Тейешле ғилми һәм методологик әҙерлектең булмауы эштә байтаҡ ауырлыҡтар тыуҙыра, тәүге эштәрҙә кәмселектәр ҙә күренә. Терминдар яһауҙа һәм үҙләштереүҙә юғарыла әйтелгән принциптарға таянып эш итеү арҡаһында артыҡ пуристик тенденцияларға юл ҡуйылмаһа ла, инҡилаб (революция), йөмһүриәт (республика), иҡтисад, иҡтисади (экономика, экономик), шиүә (һөйләш) тибындағы ғәрәп һүҙҙәре менән мауығыуҙар йәки яңы төшөнсәгә туған телдә нисек тә булһа эквивалент табырға, сит телдән үҙләштерелеүсе һәр терминды тәржемә итергә тырышыуҙар булғыланы.

Мәҫәлән, 1921–1922 йылдарҙа газета биттәрендә *комиссар, комиссариат* һүҙҙәре урынына *түрә, түрәлек* һүҙҙәре осрай; русса автомашина урынына *утарба* һүҙе тәҡдим ителгән була.

30-сы йылдарҙа ауыл хужалығын коллективлаштырыуға, фән һәм техниканың үҫешенә, илдәге ижтимағи-административ үҙгәрештәргә бәйле рәүештә телгә бик күп яңы һүҙҙәр, атамалар килеп инә. Мәҫәлән: *автомобиль, алгебра, адрес, колхоз, комсомол, комбайн, комбайнер,* һ.б.

Илдә барған фәнни-техник революция әҙәби телдең терминологияһын үҫтереүҙә яңынан-яңы бурыстар ҡуя. Был эш менән ғилми яҡтан да, практик йәһәттән дә юғары кимәлдә етәкселек итергә кәрәк була. Ошо маҡсатты күҙ уңында тотоп, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы 1954 йылда махсус комиссия булдыра.

Терминология комиссияһының 1973 йылда раҫланған яңы ҡарарында әйтелгәнсә, ул, бөтәһенән элек, терминологияның торошон һәм үҫеш перспективаларын даими күҙәтеп барырға, контролдә тоторға саҡырылған. [6: 37].

1950–1960 йылдар арауығы тел белемендә термин һәм терминология мәсьәләһе ныҡлап тикшерелә башлай. Шуға күрә термин төшөнсәһенең ҡабул ителгән берҙәм атамаһы юҡ.

«Термин – ул махсус производство, фән-техника, сәнғәт, йәмғиәт тормошо һ.б. өлкәләрҙәге предмет-күренештәрҙең, сифат, мөнәсәбәт һәм

процестарҙың теүәл билдәләмәһе («обозначение») булған һүҙ йәки һүҙ теҙмәһе»[1: 67]. Был билдәләмәлә терминдың ҡулланыш сфераһы, теүәллеккә ынтылышы, ниндәй объекттарҙы атау төрө күрһәтелгән, әммә һүҙ теҙмәһе булыу-булмауы терминдың асылына ҡарамай, бәлки тышҡы яһалыш төрө генә (термин – лексик, һүҙтеҙмәһе – синтаксик категория булараҡ та бер-береһе менән һыйышмайҙар).

«Терминдар фән, белем һәм кешелек эшсәнлегенең билдәле бер тармағына ҡараған махсус төшөнсәләрҙе белдерәләр, йәғни терминда кешенең ижтимағи хеҙмәт бүленеше сағыла» [4. с. 67]. Бында «термин» фән менән генә сикләнелмәй, айырым эш-хеҙмәт тармағындағы махсус төшөнсә аңлаткан атамаларҙы ла эсенә ала. Әммә был аңлатмала нимә ул термин тигән һорауға яуап бирелмәй.

Түбәндәге аңлатма, ҡыҫҡа ғына булһа ла, дөйөм һәм аңлайышлы:

«Термин – ул билдәле бер теүәл фәнни төшөнсәгә беркетелгән һүҙ йәки һүҙ теҙмәһе. Ырыу төшөнсәһе буйынса термин – иң элек «һүҙ», артабан махсус билдәләре күрһәтелә: ул – мәғлүм бер төшөнсәгә беркетелгән һүҙ, йәғни уға ғәҙәти мәғәнәһенән тыш махсус функция – теүәл фәнни төшөнсә белдереү йөкмәтелгән [7: 42].

Шулай итеп, терминология тармағы башҡорт тел ғилеменең айырым бер тармағы булып формалаша. Терминға бәйле билдәләмәләр тел ғилемендә күп төрлө һәм нигеҙҙә уны тикшереү төрлө методологик юлдар буйынса башҡарыла.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Зайнуллина Г.Д. Формирование и развитие лингвистической терминологии башкирского языка. – Уфа: Гилем, 2002. – 134 с.

2. Ишбирҙин Э.Ф., Ғәләүетдинов И.Ғ., Халиҡова Р.Х. Башҡорт әҙәби теленең тарихы, Өфө: Китап, 1993. – 320 бит.

3. Кагарманов Г.Г. Формирование и развитие общественно-политической терминологии башкирского литературного языка: АКД. – Уфа, 1979. – 18 с.

4. Ҡаһарманов Ғ.Ғ. Башҡорт теле лексикаһы һәм терминологияһы. –Өфө,2002. – 235 бит.

5. Развитие терминологии башкирского литературного языка: Исследования и материалы. – Уфа, 1981. – 152 с.

6. Әбсәләмов З. Башҡорт терминологияһының үҫеш юлдары // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 1977. – 34-се бит.

7. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең аңлатмалы һүҙлеге / З.Ғ. Ураҡсин редакцияһында. – Өфө, 2004. –528 бит.

*©Мырҙабулатова Э.Р., Хөсәйенова Л.М., 2021*

**УДК 811.512.141.**

*Сагитова А.Р., магистрант*
*Научный руководитель: Султакаева Р.А., к.филол.н., доцент*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфа*

## ЯЗЫКОВАЯ МОДЕЛЬ МИРА В ПОВЕСТИ МУСТАЯ КАРИМА «РАДОСТЬ НАШЕГО ДОМА»

Славный сын башкирского народа – Мустафа Сафич Каримов внес огромный вклад в сокровищницу мировой литературы, поднял на новый уровень традиции классической башкирской литературы. Он приложил все свои силы и талант, формируя неповторимый образ современного Башкортостана.

Из-под пера Мустая Карима вышли выдающиеся произведения, вошедшие в золотой фонд башкирской литературы и театра: драмы «Страна Айгуль», «Пеший Махмут», комедия «Похищение девушки», трагедии «В ночь лунного затмения», «Салават», «Не бросай огонь, Прометей!», повести «Долгое-долгое детство», «Таганок», «Помилование» и многие другие. Он достойно представлял башкирскую и российскую литературу за рубежом. Его произведения переведены на многие языки мира, стали органической частью многих национальных культур. Деятели культуры и читатели России, Казахстана, Узбекистана, Таджикистана, Азербайджана, Украины, Белоруссии, Турции, Китая, Болгарии и других стран более полувека отдают должное высокому литературному мастерству, богатому творческому наследию Мустая Карима.

Творчество М. Карима признано и любимо многими поклонниками его таланта, поэтому велик интерес к его прозе со стороны исследователей. Л.Х. Самситова, Ф.Б. Санъяров, Г.Р. Ижбаева анализировали произведения писателя в лингвокультурологическом плане.

Произведения для детей составляют небольшую часть во всем творческом наследии писателя. Но ценность их от этого не умаляется. М. Карим начинал в прозе с детских рассказов и повестей. Это же

утверждает и Г. Хусаинов: «В прозу Мустай Карим пришел через детскую литературу, и пришел он туда «своей походкой», то есть «походкой» близкого друга детей».

Первая детская повесть называлась «Радость нашего дома». Здесь рассказывается о жизни обычной детворы в небольшом ауле. Мама привозит Ямилю сестру, девочку по имени Оксана, к которой башкирский мальчишка привязывается всей душой. На глазах читателя идёт обычная жизнь с её радостями и горестями. В данной статье попытаемся смоделировать языковую картину мира в повести писателя «Радость нашего дома».

Повествование ведется от имени Ямиля, маленького мальчика, который еще не ходит в школу. Он все хочет знать, все познать, ему все интересно. Поэтому в повести автор использует очень много риторических вопросов. *Ниңә мин әле ете менән генә барам икән, ниңә һигеҙ менән бармайым икән?* (с. 14) *Оксана ояла. Ниңә ояла ул?* (с. 17) *Ҡапыл һеңлем әсәйемә килеп һыйына. Әллә минән ҡурҡамы икән?* (с. 18) *Тик нисек кенә өндәшергә икән һеңлемә? Ул бит барыбер минең һүҙҙәремде аңламай. Ниңә генә аңламай икән инде?* (с. 19) *Әллә ул ҡайынды йылытырға итәме икән?* (с. 21) *Ниңә улай ирендәре, иларға иткән кеүек, ҡалтырап тора? Ни булған уға?* (с. 22) *Ниңә аяҡтар йүгереп китергә генә тора икән был тиклем? Әллә ысынлап та, әкиәттәге итектәр кеүек, үҙҙәре йөрөй торған башмаҡтармы икән былар?* (с. 37) *Бәләкәй кеше һуғыш булған ерҙә йөрөймө инде?* (с. 57) *Ниңә, ҡунаҡ булып тороу яҡшы түгелме ни?* (с. 65)

Писатель использует восклицательные знаки для усиления интонации. В основном – это выражение сильного чувства радости и восторга. Они придают текстам эмоциональность. Можно привести такие примеры восклицательных предложений: *Йүгереп барып, ошо яҙыуҙы ҡысҡырып уҡып биргем килә. Нисек ҡыуаныrҙар ине улар!* (с. 14) *Теге телеграмманы мин әле яңы ғына аңлап алам: иртәгә минең әсәкәйем ҡайта!* (с. 15) *Минең дә һеңлем бар, Оксана исемле һеңлем бар!* (с.16) *Бына ни тиклем уйынсығым бар ине минең!* (с. 17) *Ниндәй шат минең әсәйем!* (с. 17) *Бәрәстәр ни эшләй һуң, бәрәстәр! Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ!* (с. 24) *Бына башмаҡтар, исмаһам!* (с. 36) *Бына ниндәй киң ул!* (с. 41) *Әһә, ҡаптыңмы ҡармаҡҡа! Бына ниндәй икән был бабай!* (с. 45) *Ниндәй генә сәскәләр, ниндәй генә ағастар үҫмәй ул баҡсала!* (с. 70)

Мустай Карим применяет междометия для речевой характеристики персонажей. Междометия придают речи живость, они свойственны эмоциональным репликам и восклицаниям. Например: *Эй-й, һеңлем булһамы, мин уны күтәреп кенә йөрөтөр инем* (с. 8). *Бәй, балалар бар сакта, ни эшләп аптырап торабыҙ әле?* (с. 14) *Ҡуй, тешләмәһен, мин ҡурҡам* (с. 23). *Ой, кәрәкмәй, кәрәкмәй!* (с. 23) *Әллә-лә-лә, бирәүҙәр яңы башмаҡ кейеп алғанмы ни?* (с. 40)

*– Ой, ниндәй башмаҡтал кейгән*! (с. 40) *Их, ошо мәлдә ат менгән атайым бер ҡулына мылтыҡ, бер ҡулына ҡылыс тотоп килеп сыҡһа ине* (с. 44). *Әһә, ҡаптыңмы ҡармаҡҡа!* (с. 41)

Мустай Карим в произведении удачно использовал башкирские пословицы и поговорки. Их больше всего в разговоре применяет Мансур бабай и бабушка Ямиля. В этих небольших высказываниях сокрыта глубокая мудрость, способная раскрыть сущность многих вещей. *Алдыңды-артыңды ҡарап йөрө инде, ҡыҙым, – ти өләсәй, –* ***юл аҙабы – йән ғазабы****, тигәндәр бит* (с. 7). *Бабай, әбейҙе етәкләп, һөйләнә-һөйләнә түргә уҙҙы: «****Алтылағы сәфәрҙән ҡайтһа,*** *– ти ул, –* ***алтмыштағы күрешә килһен****, тигәндәр боронғолар»* (с. 18). *Мансур бабай бер көн әйтә: «****Ҡунаҡ йөҙөн күрмәгән кеше шатлыҡ йөҙөн күрмәй ул****», – ти, беҙҙең радио һөйләгәндә тыңлағас* (с. 33). *«****Ярым-ярты эш эшләп йөрөү – ирлек түгел!****» – ти Мансур бабай бер көн соҡор буйы Зәһитҡа* (с. 65).

Таким образом, мы рассмотрели языковую модель мира в повести Мустая Карима «Радость нашего дома». Как мы видим, великий поэт и писатель очень удачно использует междометия, пословицы и парные слова. Применение пословиц и поговорок помогают лучшим образом донести до читателей мысли и чувства автора.

## ЛИТЕРАТУРА


1. Башкирско-русский словарь / Под ред. З.Г. Ураксина. – М., Дигора, Рус. яз., 1996. – 884 с.
2. Киекбаев Дж.Г. Башкирский язык для педагогических колледжей и училищ. – Уфа: Китап, 2010. – 480 с.
3. Каримов М.С. Радость нашего дома. Повести, рассказы. – Уфа: Китап, 2003. – 240 с.
4. Фразеологический словарь башкирского языка / З.Г. Ураксин. – Уфа: Башк. изд-во «Китап», 1996. – 287 с

5. Хусаинов Г.Б. Мустай Карим: Личность. Поэт. Драматург. Прозаик. – Уфа: Китап, 1994.
©*Сагитова А.Р., Султакаева Р.А., 2021*

**УДК 821.512.141**

*Сырлыбаева Ф.Ф., студент*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

# МӨНИР ҠУНАФИНДЫҢ «ТӘҢРЕ ӨРӨК ҠАПҠАНДА», «КАЙНОЗОЙ» ХИКӘЙӘЛӘРЕНДӘ ХАРАКТЕР БИРЕЛЕШЕ

Мөнир Ҡунафиндың ижады уҡыусыларға күптән таныш. Уның хикәйәләрен бик күптәр яратып уҡый. Яҙыусы әҙәбиткә шиғырҙар менән килһә лә, һуңғы йылдарҙа заманса, уҡымлы проза әҫәрҙәре өҫтөндә эшләй.

М.Ҡунафиндың хеҙмәт эшмәкәрлеге журналистика менән бәйле: ул бер нисә республика баҫмаларында эшләп китә, хәҙерге көндә «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире. Әҙиптең ижады менән уның йыйынтыҡтарынан танышырға була: «Ғүмер уртаһы» тигән шиғри йыйынтығы менән үҙ уҡыусыларын һөйөндөрә, унан һуң хикәйәләрҙән торған «Тәңре өрөк ҡапҡанда» (2012) китабын сығара. Тағы ла Мөнир Ҡунафиндың драма әҫәре Ғафури районында, Сибай, Стәрлетамаҡ ҡалалары театрҙарында сәхнәгә ҡуйылыуы хаҡында ла хәбәр ителде. Яҙыусының шулай уҡ «Йөҙөп барған, ти, аттар диңгеҙҙә» (2017), «Под устаревшим солнцем» (2019), «Шаҡмаҡ ҡояш» (2021) йыйынтыҡтарында башҡорт һәм рус телдәрендә күп уҡыусылар яратып уҡыған әҫәрҙәре тупланған.

«Башҡортостан», «Йәшлек» гәзиттәрендә, «Ағиҙел», «Ватандаш» журналдарында Мөнир Ҡунафиндың ижадына бәйле мәҡәләләр, әңгәмәләр баҫылып сыға.

Әҙиптең хикәйәләре төрлө-төрлө һәм күп яҡлы. Ул бер әҫәрҙә тәрән фекерҙе лә, заман проблемаларын да, психологик-философик аспекттарҙы ла уңышлы ойоштороп ижад итә. Шул уҡ ваҡытта әҫәр геройҙары уҡыусыға яҡын йәки таныш, беҙҙең эргәлә генә йөрөгән ябай кешеләр. С. Әбүзәр «Башҡортостан» газетаһындағы мәҡәләһендә яҙыусының ижады тураһында «тормоштоң үҙе кеүек ҡатмарлы, күктең үҙе кеүек ҡатлы-ҡатлы әҫәрҙәрен еңелсә генә уҡып сығыу мөмкин түгел, шуға күрә кәйлә менән ер аҡтарған шахтер кеүек, фекерҙәр һәм уйҙар ҡатламында ҡаҙынырға тура килер. Уның геройҙары көн менән төн, тыуым менән үлем, диуаналыҡ менән бөйөклөк ҡауышҡан сиктә йәшәй. Уларҙы уҡып, күҙ йәшендә йылмайыу барлығын,

хәсрәттә шатлыҡ йәшәүен, һалҡындан йылылыҡ бөркөлөүен тойорһоң»тип билдәләй [2: 2].

М. Ҡунафиндың «Тәңре өрөк ҡапҡанда» хикәйәһенең геройҙары ла үрҙә әйтелгән кеүек, әҫәр башында уҡ үҙҙәренә йәлеп итә лә, аҙаҡҡаса ебәрмәй. Хикәйә 64 йәшлек Фәйрүзәнең ауырып китеүе тураһында бәйән итеүҙән башлана. Ул үҙе өсөн түгел, ире Мәргән өсөн «минһеҙ ни эшләр инде» тип ҡайғыра. Врачтар әйтмәһәләр ҙә, ҡатын үҙенә йәшәргә күп ҡалмағандыр, тип уйлап, ире өсөн борсолоп, хатта йоҡоһон юғалта. Автор бер-нисә тиҫтә йыл ваҡыт арауығын ала: хәҙерге һәм үткәндәрҙе хәтерләү. Был да уҡыусыға бик яҡын, кеше үҙ тормошонда йыш ҡына үткәндәрҙе хәтерләй, уйлана, һығымталар яһай, хәҙергеһе менән сағыштыра. Бында беҙ Фәйрүзәнең хәтерләүҙәре аша геройҙар менән тәрәндәнерәк танышабыҙ, уларҙың икәү-ара мөнәсәбәттәрен күҙ алдына баҫтырабыҙ.

Фәйрүзә үҙенең ғүмере аҙ ҡалған тип уйлап, тормошо, ғаиләһе тураһында уйлана: «Ҡалай ҡыҙыҡ, бер-беребеҙҙең ҡәҙерен белеп, иплəп кенә ул да, мин дә баһабыҙҙы күтәреп йәшәгәнбеҙ түгелме? Шуға араға әсе ғәйбәт елдәре үтә алмағандыр ҙа әле»[1: 85]. Бигерәк тә ире өсөн борсолоп, уға иптәш эҙләүен тасуирлаған юлдарҙы уҡып ҡайһы бер уҡыусы «Үҙең тере саҡта яратҡан ireңә иптәш эҙләп ултырыу дөрөҫмө» тигән һорау биреүе мөмкин. Әлбиттә, Фәйрүзә өсөн дә был ҡарар ауыр бирелә, тик ул ирен хәстәрләп шундай аҙымдар яһай – күршеһе Зөләйхаға димләй. Үҙенең ғүмеренең сиге еткән тип уйлаған ҡатын Мәргәнде ҡайғырта, уның тормошон, унһыҙ үтәһе көндәрен хәстәрләй. Бындай аҙымдарға барыу өсөн дә көслө булыу кәрәктер. Ваҡсыл, эсендә түбән хис-тойғолар йөрөткән кеше улай эш итә алмаҫ ине.

Фәйрүзәнең тормош иптәше Мәргән дә күңел матурлығы, рухи көсө, тырыш һәм тәрән ҡарашлы итеп һүрәтләнә. Уның характеры ике персонаждың һөйләшеүҙәре, бер-береһе хаҡында нисек фекер йөрөтөүе, теге йәки был мәсьәләләрҙе нисек хәл итеүен күрһәтеү аша бирелә.

«– Ҡарасҡы кеүек йәмһеҙ кәләште нимә тип алдың икән һин, Мәргән? – был һорауҙы йыш бирә торғайны ҡатыны иренә.

– Йәмһеҙ ине күрә белмәгәндәргә. Йәмһеҙ, ләкин һөймәлекле ине. Ә һөймәлекле һөйәк тамаҡҡа тормай ул, – тип ҡысҡырып көлөп ебәрә Мәргән» – был юлдарҙы уҡып, Мәргәндең күңелен, эске донъяһын тойорға була. Күрә белмәгәндәргә, моғайын, Фәйрүзә йәмһеҙ тойолғандыр, тик Мәргән, һипкелдәрҙән, киң устарҙан бигерәк, эске матурлыҡты тоя белгән. Шуға ла тәү күргәндән алып был ҡыҙға

тартылып торғандыр ул. Йәш ир тәү ҡауышҡан кистә кәләшенә сәскә бәйләме - әрем тотоп инә – «Әремдең дә үҙ йәме, үҙ тәме» тип белдерә ул. Ябай күренештәрҙән дә матурлыҡ табыу, уны күрә белеү – бәхетлеләрҙең өлөшө. Мәргән менән Фәйрүзә – икеһе лә көслө, ғорур һәм таҙа күңелле кешеләр, шунлыҡтан улар төҙөгән ғаиләләре лә ныҡ. Быны Мәргәндең торналар менән һөйләшеп ҡанатланыуы, балалары атлап йөрөүен үҙенең аяҡтары кеүек тойоуы, ҡатыны өсөн барыһына әҙер булыуынан, ә Фәйрүзәнең тоғро булыуынан, ире өсөн борсолоуынан күрергә була.

Зәғиф имән, торналар образдары, геройҙарҙың диалогтары әҫәрҙең атмосфераһын булдыра, геройҙарҙың кисерештәрен, хис-тойғоларын тулыландырып тора. Улар аша уҡыусы тулы картинаны күҙ алдына баҫтыра, геройҙар менән бергә уйлай, кисерә, уйлана.

Ике геройҙың мөнәсәббәттәре гармониянан торһа ла, хикәйә аҙағында ошо гармонияны боҙорҙай күренгән көнсөллөк тойғоһо булыуын күрәбеҙ. Фәйрүзә үҙе ҡалала саҡта ире күршеһе Зөләйха менән ҡауышып ҡуйһа тип ҡурҡа, һәм яңылышып, уңайһыҙ хәлдә ҡала. Артабан ваҡиғалар киҫкенләшә: ауырыған Фәйрүзә йүнәлә, тик Мәргән генә, ат тибеп, төҙәлә алмай. Үлем түшәгендә ятҡан Мәргән тәүге һөйгәнен саҡыртып, «Һин сати булманың» тип ҡаты хөкөм сығара. Бында уҡыусыға геройҙың характеры икенсерәк яҡтан асыла.

«Тәңре өрөк ҡапҡанда» хикәйәһенең геройҙары бик тулы һәм төрлө яҡтан күрһәтелгән. Төрлө алымдар, символдар ҙа бик уңышлы ҡулланылып, образдарҙы тулыландыра. Яҙыусы геройҙарҙы тулыһынса асып бирә алған.

Мөнир Ҡунафиндың «Кайнозой» хикәйәһе геройын алып ҡарағанда, уның характеры ла бик төрлө яҡтан һәм уңышлы итеп асып бирелә. Әҫәр төп  герой Азат тың элмәккә тип урманға килеүенән башланып китә. Артабанғы юлдарҙа уҡыусыға тулы картина асыла бара. Азат уйлана, икеләнә, эсендәге тауыштар тынғы бирмәй: «Әле генә үҙеңә ҡул һалырға йыйына инең. Нишләп улай әжәлеңдән ҡасырға булдың әле, Азат? Бауға аҫылынып торҙоң ни ҙә, бүреләр өҙгөсләп ташланы ни». Ул бер үк ваҡытта тәүәккәл дә, шул ваҡытта икеләнеп, ниндәй аҙым һайларға белмәй. Хикәйәлә автор геройҙың эске донъяһын уй-кисерештәрен күрһәтеүгә ҙур иғтибар бүлә. Азат йә тәүәккәл, йә юғалып ҡалған кеүек, йәиһә сәмләнеп тере ҡалырға тырыша, йә асыулана. Әҫәрҙе артабан уҡыһаҡ, был персонаж тағы ла башҡа яҡтарҙан асыла: Азат китап уҡырға ярата. Күпте белгән өсөн уны хатта Кайнозой тип атағандар бит. Киләһе

юлдарҙан Азаттың элмә юлына барыуының сәбәптәре, тормошонда килеп сыҡҡан проблемалар ҙа тәрәндәнерәк асыҡланып, уның характер асылыуы тағы ла тулылана, киңәйә. Ҡыҙы Сәриәне уйлап, атаһы үҙ-үҙенә көйәләнә, эшләп өлгөрмәгән эштәре өсөн үкенә. Үҙенең хистәре аңын томалағанын аңлаһа ла, ул был хистәрҙе тыя алмай. Ултыра торғас, ул хыялланып, йә Хәйәм, йә Есенинды күҙ алдына баҫтырып һөйләшә башлай, көлә, унан илай. Илаған һайын еңеллек тоя бара. Азаттың хыялында ғына булһа шағир-яҙыусылар менән һөйләшеүҙәре аша уҡыусы персонаж менән тағы ла төптәнерәк таныша, уның эске донъяһын ныҡыраҡ аңлай. Азат үҙенең ни өсөн үлергә теләүен дә, бөтә уй-кисерештәрен дә хыялындағы Хәйәмгә һөйләп бирә. Уның күңелен ғәҙелһеҙ донъя, хыянат һәм башҡа һорауҙар борсой, ул үҙен хатта был донъяла артыҡ итеп тоя. Хыялланып ултыра торғас, Азат бөтөнләй аҡылдан яҙғандай, бейәләйен дә, бүркен да сисеп ырғыта, аҙаҡтан бүреләргә бирелергә теләп, ағаста ултырған еренән ергә һикерә. Ергә килеп төшһә лә, унда бүреләр күптән киткән була инде. Ул, һайлағанса элмәктә түгел, ә көтөлмәгәнсә – туңып һәләк була.

Был хикәйә тормошонда буталып, ниндәй юл һайларға белмәгән, һәм һуңынан килеп бөтөнләй юлы өҙөлгән герой менән таныштыра. Персонаждың характеры баштан алып аҙағынаса бик тулы итеп асыла, уның уй-кисереш, хис-тойғолары ла аңлашылып тора. Үҙ-үҙенә биргән һорауҙар һәр уҡыусыны ла уйланыуҙарға этәрә.

Үрҙә әйтелгәндәрҙән сығып, шуны әйтергә була: Мөнир Ҡунафиндың һәр геройы ла тулы һәм аңлашылып тора. Яҙыусы төрлө деталдәр, алымдар ярҙамында характерҙарҙы бөтә киңлегендә асып бирә алған. Шуға күрә хикәйәләр ҙә бик уңышлы, оҫта башҡарылған, тип әйтә алабыҙ.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Ҡунафин М.С. Тәңре өрөк ҡапҡанда: хикәйәләр. – Өфө: Китап, 2012. – 216 бит.
2. Әбүзәр С. Мөнир Ҡунафин: «Яҡтылыҡ менән дә ҡараңғылыҡ төшөнсәһен аңлатып була...» // «Башҡортостан» гәзите. – 2012.– 22 март.


© *Сырлыбаева Ф.Ф., 2021*

УДК 372.878

*Сәхәүетдинов А.Ш.,*
*Полилингваль күп профилле*
*44-се мәктәп уҡытыусыһы,*
*Ғилми етәксеһе: Нәбиуллина Г.М., филол.ф.к., доцент,*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ Өфө ҡ.*

# ДИСТАНЦИОН БЕЛЕМ АЛЫУ ШАРТТАРЫНДА ҺӘМ БИЛИНГВАЛЬ ФОРМАТТА МУЗЫКА ДӘРЕСЕ

Музыка дәресе – балаларҙың иң көтөп алған дәрестәренең береһе. Сөнки музыка дәресендә балалар ял итә, музыка тыңлап, йырҙар йырлап, башҡа, ҡатмарлы дисциплиналар алдынан хәл йыя. Тик уҡыусылар был дәрестә ял итеүҙән тыш, белем дә алалар. Полилингваль мәктәптәрҙә музыка ике телдә алып барылып, күп балалар был дәресте ике телдә өйрәнәләр.

Дәрес, иң беренсенән, төп дәүләт телендә, рус телендә, алып барыла. Балалар алдында рус телендә һорауҙар ҡуйыла, тема рус телендә аңлатыла. Ә икенсе тел иһә, ярҙамсы булып тора. Ярҙамсы ғына түгел, уҡыусылар теманы ике телдә өйрәнеп, үҙҙәре өсөн яңы тел асалар, уны аңлай башлайҙар.

Музыка дәресенең программаһында региональ компонент ҙур урын алып тора: башҡорт композиторҙары, уларҙың музыкаль әҫәрҙәре, башҡорт халыҡ йырҙары уҡыусылар менән башланғыс синыфтарҙан бергә килә. Уларҙың һәммәһен дә балаларға оригинал, башҡорт телендә, белеү әһәмиәтле. Йәғни, башҡорт халыҡ йырҙарының төрҙәрен, композиторҙарҙың әҫәрҙәренең исемен русса ғына түгел, башҡортса ла белеү кәрәк.

Дәрестә башҡорт телендә йырҙар өйрәнеү – балалар өсөн тағы бер тел өйрәнеү төрө. Башҡорт теле уҡытыусыһы менән бергә, музыка уҡытыусыһы шулай итеп, балаларға башҡорт телендә йырларға, телде аңларға һәм аралашырға ярҙам итә.

Шулай итеп, билингваль форматта белем биреүҙең күп ыңғай яҡтары бар. Башҡорт халҡы мәҙәниәтен, уның тарихын балалар саф башҡорт телендә белә, халыҡ, заманса йырҙарҙың йөкмәткеһен тәржемәһеҙ ҙә аңлай башлайҙар. Бынан тыш, уҡыусылар башҡорт телен белгән синыфташтары менән дә русса ғына түгел, башҡортса ла һөйләшеп, дөйөм тел таба.

Уҡыусылар уҡытыусы менән күҙмә-күҙ күрешеп уҡыуҙан тыш, дистанцион форматта ла бәйләнешеп белем алалар. Дистанцион белем алыу – уҡытыусының һәм уҡыусыларҙың төрлө уҡыу-уҡытыу платформалары һәм порталдары аша бәйләнеше. Был төр белем алыуҙың тарихына күҙ һалһаҡ, күрәбеҙ: үткән быуаттарҙа Европала үҙенсәлекле «корреспонденция ярҙамында белем алыу» булған. Уҡытыусылар уҡыусыларына уҡыу материалдары, ә уҡыусылар – яуаптарын почта аша ебәреп торор булғандар.

Радио һәм телевидение барлыҡҡа килеү менән, дистанцион белем алыу формаһы күпкә алға китә. Төрлө белем биреү өсөн радио- һәм телетапшырыуҙар үҙ эшен эшләй башлай. Ҡыҙғаныҫҡа, бының үҙ етешһеҙлеге – белем алыусыларҙан кире бәйләнеш юҡ. Хәҙер инде был һорау ҙа үҙенә яуап тапты. Интернет, компьютер дәүере башланды, белем алыу күпкә еңеләйҙе.

Бөгөнгө көндә дөйөм белем биреү мәктәбендә мәктәпкә йөрөп уҡыу актуаль, уҡыусы һәм уҡытыусы бер-береһен яҡындан күрәләр, бер-береһе менән бәйләнеш тотоуы еңелерәк. Дистанцион белем алыу ҙа ғәҙәти белем алыуҙан ҡалышмай, бергә бара. Музыканан дистанцион белем алыуҙың яҡшы яҡтары бар, мәҫәлән, музыкаль материалды тулыһынса үҙ аллы тыңлау, бирелгән композиторҙарҙың дәрестә тыңлап өлгөрмәгән башҡа әҫәрҙәрен үҙ аллы тыңлау. Белем алыуҙа компьютер технологияларын киң ҡулланыу – компьютер, Интернет селтәре ҡул аҫтында булғанда, дәрес ваҡытында кәрәкле, уҡытыусы тәҡдим иткән сайттарҙы барлау, балаларҙың үҙ аллы эштәргә, үҙ аллы белем арттырыуға ваҡыттары артты.

Уҡыусы, компьютер менән булғанда, үҙенең фекерләү процесын үҫтерә, Интернеттан килгән бар мәғлүмәтте кәрәклеһен кәрәкһеҙҙән айырырға өйрәнә. Шуныһы ҡыҙғаныс, дистанцион белем алыу балалар өсөн һәр ваҡытта ғына файҙа килтермәй. Сәғәттәр буйы компьютер артында дәрестә ултырыу, һуңынан, өйгә бирелгән эштәрҙе уҡытыусыға ебәреү – тәнәфес һәм дәрес ваҡытында үткәрелгән физкультминуттар булыуға ҡарамаҫтан, күҙ, арҡа ауыртыуына сәбәп була.

Музыка дәресен дистанцион формала үткәреүҙе практик дәрестәрҙең юҡлығы ауырлаштыра, мәҫәлән, балалар менән йырлау, ритмик-бейеү хәрәкәттәре һ.б. юҡ. Ата-әсәләр яғынан, балалар, ҡайһы саҡта, уҡытыусылар яғынан компьютер технологияларын белмәү, тағы ла бер ауырлыҡ тыуҙыра. Әгәр уҡыусы ваҡытында онлайн

дәрескә инмәһә, ниндәй ҙә булһа кәрәкле мәғлүмәтте белмәй ҡалыуы мөмкин. Дистанцион белем биреү формаһының тағы бер ҡыйын яғы – һөйләшеп аралашыу һәләте өҫтөндә, төркөмдәргә бүленеп эшләмәү.

Шулай итеп, ниндәй генә яҡшы яҡтары, насар яҡтары булмаһын, күп кенә балалар ҙа, уларҙың ата-әсәләре, ҡайһы бер уҡытыусылар ҙа мәктәпкә йөрөп уҡыу яғын яҡшы күрәләр. Сөнки мәктәптә үҙенең йәштәштәре араһында бала кеше үҙ аллы булырға өйрәнә, аралашып, коммуникабель яҡтан үҫә. Мәктәптә музыка дәресендә балалар иғтибар менән музыкаль әҫәрҙәрҙе тыңлай, һәр бер киҫәгенә уҡытыусынан кәрәкле аңлатма ала. Дәрестән һуң, тәнәфес ваҡытында ла, бар дәрестәре бөткәс тә, уҡыусы уҡытыусы менән күҙмә-күҙ һөйләшеп, кәрәкле мәғлүмәттәр менән бүлешә ала.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Абдуллин Э.Б., Николаева Е.В. Современные теоретические представления об уроке музыки // Вестник кафедры ЮНЕСКО «Музыкальное искусство и образование». – 2013. – № 1. – С. 155–165.
2. Кабалевский Д.Б. Основные принципы и методы программы по музыке для общеобразовательной школы / Программы общеобразовательных учреждений «Музыка» 1–8 классы / Под руководством Д.Б. Кабалевского, 3-е издание. – М.: Просвещение, 2006. – С. 5–18.
3. Концепция преподавания предметной области «Искусство» в образовательных организациях Российской Федерации, реализующих основные общеобразовательные программы [Электронный ресурс]. – Режим доступа: https://docs.edu.gov.ru/document/11cfc73e7df5f99beeadf58f363bf98b (Дата обращения: 15.09.2020 г.).
4. Федеральный государственный образовательный стандарт основного общего образования: [Электронный ресурс]. – Режим доступа: https://fgos.ru/ (Дата обращения: 15.09.2020).


*©Сәхәүетдинов А.Ш., Нәбиуллина Г.М. 2021*

УДК 821.512.141.09

*Шарафитдинова Л.И., магистрант 1 курса*
*Научный руководитель: Набиуллина Г.М., к.филол.н., доцент*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г. Уфы*

# МОНГОЛЬСКИЕ ЗАИМСТВОВАНИЯ В БАШКИРСКОМ ЯЗЫКЕ

Межъязыковые связи играют немаловажную роль в развитии языков, и поэтому при проведении исследований формирования его лексического состава необходимо иметь в виду возможное влияние на него и других языков.

В башкирском языкознании до сегодняшнего дня остается актуальным системное изучение лексики с точки зрения ее происхождения. Особенно заимствование иноязычных слов представляет интерес для лингвистов.

Слова, общие для тюркских языков, впервые были изучены профессором Дж.Г. Киекбаевым. Ученый рассмотрел общую лексику для башкирского, монгольского и тунгусо-маньчжурского языков, большое внимание уделил различению арабских и персидских заимствований. Его труды посвящены сравнительному изучению некоторых частей речи, главным образом, местоимений и имен числительных.

Большого внимания заслуживают научные труды Э.Ф. Ишбердина. Он изучил историческое развитие лексики башкирского языка, указал на большое количество лексем, имеющих соответствия в монгольских и тунгусо-маньчжурских языках.

В своей монографии «Историческое развитие лексики башкирского языка» Э.Ф. Ишбердин пишет: «Предварительное сравнение общих для тюркских и монгольских языков лексических единиц показывает, что из тюркских языков башкирский, татарский, казахский, киргизский, каракалпакский и в своеобразной форме чувашский стоят обособленно по степени усвоения монгольских слов. Кроме общих для всех тюркских языков монголизмов, в указанных языках имеются явные заимствования, видимо, более поздние, из монгольского и калмыкского языков. Это могло быть результатом влияния монгольского языка в период монголо-татарского нашествия в XIII–XIV вв» [3, т. 1: 33].

Исследователями отмечается взаимодействие и взаимовлияние тюркских и монгольских народов, которые проявляются как в многочисленных языковых заимствованиях, а также в некоторой общности этнической культуры. В этих рассматриваемых языках имеется значительный пласт лексики, относящийся к общетюркско-монгольскому фонду.

Много общих слов, которые обозначают местность или общность. Например, слово «Урҙа» (орда) имеет монгольские корни и считается, что заимствовано из монгольского слова «ordu». В «Словаре башкирского языка» дается такое определение: «Урҙа - 1. Место стоянки хана со своим войском». 2. Государство под управлением одного хана» [2, т. 2: 478].

Слово «Олоç» из монгольского «ulus»: «Определенное место жительства тюрко-монгольских народов [4: 41].

«Аймак» – у монгольских племен: поколение, племя, община однородцев, под одним родоначальником. В башкирском языке это слово является синонимом слова «волость».

«Аглаг» – «аулаҡ» – безлюдное или уединенное место, необитаемая местность.

В двух языках имеются общие названия явлений природы: «хер» (м)– «көрт» (б) – (сугроб), «жил» (м) – «йыл» (б) – (год), «жалга» (м)

| монг. | башк. | татарск. | казахск. | русск. |
|---|---|---|---|---|
| айл (группа юрт) | ауыл | авыл | ауыл (аул) | деревня |
| алтан | алтын | алтын | алтын | золото |
| балт | балта | балта | балта | топор |
| жимс | емеш | жимеш | жемизс | фрукт |
| харцгай | ҡарсығa | карчыга | каршыга | ястреб |
| хара | ҡара | кара | кара | черный |
| мал | мал | мал | мал | скот |
| burgud | бөркөт | бөркет | буркут | беркут, орел |

– «йылға» (б) – (река) и т.д.

Названия частей тела человека и животных: «ар(а)» – «арҡа» (спина, зад); «бейер» (м) – бөйөр (б) – (почка ); «манлай» (м) – «маңлай» (б) – «лоб»; «танау» (м) – «танау» (б) – (нос).

Многие слова являются одинаковыми для многих тюркских языков. Например:

«Даха» (доха) – шуба, надеваемая шерстью вверх или наружу в башкирском языке употребляется в том же значении [3: 267]. Она бывает жеребячья или оленья, собачья, овчинная.

«Мергень» – смелый охотник, хороший стрелок из монгольского «mergen», в калм. «mergn» – мастер, ловкий, охотник. Это слово «мәргән» в башкирском языке употребляется в значении меткого стрелка.

«Һаҡалтай» (б) – бородатый, бородач, а в монгольском языке: «сахалтай».

При адаптации многих заимствований произошли некоторые изменения звуков, определяемые особенностями фонологической системы башкирского языка, так как заимствование проникало в древности устным путем.

Лингвистический анализ заимствованных слов позволяет сделать вывод о том, что монгольские заимствования в современном башкирском языке являются фонетически, семантически и грамматически усвоенными языковыми единицами, их порой трудно даже отличить. Таким образом, можно сделать вывод, что монгольское иго оставило свой след не только в нашей истории, но и в языке.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Башҡорт теленең һүҙлеге. Т. 1. – М.: Русский язык, 1993.
2. Башҡорт теленең һүҙлеге. Т. 2. – М.: Русский язык, 1993. – 478 с.
3. Ишбердин Э.Ф. Историческое развитие лексики башкирского языка. – М.: Наука, 1986 – 267 с.
4. Киекбаев Дж.Г. Лексика и фразеология современного башкирского языка. – Уфа, 1966. – 41 с.

© *Шарафитдинова Л.И., 2021*

**УДК 821.512.141**

*Шәрәфетдинова М.Н., 4-се курс студенты*
*Ғилми етәксеһе: Хөснуллина Р Д., к.филол.н., доцент*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

# МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ «ДЕКАБРЬ ЙЫРЫ» ҺӘМ «ҮЛМӘҪБАЙ» ПОЭМАЛАРЫНДА ГЕРОИК ТРАДИЦИЯЛАРҘЫҢ САҒЫЛЫШЫ

Башҡорт әҙәбиәтендә героик традициялар рухында яҙылған әҫәрҙәр бихисап. Был темаға мөрөжәғәт иткән авторҙар күберәк Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғаларын, һалдаттарҙың ҡаһарманлығын сағылдыра. Ошо йәһәттән Башҡортостаныбыҙҙың халыҡ шағиры, бөйөк әҙибебеҙ Мостай Кәримдең шиғриәте айырым иғтибарға лайыҡ. 1935–1936 йылдарҙа әҙәбиәткә килгән йәш шағирҙың поэзияһы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында яңы һынланыш ала. Уның һәләте, поэтик тауышы асыҡлана, ул үҙе гражданин һәм шағир булараҡ сынығып етә.

Мостай Кәрим Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән армия сафына алына һәм һуғыштың еңеү менән тамамланыуына тиклем фронтта була. Ул ҡыҫҡа сроклы хәрби курстарҙа уҡығас, башта элемтә бүлеге һәм артиллерия дивизионы штабы начальнигы булып хеҙмәт итә. Илебеҙҙең ут эсендә үткән дүрт йылы Мостай Кәримдең тормошона һәм ижади эшмәкәрлегенә ныҡлы йоғонто яһап, тәрән эҙ ҡалдыра.

Һуғыштың баштарынан алып аҙаҡтарына саҡлы тиерлек фронттар кискән, яу юлдарын үткән яугир шағир, хәрби журналист күпте күрҙе, күпте кисерҙе, шулар күңел моңо булып шиғыр юлдарына күсте. Ул һалдат кешенең уй-тойғоларын тәрәнерәк аңлап һүрәтләй башланы.

Мостай Кәримдең яу йылдарындағы ижадында поэмалар үҙе бер айырым урын биләй. Уларҙың ҡиммәте һәм үҙенсәлеге поэзияның айырым һыҙаттарын артабан тәрәнәйтеүҙә, бигерәк тә яу героикаһын әкиәттәргә тиң батырлыҡ, юғары романтика сифаттары менән һуғарыуҙа, совет һалдатының эпик образын оҫта кәүҙәләндереүҙә. Шул уҡ ваҡытта «Декабрь йыры һәм Үлмәҫбай» поэмалары шағирҙың һуғышҡа тиклемге поэзияһында асыҡ беленгән эпик башланғысты киңәйтә һәм тәрәнәйтә төшөүҙәре яғынан да әһәмиәтле.

«Декабрь йыры» поэмаһының «Йырҙың башы» бүлегендә совет халҡын ер ҡыртышлап, ғәрәсәт сәсеп килеүсе аждаһа-фашизм менән алышыусы, ике диңгеҙ ярына баҫҡан ҡаһарман рәүешендә һынландыра. Шулай киң һуғыш паонорамаһында ирәбә һынды төҫмөрләгәндән һуң – ике бүлектә конкрет бер күренеште, ике диңгеҙ араһындағы һанһыҙ окоптарҙың береһен һәм реаль совет һалдатын һүрәтләүгә күсә.

Оборона һыҙығы – конкрет окоп шулай уҡ тәрән мәғәнәле:

Был – окоп түгел, крепость,
Был – минең Ватан,
Был – минең быуын яҙмышы,
Намыҫ, ирек, дан!..
Был – окоп еңеү усағы –
Мәскәү һәм Урал!

Ҡаһарман халыҡтың бер вәкиле итеп бирелгән һалдат образы шундай уҡ принципта дөйөмләштерелгән: ул Тимербаев Юлдаш исемле һалдат, конкрет бер шәхес кенә түгел, уның йөҙөндә яңы быуындың дөйөм һыны сағыла.

Еңергә тыуҙым. Һәм шулай
Үҫтерҙе илем.
Юлдашҡа юлдаш булалмаҫ
Данлыҡһыҙ үлем.

Төп герой Юлдаш исеменән әйтелгән был һүҙҙәр поэманың бөтә идея айышын асып һала.

Шағир йәш геройҙың ауанлығын, көс-ҡеүәтен ҡылыҡһырлау өсөн йыш ҡына экиәт алымдарына мөрәжәғәт итә, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәт, ыҙан-йола юрамдарын оҫта файҙалана; ун етенсе йәшлек яҙы, оло юл, салт аяҙ йәйге таң күренештәрен геройҙың күңел сафлығын һәм уйҙары яҡтылығын поэтиклаштырыуға хеҙмәт иттерә.

Мостай Кәримдең «Үлмәҫбай» поэмаһы ла героик традицияларҙы сағылдырған һәм йәш быуынға патриотик тәрбиә биргән әһәмиәтле әҫәрҙәр рәтенә ҡарай.

«Үлмәҫбай» поэмаһы тотошлай ярым экиәт формаһында. Поэманың уйын ҡатыш етди йөкмәткеһе, экиәткә тартым жанр үҙенсәлеге йор һүҙле геройы менән генә түгел, әҫәрҙең бөтә оптимистик рухы һәм хәтәр яу яланында һалдат күңеленә ял булырлыҡ, рәхәтләнеп бер көлөп зауыҡланырлыҡ эстетик яҡтары менән дә бәйле. Шуныһы ла бар, ут-ҡан эсендә тыуған һуғыш

фольклорына ҡан-күҙ йәше урынына күңелде күтәрә торған шаян йырҙар, таҡмаҡтар, таҡмазалар, фронт көләмәстәре, хикәйәттәр кеүек юмористик-сатирик жанрҙар хас.

Юморлы хикәйәт ғәҙәттә оҙон булмай. Привал ваҡытында йәки туп тауыштары тынып торған араларҙа һөйләп сыҡмалы ғына ул. Шуның шикелле Мостай Кәримдең «Үлмәҫбай» поэмаһында ирмәк хикәйәттәре лә артыҡ оҙон түгел: бер тында уҡып сыҡмалы.

Жанры, композицион-сюжет ҡоролошо яғынан бик үҙенсәлекле был поэма Үлмәҫбай образы менән күркәм. Батырлыҡ һәм ҡыйыулыҡ, ябайлыҡ һәм сабырлыҡ, көр күңеллелек һәм таҫыллыҡ – Үлмәҫбай образында сағылған күркәм рухи, әхләҡи сифаттарҙың характерлылары. Иң мөһиме: фольклорҙағыса ҡурҡыуҙы белмәгән бер батыр итеп һүрәтләп, автор традицион поэтик алымдар ярҙамында Үлмәҫбайға ысын мәғәнәһендә халыҡсан образ ҡиәфәтен биргән.

Поэманың тормошсан, ябай һәм тәрән мәғәнәле йөкмәткеһе, халыҡсан образдары тел-стиль сараларының һәм шиғри формаларының шулай уҡ халыҡсан ябай һәм мәғәнәле булыуҙарын билдәләгән. Әҫәрҙең поэтик стиле бик тәбиғи ағыштағы ябай әңгәм стиленә тартым. Үлмәҫбайҙың «ирмәк» итеп һөйләгән һәр һүҙе ҡыҙыҡлы бер хикәйәт.

Ярым әкиәткә тартым, уйынлы-ысынлы килеп сыҡҡан «Үлмәҫбай» поэмаһы төп геройҙарҙың холоҡ-фиғеле, һәр хәрәкәте, ҡылған эштәре аша үҙ Ватанына, тыуған иленә тоғро хеҙмәт иткән һалдаттар образын асып бирә.

Поэманың башында, йәғни экспозицияһында, автор беҙҙе төп герой – Үлмәҫбай менән таныштыра, уның килеп сығышы тураһында бәйән итә:

Урал батыр тоҡомонан
Үлмәҫбай атлы егет,
Совет Ватанында үҫкән
Большевик затлы егет [2: 371].

Артабан әҫәрҙә Үлмәҫбайҙың үҙенең ата-бабалары тураһында һөйләгән өлөшө лә бар:

Һунарсы минең ырыуым,
Һунарсы ата-бабам,
Һунарсы ҡаны үҙемдә,
Һунарсы булыр балам [2: 371].

Ата-бабалар һәм балалар сылбыры бәйләнеше героик традицияларҙың үткәнен һәм бөгөнгөһөн сағылдыра.

«Үлмәҫбай»ҙың беренсе өлөшөндә төп герой үҙенең нисек дошман артынан «һунар»ға барыуы хаҡында һөйләй һәм немец офицеры менән күҙгә-күҙ осрашҡас, үҙенең юғалып ҡалмай, ошолай таныштырыуын әйтә:

Үлмәҫбай атлы булам,
Тау башҡорто тоҡомонан,
Салауат затлы булам [2: 372].

Үлмәҫбайҙың был һүҙҙәре героик рухта яңғырай, уның батырҙар нәҫеленән булыуын дәлилләй. Артабан ул офицерға үҙенең тыуған иле хаҡында ла һүҙ әйтә:

Ә илем Рәсәй була,
Дауылы, еле лә бар.
Һинең бабаң батып үлгән
Чуд тигән күле лә бар [2: 373].

Хатта юмор менән дошмандың үткәненә «төрттөрөп», үҙенең ата-бабаларының героик рухлы икәненә ишара яһай.

Шулай уҡ поэманың тәүге өлөшөндә башҡорт халҡының ҡунаҡсыллығы тураһында ла әйтелә:

Вот шулай. Хәҙер үҙеңде
Ҡунаҡҡа алып китәм,
Аҙаҡтан маҡтап йөрөрһөң:
«Башҡорт ҡунаҡсыл икән... » [2: 374].

«Үлмәҫбай»ҙың тәүге өлөшөн тамамлағанда, автор төп герой хаҡындағы фекерҙе – уның батыр холоҡло булыуына баҫым яһай.

Әҫәрҙең икенсе өлөшөндә Үлмәҫбайға һөйгән ҡыҙы Гөлбикә алыҫ Уралынан хат яҙа:

Буш теҙгенде һиҙеп, буғай,
Башҡайын сайҡай атым,
Уҡып барам Гөлбикәнең
Уралдан яҙған хатын:
«Иҫ киткес батырлығыңа
Һоҡлана Урал иле,
Тик бына шул хаттарыңды
Йышыраҡ яҙһаң ине... » [2: 375].

Икенсе өлөштөң аҙағында башҡорт туйы күҙ алдына баҫа:

Ил йолаһын, – ти Теребай, –

Тыу итеп күтәрәйек.
Башҡорттарҙың туй ғәҙәтен
Немецҡа күрһәтәйек! [2: 377].
Табындарын күтәргәнгә
Маҡтап һөйләрҙәр әле:
«Ай-һай-һай, бик ирмәк икән
Башҡортта туй әмәле!» [2: 380].

Үлмәçбайҙың дуçы – Теребай ҙа төп геройҙың үҙе кеүек үк батыр һалдат образы миçалы. Был ике дуç бергә ут-һыуҙы кискән, уларҙың ирмәктәре аша Мостай Кәрим үҙенең әçәрендә героик традицияларҙың үҙенсәлектәрен сағылдыра.

Ә поэманың өсөнсө өлөшөндә автор һалдаттарҙың Тыуған илдәрен һағыныуы хаҡында һөйләй:

Мыйыҡтарҙы еткерәбеҙ
Һыйпаштырғылап, тарап,
Һағынабыҙ ер-һыуҙарҙы,
Осҡан ҡоштарға ҡарап [2: 381].

Әçәрҙең аҙағында Мостай Кәрим бында һүҙ башҡорт егеттәре хаҡында булыуын дәлилләп ҡуя:

Шунан һуң был тирәләрҙә,
Әллә ысын, әллә юрый,
Башҡорттар ен тотҡан, тигән
Имеш-мимештәр йөрөй [2: 381].

Дөйөм алғанда, «Үлмәçбай» поэмаһы башҡорт әҙәбиәтендә героик традицияларҙы асып биргән әçәрҙәр рәтенә ҡарай. Унда башҡорт халҡының аçыл улдары – Үлмәçбай һәм уның дуçы Теребай хаҡында һүҙ бара, уларҙың батырлыҡтары геройлыҡ өлгөһө булып тора. Әçәрҙең барышында был ике батырҙың Тыуған илде дошмандан һаҡлау, яҡлау эшендә ҡыйыу, ғәйрәтле, ҡурҡыу белмәç булыуҙары героик традицияларҙың төп һыҙатын асып бирә лә инде.

Мостай Кәрим үҙе лә фронт һалдаты булғанға күрә, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда барған ваҡиғаларҙы тулыһынса күҙ алдына баçтырып, яҙыусы фантазияһын да ҡушып, халҡыбыҙға дәһшәтле йылдарҙың мираçы булырҙай үлемһеҙ әçәрҙәр ижад итеп ҡалдырҙы. Яу йылдары уның шиғриәтен тормошҡа нығыраҡ яҡынайтты, фронтовиктарҙың батырлығын, күңел донъяһын күреп, белеп йырлауға алып килде. Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы

лирикаһының йылдар аша яңғырар героик һәм гуманистик рухы ваҡыт үткән һайын тағы ла ҡеүәтлерәк төҫ ала.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Бағышаева З.У. Мостай Кәримдең тормош һәм ижад юлында Бөйөк Ватан һуғышы // Проблемы востоковедения. – 2015. – №4 (70). – С. 83-88-се биттәр.
2. Кәрим М.С. Әҫәрҙәр. 1-се том. – Өфө: З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте, 2009. – 512 бит.
3. Хөсәйенов Ғ.Б. Халыҡ шағиры Мостай Кәрим. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1965. – 200 бит.



© *Шарафутдинова М.Н., Хөснуллина Р.Д., 2021*



**УДК 821.512.141.09**



*Шәһиҙуллина М.М., студент*
*Ғилми етәксеһе: Ғәлина Ғ.Ғ., филол.ф.к., доцент*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*


## МӘРЙӘМ БУРАҠАЕВАНЫҢ «АРҒЫМАҠ» ӘҪӘРЕНДӘ ЭТНОПЕДАГОГИКА

Беҙ «Арғымаҡ»тағы тәрән фәһемде, халҡыбыҙҙың быуаттар буйына йыйған аҡылын әҙәбиәт дәрестәрендә ҡуллана белергә, уның ярҙамында бала шәхесен тәрбиәләй алырға тейешбеҙ. Күптән түгел сыҡҡан фәлсәфәүи-публицистик әҫәрҙең әһәмиәте бик ҙур, уны әҙәбиәт дәрестәрендә уҡытыу үтә актуаль мәсьәлә. Хеҙмәтебеҙҙә ошоно иҫәпкә алып, төп проблема итеп Мәрйәм Бураҡаеваның «Арғымаҡ» әҫәрен этнопедагогик тәрбиә биреүҙә ҡулланыуҙы алдыҡ.

Этнопедагогика – халыҡтың тәрбиәүи ҡануниәтен, балаларҙы оло тормошҡа әҙерләүгә ҡарата булған ҡараштарын, традицияларын өйрәнеүсе фән. Халыҡтың тәрбиәүи системаһын өйрәнмәйенсә киләсәк быуынды тәрбиәләү мөмкин түгел.

Башҡорттарҙың этнопедагогик ҡараштары халыҡ ауыҙ-тел ижадында, әҙәбиәтендә, боронғо һәм урта быуаттарҙағы әҙәби-тарихи йөкмәткеле яҙмаларҙа, бөгөнгө нәфис әҙәбиәттә сағылыш тапҡан.

Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә беҙ йыш ҡына халыҡ педагогикаһына ҡағылышлы мәғлүмәттәр менән осрашабыҙ. Тимәк, уҡытыусы өсөн был предметтарҙы халыҡ педагогикаһы менән бәйләп алып барыу мөмкинлеге тыуа.

Этнопедагогика – «Арғымаҡ» әҫәрендәге тәрбиәүи ҡараштарҙың төп нигеҙен тәшкил итә. Автор халыҡтың быуаттар буйына килгән традицияларына, ҡанбабалар ҡалдырға оло хазиналарҙы еткереүҙе маҡсат итеп ҡуя. Ысынлап та, һәр бала үҙенең әсә телен өйрәнеү аша үҙ милләте рухиәтен аңларға һәм уға төшөнөргә тейеш. Балаға халыҡтың быуаттар буйына йыйған аң-зиһенен өйрәтмәй тороп уны үҙ милләтен һөйөүсе шәхес итеп үҫтереү ауыр. Сөнки халыҡ ижады жанрҙарында башҡорт халҡының әхлаҡи-рухи ҡиммәттәре, уй-хыялдары, донъяға ҡарашы һәм тарихы тупланған [2: 39]. Әгәр ҙә уларҙы әҙәбиәт дәрестәрендә файҙаланмайбыҙ икән, беҙ быуаттар буйына барған быуын-ара күсәгилешлекте, ата-бабабалар менән рухи бәйләнеште инҡар итәбеҙ тигән һүҙ.

Мәрйәм Бураҡаева «Арғымаҡ» китабында яҙыуынса, балаларға әхлаҡи тәрбиә биреү бөгөнгө көндә көнүҙәк мәсьәләгә әйләнергә тейеш. Бала рухи яҡтан ныҡ, сәләмәт булырға тейеш. Рухһыҙ бала халҡын көсһөҙләндерә. Ундай бала иҫәпкә бар, һанға юҡ хәлендә ҡала.

Мәрйәм Бураҡаева иң беренсе туған телебеҙҙең әһәмиәтен билдәләй. Әхлаҡи тәрбиә биреүҙә халыҡ теленең әһәмиәтен һыҙыҡ өҫтөнә алып китеү кәрәк. Сөнки һәр халыҡ теле өлгөһө халҡыбыҙҙың рухи булмышын тергеҙеү һәм үҫтереү сығанағына әйләнде.

Бөгөнгө заман балаһының күңелендәге әҙәп, әхлаҡ сифаттарын ҡыҫырыҡлап сығарырға тырыша, уны бәғерһеҙлеккә өйрәтә. Баланың рухи сәләмәтлеге тураһында хәстәрлек биләүҙән башлана. Мәктәптә уның рухи һаулығы нығытыла, сыныҡтырыла. Халыҡтың әхлаҡи мәҙәниәтенең эстәлеген аңлатыу аша баланың рухи донъяһына мөрәжәғәт итергә мөмкин. Әммә, бөтәбеҙҙә белеүебеҙсә, иң беренсе сиратта әхлаҡи тәрбиә ғаиләлә һалына. Балалар ата-әсәләренән өлгө ала. Улар ата-әсәнең ҡарашын, фекерләүен һәм рухи ҡиммәттәрен үҙләштерә, бөтә аҙымын ҡабатлай. Балам эшемде күрмәй, һөйләгәнемде ишетмәй, тип уйлау – үҙ-үҙеңде алдау ғына ул. Шулай итеп, балаға ата-әсәнең төп бүләге – өлгөлө холоҡ.

Үҙенең китабында М. Бураҡаева традицион ғаилә, ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәт тураһында күп һүҙ алып бара. Был шулай уҡ этнопедагогика менән бәйле. М. Бураҡаева ундан артыҡ

ғаиләләр миҫалында ғаиләләге булған мөнәсәбәттәрҙе сағылдыра: ир-ҡатын, ҡәйнә-килен, әсә-бала, балалар тәрбиәүе мәсьәләһе.

Этнограф Р.Р. Баязитова үҙенең «Традиционный семейный этикет башкир» хеҙмәтендә йәш быуынға этник мәғлүмәт тапшырыу сығанаҡтарарының береһе ғаилә булып тора, ти [3: 15].

Шулай уҡ, Руденко «Башҡорттар» хеҙмәтендә XIX быуаттарҙа, ғөмүмән, мәңге йәшәп килгән традициялар хаҡында һүҙ алып бара [6: 225-226]. XX быуатта ла шул тәртиптәр һаҡланып ҡалған, үкенескә ҡаршы хәҙер ул юғала бара: балалар ата-әсәләрен ҡарттар йортона илтеп бирә; йәш ирһеҙ, әммә балалы ҡатындар һаны арта; ғаиләлә бер-береһенә хыянат итеү нормаға тиңләшә, шуның арҡаһында айырылыуҙар көндән-көн күбәйә; көнбайыш, Европа артынан ҡыуалап һуң тормошҡа сығалар, иһә тәүҙә карьера, аҡса, байлыҡ һ.б.

Мәҫәлән, «Арғымаҡ»тың «Рух» бүлегендә Рәмзиә менән Закир ғаиләһе тарҡалыуын күрәбеҙ. Кандидат вазифаһын йөрөткән ҡатын юғары белемһеҙ ирен кәмһетеп, үҙен юғарыраҡ икәнлеген гел иҫенә төшөрөп торғас, ире ғаиләһен ташлап, икенсе ҡатынға өйләнә. Был осраҡта ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәт дөрөҫ ҡоролмай, сөнки бер-беренде кәмһетеп, йәберләп, донъя көтөп булмай. Икенсе миҫал – «Аҡыл» бүлегендә ҡәйнә-килен мөнәсәбәте бик яҡты һүрәтләнгән. Ҡәйнә киленде көн һайын йәберләп, эшләгән эшенән риза булмай, улын шундай ҡатынға өйләнгәнгә һүҙ әйтә торғас, улы үҙенә ҡул һала. Килен-ҡәйнә мөнәсәбәте, ғәҙәттә, ғаиләләрҙәге «һауа торошон» көйләй йә боҙа. Күҙәтеүҙәр буйынса, башҡорт ғаиләләрендә ҡәйнә-кейәү проблемалары артыҡ юҡ, әммә ҡәйнә-килендеке йыш күҙәтелә. Әлбиттә, төрлө хәлдәр була, әммә яҡын кешеләре өсөн көрәштең сәбәбе йыш ҡына ҡәйнәнең һәм килендең бер-береһен аңламауынан килә.

Мәрйәм Бураҡаеваның «Арғымаҡ» әҫәре буйынса этнопедагогик тәрбиә эше башҡорт балаларына әҙәбиәт дәресендә быуындан-быуынға күсә килгән ғаилә араһындағы мөнәсәбәт тураһында тәрән мәғлүмәт бирә.

Шулай итеп, М. Бураҡаеваның «Арғымаҡ» китабы – үҙенсәлекле рухи тәбиғәтле, балаларҙы әхлаҡи яҡтан таҙа, дөрөҫ әҙәпле итеп тәрбиәләүҙең мөһим бер сығанағы. Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә был әҫәр уҡыусыларҙы этномәҙәни, этнопедагогик йәһәттән тәрбиәләргә мөмкинлек бирә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Амиров А. На стремнине. – Уфа: Китап, 1978. – 254 с.
2. Баймурзина В.И. Этнопедагогика башкирского народа: история и современность. – Уфа; Стерлитамак: Изд-во БашГУ и СГПА, 2008. – 156 с.
3. Баязитова Р.Р. ТРАДИЦИОННЫЙ СЕМЕЙНЫЙ ЭТИКЕТ БАШКИР. – Уфа: Изд-во БГПУ, 2010. – 176 с.
4. Бураҡаева М.С. Арғымаҡ: Күңел донъяһына сәйәхәт. – Магнитогорск, 2018. – 416 бит.
5. Күзбәков Ф.Т. Газета жанрҙары. – Өфө: БДУ, 1990. – 197 бит.
6. Руденко С.И. Башкиры: историко-этнографические очерки: с изменениями и дополнениями. – Уфа : Китап, 2018. – 373 с.
7. Сәлимов Н.Б. Башҡорт әҙәби теленең публицистик стиле. – Өфө: Китап. 2003. – 221 бит.



*© Шәһиҙуллина М.М., Ғәлина Ғ.Ғ., 2021*


**УДК 398.22**


*Әминева З.В., 5-се курс студенты*
*Ғилми етәксеһе: Ғәлина Ғ.Ғ., филол.ф.к., доцент*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*


## «УРАЛ БАТЫР» ЭПОСЫНДА ҠАТЫН-ҠЫҘ ОБРАЗЫ

Башҡорт халҡының бөтә донъяға билдәле ҡобайырҙарының береһе – «Урал батыр» эпосы. Бөйөк ҡомарткыбыҙ телдән яҙылып алыуына быйыл 111 йыл. Эпоста халҡыбыҙ йәшәйешенең ҡото һалынған тип әйтһәк, яңлышмаҫбыҙ. XX быуатта эпосҡа иғтибар бик арта һәм унының өйрәнелеүе бөгөнгө көнгә тиклем дауам итә.

М. Буранғоловтың «Эпос о батырах»: Галиндың «Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады», «Башкирский народный эпос», М.М. Сәғитовтың «Башкирское народное творчество. Эпос», «Урал батыр. Башкирский народный эпос», «Боронғо башҡорт ҡобайырҙары», «Мифологические и исторические основы башкирского народного эпоса», Ә.М. Сөләймәновтың «Башкирское народное творчество», Г.В. Юлдыбаеваның «Сюжет и стиль эпоса «Урал батыр», Н.Т. Зариповтың «Башҡорт халыҡ ижалы: Эпос / Төҙ., инеш мәҡәлә яҙыусы һәм аңлатмалар бир», А.С. Мирбадалеваның,

М.М. Сәғитовтың, А.И. Харисовтың «Эпосы народов СССР: Башкирский народный эпос» һәм башҡа ғалимдарҙың хеҙмәттәре быны иҫбат итә.

Бөгөнгө көндә ҡатын-ҡыҙ темаһы бик актуаль. Хәҙерге башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын мифологик эпостағы ҡатын-ҡыҙҙар менән нимә берләштерә? Уларҙың тормошта ролдәре оҡшашмы? Сағыштырыуҙың ыңғай һәм кире яҡтары нимәлә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап табыу, башҡорт мифологик эпосында ҡатын-ҡыҙҙарҙың характерын асыҡлау, уларҙың ролен һәм әһәмиәтен белер өсөн, «Урал батыр» эпосында ҡатын-ҡыҙ образы темаһына туҡталайыҡ.

Ҡобайыр 4506 юлдан тора. Шунлыҡтан, эпоста һүрәтләнгән образдар ҙа байтаҡ. Образдар араһында ҙур өлөштө ҡатын-ҡыҙ образы алып тора.

Эпостың башынан уҡ беҙ тәү ҡатын-ҡыҙ образы Йәнбикәне (Йән һәм ҡыҙ) осратабыҙ. Йәнбикә, Йәнбирҙенең ҡатыны, Урал менән Шүлгәндең әсәһе. Йәнбикә тураһында эпостың башында ғына һөйләнелә:

Унда булған, ти, борон
Йәнбирҙе тигән ҡарт менән,
Йәнбикә тигән бер ҡарсыҡ,
Ҡайҙа барһа, уларға
Ул урында юл асыҡ.
Был ҡарт менән был ҡарсыҡ
Ҡайҙан бында килеүен,
Ата-әсә, ер һыуын
Ҡайҙа тороп ҡалыуын
Үҙҙәре лә онотҡан, ти; [1: 3]

– тип һөйләнелә эпоста. Эпос менән танышҡанда, күҙгә ҡыҙыҡлы факт сағыла: Йәнбикәнең һүҙҙәре эпоста бөтөнләй юҡ. Ул күҙ алдына тыйнаҡ, мөләйем, Йәнбирҙегә һәр саҡ ярҙам итеүсе ҡатын-ҡыҙ булып баҫа.

Эпоста төп ҡатын-ҡыҙ образ, ул, минеңсә, Һомай образы. Йәнбирҙе менән Йәнбикә аулап алған ҡоштарҙың береһе – Һомай ҡош була. Ул яҡшылыҡ, сафлыҡ, матурлыҡ образын сағылдыра. Һомай үҙен:

Барығыҙға билдәле
Ҡояш тигән әсәм бар. <...>
Самрау тигән батшаның

Һомай тигән ҡыҙымын [1: 16–17]

– тип таныштыра. Һомай образы башҡа образдарҙан айырмалы рәүештә эпостың дауамында һүрәтләнә. Ул ябай ҡош түгел, ҡыҙға әйләнә алған үҙенсәлеге бар. Тимәк, Һомай ике образда баҫа: беренсеһе – ҡыҙ, икенсеһе – ҡош. Әйтергә кәрәк: Һомай бик һылыу, иҫ китмәле матурлыҡҡа эйә. Уның матурлығын тасуирлаған урын да бар эпоста:

Уның усма шәлкемдәй,
Енсегене ҡапларҙай,
Кәйтән менән биҙәлгән:
Сәс толомо һалынған;
Оҙон керпектәре үтә
Ҡара күҙе текәлгән;
Уйнап торған ҡыйғас ҡаш
Күҙ өҫтөндә йылмайған;
Тертәйешкән ҡалҡыу түш
Күҙ алдында тулҡынған [1: 59–60]

– тип һөйләнелә. Һомай Шүлгән менән Уралды һынап ҡарай. Шүлгән асыулы йөрөгәнгә, яуыздар менән бер яҡлы булғанға Һомай уны ер аҫтына төшөрә. Геройҙарҙың батырлыҡтарына ҡарап, Уралды кейәүгә һайлай. Шунлыҡтан, Һомай – яҡшылыҡҡа, изгелеккә һәм ғәҙеллеккә ынтылыусан ҡыҙ ролен башҡара. Һомай образы башҡа халыҡтарҙың эпостарында ла осрай. Ул күп кенә төрки-монгол, фин-уғыр, иран халыҡтары ижадында ла киң таралған һәм төрлө мәғәнә белдерә. Алтай, ҡырғыҙ, үзбәк халыҡтары ижадында ул «умай», «ымай» формаһында таралған һәм сәңгелдәктәге йәш баланы ҡурсалап, һаҡлап тороусы мифик образ сифатында һүрәтләнә. Фарсы телендә «һома» һүҙе осҡанда күләгәһе кемгә төшһә, шул кешегә бәхет килтереүсе мифик ҡош мәғәнәһен белдерә. Башҡорт халҡының «Аҡбуҙат» эпосында ла Һомай образы осрай. Был эпоста ул ҡош ролендә генә сағыла.

Һомайға ҡаршы булған ҡыҙ образы Уралға Ҡатил батша илендә осраған әбей. Уның хаҡта эпоста былай тип һөйләнелә:

Телгеләнгән арҡаһы,
Айырылған елкәһе;
Ҡул-аяғы ярылған;
Ауыҙ-бите ҡарайған;
Йөҙө-төҫө һарғайған;

Балтыр ите һулыған [1: 19]

Ҡатил батшаның язаларынан ҡаңғырып, ыҙалап, арып-талып бөткән әбей ул. Эпоста ул бер ерҙә генә осрауына ҡарамаҫтан, уның әйткән һүҙҙәре бик әһәмиәтле. Әбей эпоста түҙемле, сабыр, шул уҡ ваҡытта бик аҡыллы ҡатын-ҡыҙ.

Киләһе ҡатын-ҡыҙ образы – Ҡатил батшаның ҡыҙы. Артынан гел ҡолдар эйәргән, тәхеттә ултырған ҡыҙ ул. Атаһы уға «кейәү һайла үҙең» [1: 30] тигән һүҙен биргәндән һуң, ҡыҙ йыл һайын үҙенә кейәү һайлай. Майҙан башында ҡыҙ асыулы күренһә лә, минең уйлауымса, ул ыңғай образ. Атаһы уйлаған йолаларҙан ул баш тарта алмай, шуға күрә уларға буйһона. Ҡыҙҙың исеме лә эпоста аталмай, был факт, ҡыҙ үҙе шәхес булараҡ тормош ҡора алмай, ә атаһы ҡанундарына буйһоноп йәшәй икәнен аңлата. Әйтергә кәрәк, Ҡатил батша – яуызлыҡ батшаһы булһа ла, уның ҡыҙы яҡшы образдарҙың береһе. Атаһы Уралды үлтерергә уйлағанда, ҡыҙ Уралды йәлләп, атаһына ялбарыуы ла был хаҡта һөйләй. Уларҙың Яйыҡ улдары тыуыуы шулай уҡ бик мөһим факт.

Урал тағы Ҡәһҡәһә илендә лә өйләнә. Был ҡыҙ Ҡәһҡәһәлә ҡол булған Гөлөстан булып сыға. Уның атаһы – йыландарға ҡаршы яу тотҡан батыр. Эпоста Гөлөстан тураһында мәғлүмәт бирелмәй, иң мөһиме, Гөлөстан Уралға Нөгөш исемле батырҙы таба.

Шулай уҡ төп образдарҙың береһе Самрау батшаның ҡыҙы, Һомайҙың туғаны – Айһылыу. Айһылыуҙың апаһының кеүек ҡоштан ҡыҙға әйләнеү үҙенсәлеге бар. Айһылыуҙың әсәһе ай булғанға, ул аҡҡош түгел, ә бөтә донъя ҡош төҫөн үҙ нурына һуғарған төрлө төҫкә биҙәлгән ҡош. Айһылыу бик һылыу ҡыҙ. Уның турала эпоста түбәндәгесә һөйләнелә:

Эйәк-бите уйылған,<br>
Һул битенең уртаһы<br>
Күҙ ҡаралай миңләнгән;<br>
Оҙон сәсен матурлап,<br>
Өсмә яһап төшөргән;<br>
Оҙон керпектәре аша<br>
Ҡара күҙен йылмайтып;<br>
Бит уймаһын уйнатып,<br>
Көләс йөҙөн көлдөрөп [1: 66]

Айһылыуҙың яҙмышы аяныс, ул Шүлгәнгә алданып кейәүгә сыға. Бында беҙ яҡшылыҡ менән яманлыҡтың берләшеүен күрәбеҙ.

Әйтергә кәрәк, Айһылыу бик тыныс холоҡло, тыңлаусан һәм тыйнаҡ ҡыҙ.

Эпоста төрлө образдар алынған. Һомай – батша ҡыҙы, үҙ һүҙле, тырыш, ныҡышмал. Уға ҡаршы образ Гөлөстан – тыйнаҡ, оялсан, тыныс ҡыҙ. Йәки, Ҡатил батша илендә осраған әбей – ыҙалап бөткән, хафалы, хәле бөткән һәм уға ҡаршы Айһылыу образы – бик һылыу, йәш, ышаныусан ҡыҙ. Эпоста һүрәтләнгән ҡыҙҙарҙың характеры, хәҙерге башҡорт ҡыҙҙарына хас. Ҡыҙыҡлы факт, Йәнбикә һәм Йәнбирҙенең ғаиләһен тасуирлағанда, эпос Йәнбирҙенең балаларға тәрбиә күберәк биреүен аңлата, ә эпостың аҙағында беҙ Уралдың улдарына тәрбиәне әсәләре биреүен аңлайбыҙ. Шунан сығып, эпоста ғаиләлә ҡатын-ҡыҙ роленең үҫеше, йәғни эволюцияһы сағылдырыла тип әйтһәк була.

«Урал батыр» эпосында бар ҡатын-ҡыҙ образдары ла яҡшылыҡ яғында. Улар һәр береһе үҙ ролен башҡара, әммә шул уҡ ваҡытта уларҙы берләштергән яҡшылыҡ мотивы төп урында. Башҡорт халҡының иң боронғо мифологик «Урал батыр» эпосында һәр бер образ әһәмиәтле, ҡыҙыҡ һәм үҙенсәлекле. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ образын айырым билдәләргә мөмкин. Тап шул образ донъяны яратыуы, яратылыуы булараҡ мөһим роль уйнайҙыр.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Мирбадалева А.С., Сагитов М.М., Харисов А.И. Эпосы народов СССР: Башкирский народный эпос. – М.: Наука, 1977. – 518 с.
2. Сагитов М.М. Башкирское народное творчество. – Уфа: Башкирское кн. изд-во, 1987 – Т.12 – 590 с.
3. Сәғитов М.М. Боронғо башҡорт ҡобайырҙары. – Өфө: БКН, 1987. – 226 бит.
4. Сәғитов М.М. Урал батыр. Башҡорт халыҡ эпосы. – Өфө: БКН, 1997. – 280 бит.
5. Зарипов Н.Т., Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. – Өфө: БКН, 1982. – Т.3. – 422 бит.
6. Галин С.А. Мифологические мотивы и образы // Ватандаш. – 1998. – Вып. 12. – С. 12–24.
7. Ғәлин С.А. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. – Өфө: Китап, 1999. – 470 бит.

8. Урал батыр. Башҡорт халыҡ эпосы. – Өфө: Китап, 2005. – 296 бит.

9. Сөләймәнов Ә.М. Башҡорт халыҡ ижады. Совет осоро. Әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр, сәсәндәр ижады. – Өфө: Китап, 1982. – 422 бит.

© *Әминева З.В., Ғәлинә Ғ.Ғ., 2021*

**УДК 81-25**

*Әхмәҙеева Г.С.*
*Ғилми етәксеhе:Солтаҡаева Р.А.*
*М. Аҡмулла ис. БДПУ*

# ТӨРКИ ТЕЛ ҒИЛЕМЕНДӘ ФРАЗЕОЛОГИЗМДАРҘЫҢ ӨЙРӘНЕЛЕҮ ТАРИХЫ

Һуңғы йылдарҙа фразеология буйынса Б.А. Лариндың, О.С. Ахманованың, А.И. Ефимовтың, Н. Амосованың, А.М. Бабкиндың, В.Л. Архангельскийҙың, М.Т. Тагиевтың, Н.М. Шанскийҙың, В.Г. Жуковтың күп кенә хеҙмәттәре, һүҙлектәре донъя күргән. Шул ғалимдарҙың фразеология тураһындағы теорияны үҫтереүҙә роле ҙур.

Фонетика, фонология, грамматика менән бер рәттән, фразеология ла тел белеменең үҙаллы тармағы булып һанала. Фразеология түбәндәге мәсьәләләр асыҡлауҙы талап итә: фразеологик берәмектәрҙең дөйөм мәғәнәһе менән уның компоненттары араһындағы мәғәнә бәйләнештәре; бөтөн берәмек составына ингән һүҙҙәр араһында мәғәнә мөнәсәбәттәре; фразеологизмдарҙың үҙенсәлектәрен анализлау һ.б. [3: 264]

Дөйөм тел ғилемендә фразеологияны өйрәнеүҙең 200 йылдан артыҡ тарихы бар. Хәҙерге көндә фразеология тел ғилеменең үҙ аллы тармағы булып үҫешкән. Фразеологияның өйрәнеү объекты, уның теоретик мәсьәләләре билдәләнгән. Фразеологик берәмектәрҙең тел күренеше булараҡ тәбиғәте, уларҙың төп билдәләре асыҡланған, күп кенә телдәрҙең фразеологик байлығын сағылдырған төрлө типтағы, төрлө күләмдәге һүҙлектәре донъя күргән. Был йәһәттән рус тел ғилемендә хеҙмәттәр байтаҡ. Фразеология теорияһы ентекле эшләнгән, ҙур күләмле махсус һүҙлектәр баҫылып сыҡҡан. [7]

Һуңғы 40–50 йыл эсендә төрки телдәрҙең фразеологияһын өйрәнеүҙә лә байтаҡ аҙымдар яһалған, ике телдәге һәм аңлатма һүҙлектәр төҙөлгән. Улар фразеологик байлыҡ тупларға һәм уларҙы

системалаштырырға ярҙам итә. Татар фразеологияһына килгәндә, уға беренсе аңлатманы Кәюм Насыри бирә. [4: 235] Бер төр әйтемдәрҙе ул үҙ-үҙҙәренең төп мәғәнәләренән күсерелгән, йәшерен (ситләштерелгән) мәғәнәле һүҙҙәр (кәшмәләр) тип билдәләй. Шулай уҡ, татар ауыҙ-тел ижады йыйыу буйынса Хужа Бәҙиәм байтаҡ хеҙмәт иткән. Уның «Борынғылар әйткән сүзләр» (1912) исемле йыйынтығы билдәле. Ғибат Алҡаров тарафынан төҙөлгән «Әлифба тәжрибе, имла кағыйдәләре, атамалар халык әдәбиятын жыю турында инструкциялар кыентыгы» (1928) тигән китаптың «Фольклор һәм халык әдәбиятын жыю өчөн кулланма» бүлегендә хикәйәләрҙе, тапҡыр яуаптарҙы, ҡарғыштар һәм алҡыштарҙы бирә. Л. Йәләй, Н. Борһанова, Л. Мәхмүтовалар фразеологияға мәҡәл һәм әйтемдәрҙе лә индергәндәр. Н. Борһанова һәм Л. Мәхмүтова тарафынан «Русча-татарча фразеологик сүзлек» төҙөлгән.

Төрки телдәрҙең фразеологияһы теоретик планда төрлө кимәлдә өйрәнгән. Азербайжан, ҡаҙаҡ, татар, төркмән, үзбәк телдәре буйынса бик күп хеҙмәттәрҙе һанарға мөмкин.

Ҡаҙаҡ телсеһе И. Ҡенесбаев фразеологизмдарға төрлө һүҙҙәрҙе, әйтемдәрҙе һәм идиомаларҙы индергән. Үзбәк ғалимы Ш. Рәхмәтуллаев фразеологик берәмектәрҙе күп мәғәнәлелек, синонимия, вариация, антонимия буйынса тикшергән. [6: 14]

Төркмән, ҡумыҡ, яҡут телдәрендә ҡыҫҡа фразеологик һүҙлектәр сығарылған. Уларҙы, башлыса, уҡыу ҡулланмаһы булараҡ файҙаланырға мөмкин. 1982 йылда татар телсеһе Ғ.Х. Әхәтов тарафынан сығарылған «Татар теленең фразеологик әйтемләр сүзлеге» татар фразеологияһын фәнни нигеҙҙә тәртипкә һалырға ярҙам итә.

Унда татар әҙәби телендә актив ҡулланыла торған 2500 яҡын образлы фразеологик берәмек индерелгән.

Фразеологияны тикшереү башҡорт тел ғилемендә лә бөгөн мөһим проблема һанала. Башҡорт теленең фразеологияһы буйынса тәүге тикшеренеүҙәр айырым мәҡәләләр рәүешендә журналдарҙа, йыйынтыҡтарҙа баҫылған. Тәүге монографик тикшеренеү XX быуаттың 60-сы йылдарында донъя күргән. Төрки телдәр белгесе С.Н. Моратов үҙенең «Төрки телдәрҙә тотороҡло һүҙбәйләнештәр» исемле китабында, башҡорт теле материалын киң файҙаланып, ошо һүҙбәйләнештәргә классификация үткәргән, уларҙың тәбиғәтен билдәләүҙә беренсе аҙым яһаған.

Күренекле тел ғалимы Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев [3: 264] башҡорт фразеологияһын аяҡҡа баҫтырыуҙа ҙур көс һалған. Уның эшен З. Ғ. Ураҡсин [8], Әхтәмов [11: 208], Э.Ф. Ишбирҙин [1: 399] кеүек ғалимдар уңышлы дауам иткән.

Башҡорт фразеологияһы буйынса тәүге мәғлүмәттәр Х.Ғ. Йосоповтың хеҙмәтендә бирелгән. [2: 7]

Автор 1963 йылда баҫылып сыҡҡан «Башҡор теленең фразеологияһы» исемле уҡыу ҡулланмаһында күренекле яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романындағы фразеологизмдарға анализ бирә, уларҙы стилистик функциялары, грамматик төҙөлөштәре һәм мәғәнә яҡтарынан тикшерә.

Ғалим фразеологизмдар составына фразеологик синонимдарҙы, фразеологик антонимдарҙы, күп мәғәнәле берәмектәрҙе, эмоциональ буяулы нығынған һүҙбәйләнештәрҙе, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе индерә. Стилистик функцияһы яғынан улар йәнле һөйләү теле фразеологик әйтемдәренә, дини фразеологизмдарға ҡарай. Грамматик үҙенсәлектәре буйынса уларҙы ҡылым, исем, сифат, рәүеш, ымлыҡ, модаль төрҙәрендәге берәмектәргә бүлә. Бында ул мәғәнәүи һәм грамматик берҙәмлек тәшкил иткәндә берәмектең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауына таяна. Мәҫәлән, *ҡан дошман – кем?* йөкмәткеһе яғынан исемгә тура килә, тимәк исем фразеологик берәмек.

Артабан башҡорт теленең фразеологияһының дөйөм мәсьәләләре Ж.Ғ. Кейекбаевтың хеҙмәтендә дауам ителә. Үҙенең юғары уҡыу йорттары өсөн сығарылған ҡулланмаһында ул фразеологияны лексикологияның айырым бүлеге итеп ҡарай, ошо берәмектәргә лексик-грамматик классификация яһай, уларҙың морфологик төҙөлөшөн асыҡлай. [3: 264] Был яҡтан уның ҡарашы татар телселәре Л. Йәләй, Н. Борһанова, Л. Мәхмүтоваларҙыҡына һәм башҡорт лингвисы Х. Йосоповтыҡына тура килә. Фразеологик берәмектәрҙе классификациялағанда ул Х.Ғ. Йосоповтан айырмалы рәүештә лексик-семантик принципты нигеҙ итеп ала, берәмектең грамматик яғына ла иғтибар итә. [3: 264]

Ж.Ғ. Кейекбаев фекеренсә, фразеологик берәмектәр, айырым һүҙҙәр кеүек, телмәрҙә билдәле бер грамматик функция үтәп килә. Ғалим фразеологияны бөтә образлы һүҙбәйләнештәр, мәҡәл, әйтемдәр рәтенә ҡуйып өйрәнә. [3: 264]

Х.Ғ. Йосопов та, Ж.Ғ. Кейекбаев та мәҡәлдәр һәм тапҡыр һүҙҙәрҙе фразеологик берәмек тип ҡараһа, профессор З.Ғ. Ураҡсин

был мәсьәләлә бөтөнләй икенсе фекерҙә. [7] Уныңса, фразеологик берәмектәр менән мәҡәлдәр түбәндәге билдәләре буйынса айырыла: «Фразеологик берәмектәр төшөнсәне аңлата. Мәҫәлән, *эт тубығынан – күп*; ә мәҡәлдәр ҡатмарлы уй-фекерҙе белдерә: *айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар* һ.б.».

Беҙ ғалимдың фекере менән уртаҡлашабыҙ, сөнки автор аңлатыуынса, фразеологик берәмектәр ысынбарлыҡ күренештәрен атау һәм кәүҙәләндереү функцияларын үтәй. Мәҫәлән, *куш йөрәкле батыр*, ә мәкәлдәрҙә тормош-көнкүреш, ысынбарлыҡ хаҡында фекер йөрөтөү сағыла. Мәҫәлән, *батыр бер үлә, ҡурҡаҡ ҡырҡ үлә,* – баһа биреү. һ.б.

З.Ғ. Ураҡсин фразеологик берәмектәр рәтенә шулай уҡ ҡушма һәм парлы һүҙҙәрҙе лә, аналитик ҡылымдарҙы ла индермәй. Уларҙың эске һәм тышҡы билдәләрен ул түбәндәгесә күрһәтә:

«Фразеологик берәмек эсенә ингән һүҙҙәрҙең һәр береһенең үҙ баҫымы була, ә ҡушма һүҙ бер генә баҫым менән әйтелә. Мәҫәлән, *ташбаш* (балыҡ), *таш йөрәк* (ҡаты күңелле кеше)» һ.б.

«Ҡушма һүҙҙәр предмет, күренештәрҙең тура атамаһы булып килә, йәғни номинатив характерҙа була, ә фразеологик берәмектәр образлы-номинатив характерҙа, ул күренеште ситләтеп образлы һынландырыу аша бирә. Мәҫәлән, *кульяулыҡ – телдә яңаҡ*» һ.б.

Шулай итеп, З.Ғ. Ураҡсин фразеологияның төп мәғәнәләре буйынса киң теоретик мәғәнә бирә. Уның күрһәтелгән теоретик концепцияһын артабан профессор М.Х. Әхтәмов үҫтерә. [11: 208]

Ул З.Ғ. Ураҡсин концепцияһы менән килешеп, фразеологизмдарҙы шулай уҡ өс төркөмгә бүлә: *фразеологик ҡушылмалар, фразеологик бәйләнештәр, фразеологик берҙәмлектәр*. Фразеологик бәйләнештәрҙе, берәмектәрҙе М.Х. Әхтәмов тәрәнерәк, киңерәк итеп өйрәнә. [8]

Автор иҫәпләүенсә, бер үк фразеологизмдың төрлө форма составында уртаҡ һүҙҙәр булған фразеологик синонимдарҙы айыра белергә кәрәк. М.Х. Әхтәмовтың фекере буйынса, фразеологик берәмек – ул берҙәм бөтөн мәғәнәгә эйә булған даими составлы әҙер тел берәмеге, фразеологик берәмектәрҙе ирекле һүҙбәйләнештәрҙән һәм шул уҡ ваҡытта уларҙы һүҙҙәр менән яҡынлаштыра торған төп үҙенсәлек – уларҙың телдә әҙер көйө йәшәүе. [11: 208]

Шулай итеп, башҡорт телендә фразеологизмдарҙы өйрәнеүгә ҡарата ғалимдар араһында берҙәм фекер юҡ. Ғ.Х. Йосопов,

Ж.Ғ. Кейекбаев, З.Ғ. Ураҡсин фразеологизмдар составына төрлө һүҙбәйләнештәрҙе индергәндәр. Ә профессор М.Х. Әхтәмовтың ҡарашы профессор З.Ғ. Ураҡсиндың ҡарашы менән тап килә.

Күрһәткән хеҙмәттәрҙә төрки тел ғилемендә фразеологик берәмектәр компоненттарҙың семантик бәйләнеше нигеҙендә генә өйрәнелгән. Йәғни, мәғәнә һәм грамматик төҙөлөшө буйынса фразеологизмдарҙың классификацияһы төҙөлгән. Быға тиклем, фразеологик берәмектәр мәғәнә, компонент буйынса тикшерелһә, бөгөнгө көндә концепт яҡтан ҡарала. Р.Х. Хайруллина әйтеүенсә, фразеологик берәмектәр милли телдең, халыҡтың мәҙәни тәжрибәһен һәм донъяны танып белеүҙе сағылдыра:

«Картина мира в языке отражает знания и представления людей об окружающей действительности. Фразеология каждого языка отображает образную картину мира в призме мировосприятия того или иного народа».

Башҡорт телендәге күпселек фразеологик берәмектәрҙең икенсе телдәрҙә эквиваленттары булмай, был күренеш һәр тел өсөн специфик сара булып тора. Уларҙың мәғәнәләре икенсе телдә бүтән һүҙҙәр йәки һүҙбәйләнештәр менән бирелә. [9: 138] Мәҫәлән, *делать из мухи слона – энәләй нәмәне дөйәләй итеү, төймәләйҙе итеү; делить шкуру неубитого медведя – атмаған куянға ҡаҙан асыу; травленый волк, морской волк – карт төлкө, карт бүре; драть как сидорову козу- көзә майын сығарыу; как собака – эт булыу, эт итеп; голоден как волк, волчий аппетит – эстә (ас) бүре олоу: кот наплакал – бесәй төкөрөгө; подкладывать свинью – этлек итеү; пускать козла в огород – кәзәне кәбеҫтә кауылларға кыуыу, волчий билет – кәзә билеты* һ.б.

Шулай итеп, фразеологик берәмек эсендә мәҙәниәт, донъяға ҡараш, телдең спецификаһы ята.

Хәҙерге башҡорт теленең фразеологияһы тарихи үҫеш нәтижәһендә тупланған. Халыҡтың коллектив аҡылы, тормош тәжрибәһе, донъяға ҡарашы быуаттар буйына йыйыла килгән һәм телебеҙҙең ошо иң баҙыҡ ынйыларында сағылыш алып, нығынып ҡалған. [8]

# ӘҘӘБИӘТ


1. Ишбаев К.Ғ., Ишбирҙин Э.Ф., Йосопова Х.Ғ. Хәҙерге башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Башҡортостан китап нәшриәте. – Өфө, 1986. – 399 бит.
2. Йосопов Х.Ғ. Башҡорт теленең фразеологияһы. Өфө, 1963. 7-се һәм 52-се биттәр.
3. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы (уҡыу ҡулланмаһы). Башҡорт дәүләт университеты нәшриәте. – Өфө, 2002. – 264 бит.
4. Кәюм Насыри. Татар фразеологияһы. – Казан, 1986. – 235б.
5. Муратов С.Н. Устойчивые словосочетания в тюркских языках. М., 1961.
6. Рахматуллаев Ш. Узбек тилининг изохли фразеологик луғати. Ташкент. Уҡитувчи, 1978.
7. Ураҡсин З.Ғ., Надршина Ф.А., Йосопов Х.Ғ. Башҡортса-русса фразеологик һүҙлек. Өфө, 1973.
8. Ураксин З.Ғ. Фразеология башкирского языка. Автореферат диссертация на соискание ученой степени доктора филоогических наук, Уфа. – 1975.
9. Хайруллина Р.Х. Лингвистика межкультурных коммуникаций: курс лекций. – Уфа: Изд-во БГПУ, 2005, - 138с.
10. Хайруллина Р.Х. фразеологическая картина мира: от мировидения к миропониманию. Монография. – Уфа, - 2000.
11. Әхтәмов М.Х. Хәҙерге башҡорт теле. Лексикология, фразеология, лексикология. Уҡыу ҡулланмаһы. – Өфө: Башҡорт дәүләт университеты, 2002. – 208 бит.
12. Әхәтов Г.Х. Татар теленең фразеологик әйтемләр сүзлеге. Казан: Татарстан китап нәшрияты, 1982.



*© Әхмәҙеева Г.С., Солтаҡаева Р.А., 2021*

**УДК 82**

*Юлдашева Д.Ю., магистрант*
*М.Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

# ЫРЫМБУР ЯҘЫУСЫЛАРЫНЫҢ ИЖАДЫНДА СОЦИАЛЬ ПРОБЛЕМАЛАР

Социаль проблемалар башҡорт халҡы әҙәбиәтендә һәр ваҡытта ла актуаль булған һәм буласаҡ та, тип уйлайбыҙ. Көндән-көн тормош үҙгәрә, яңы мәсьәләләр ҙә тыуып тора.

Социаль, йәки йәмғиәт проблемалары кешегә тура йәки ситләтеп йоғонто яһаған һәм байтаҡ йәмғиәт ағзаларының ҡарарынан етди мәсьәлә булараҡ, хәл итеүҙе талап иткән проблема. Социаль проблемаларҙың аныҡ исемлеге төрлө ваҡытта төрлө йәмғиәттәрҙә айырылып тора, уларҙы үҙләштереүе һәм күҙ алдына килтереүе быуат менән үҙгәрә.

Әйтеүебеҙсә, әҙәбиәттә социаль проблемалары һәр саҡ актуаль булған. Әҫәрҙәрҙә йәмғиәттең тормошо һәм ҡоролошо (ғәҙел социаль тигеҙлек, хоҡуҡи дәүләт төҙөү, кеше хоҡуҡтарын һаҡлап ҡалыу, прогресс һәм йәмғиәт, ғилем һәм йәмғиәт), кеше һәм йәмғиәт мөнәсәбәттәре (ололарға хөрмәт, инвалидтар проблемаһы, медицина, мәғариф, иҡтисади проблемалар), социаль тигеҙһеҙлек проблемалары (байҙар һәм ярлылар, милләтселек, интеллегенция проблемалары), цивилизация проблемалары ҡаралған. Һәр бер проблема нисек булһа ла, әҙәбиәттә һәр саҡ сағыла. Әҫәр төп проблемаһыҙ булырға мөмкин түгел. Беҙ тикшергән Ырымбур өлкәһе яҙыусыларҙың ижадында ла социаль проблемалар байтаҡ ҡаралған.

Йәмғитәттең хәле, ябай кешеләрҙең йәшәйеше һәр осорҙоң шәхестәрен борсоткан, XIX быуатта ижад иткән Әбелманих Ҡарғалы ла был мәсьәләгә бик ҙур иғтибар биргән. Уның әҫәрҙәренең нигеҙендә әхлаҡ, ғибрәт, нәсихәт төшөнсәләре ята. Һәр әҫәренең аҙағында тейешле һығымта бирелгән һәм төп аҡылы сығарылған автор сигенеүе урын ала. Шул өлөштәрҙә автор кешеләрҙе изге ғәмәлдәр ҡылыуға, кешеләргә ярҙам итеүгә әйҙәй. Ә. Ҡарғалы пәйғәмбәребеҙҙең йәшәйешен миҫалға килтереп, уҡыусыларҙы изге эштәр ҡылырға, үҙ идеалдарыңа тоғролоҡ һаҡлап ҡалып, ныҡ булып, бөтә һынауҙарҙы үтәргә саҡыра, шуға күрә, уның ижадында төп мотив булып этик принциптар тора тип, әйтеп була.

Миҫал өсөн «Мөнәжәт» шиғырынан өҙөгөн ҡарап китәйек:

Донъя малы, дәрәжәһе – барыһы ла ялғандыр ул:
Ер йөҙөн иңләп биләгән заттарҙан ҡалғандыр ул.
Әй меҫкен Мәних, көтмә рәхәт был игелекһеҙҙән,
Бер шатлыҡҡа мең яфа бүләк иткән донъялыр ул.

Автор был шиғырҙы ябай, ярлы халыҡ күҙлегенән яҙа, уларҙың тормошо һәр саҡ ауыр булғанлығын белдерергә теләй. Шулай итеп, Әбелмәних Ҡарғалы үҙен халҡының хоҡуҡтары һәм азатлығы өсөн актив көрәшеүсе итеп күрһәтә.

Мөхәмәтша Буранғолов Башҡортостандың халыҡ сәсәне, иң популяр эпостар йыйыусыһы булып танылһа ла, үҙе лә күп әҫәрҙәр ижад иткән. Шуларҙың береһе, 1926 йылда яҙылған «Башҡорт туйы» пьесаһы. Унда XIX быуат аҙағының дәүерендә булған ваҡиғалар тураһында һүҙ бара.

Пьесала төп урын башҡорт ырыуҙарының көнкүрешенә бирелә. Төп проблемалар булып байҙарҙың ҡотороуы, уларҙың үҙ милләтенә хыянат итеүе, берҙәмлекте булдырмауы, боронғо йолаларҙы онотоорға тырышыуы асыҡ күрһәтелә. Ике йөҙлөлөк, социаль тигеҙһеҙлек, түрәләр, мөхәббәт проблемалары күтәрелә.

Буранғолов шул осорҙоң социаль тигеҙһеҙлеген сағыу һүрәтләгән. Ярлыларҙың ауыр тормошо байҙарға хеҙмәт иткән Һөрәйрә һәм Әсмән, Тимеркәй яғынан асыҡлана. Әҫәрҙә бер һүҙ ҙә өндәшә алмаған ярлыларҙың, ҡоторған байҙарҙың тормошо асыҡ күрһәтелә. Әйтеп китергә кәрәк, автор пьесаның финалында ярлыларға бәхетле тормош бирергә тырыша.

Был пьесаның идеяһы яңы түгел, ләкин актуаль: боронғо йолаларҙы һаҡлау, ырыуҙарҙың, милләттәрҙең һәр саҡ берҙәм булыуы, социаль тигеҙлек.

Хәбибулла Ибраһимов «Башмағым», «Еҙнәкәй» кеүек шәп пьесалары менән танылған. Был мәҡәләлә «Урожай байрамы» пьесаһын ҡарап киткәйек. Автор колхоздың сәскә атыу ваҡытын һүрәтләй, уҡыусылар был осорҙоң ыңғай һәм кире яҡтарын күрә ала.

Мәҫәлән, ыңғай тип берҙәмлекте, колхозсыларҙың бөтә көстәрен эшкә биреп, ысын күңелдән берҙәм эшләүҙәрен әйтә алабыҙ. Һүрәтләнгән осорҙа бер тәртипһеҙлеккә урын булмаған, кешеләр норма, колхоз, тип янып торғандар, бер-береһенә эскерһеҙ ярҙамға килгәндәр.

Әлбиттә, кире яҡтары ла бар: эштән башҡа кешеләрҙең баштарында бер ни ҙә юҡ, робот кеүек, улар башҡа бер ниҙе лә

уйламайҙар. Айырым индивидуль шәхес ул ваҡытта булмаған тип, әйтерлек – коллектив аҡыл өҫтөнлөк иткән. Яҡшымы был, насармы, дөрөҫ кенә әйтеп булмай, был һорау һаман актуаль.

Ләкин беҙҙең уйлауыбыҙса, Х. Ибраһимов был идеаль картина менән халыҡтың кешелеклеген, бер-береһенә ярҙамсыллығын, эскерһеҙлеген күрһәтергә уйлаған.

Күреүебеҙсә, үҙ быуатына хас булған мәсьәләләрҙе асыҡлаусы яҙыусылар һәр саҡ булған. Уларҙың ыңғайынан уҡыусылар үҙҙәренең ата-бабаларын борсоткан, уйландырған проблемалар менән таныша алалар, әлеге көндә булған хәл менән сағыштырып ҡарай алалар. Был әҫәрҙәрҙе дәрестәрҙә ҡулланыу файҙалы булыр тип, уйлайбыҙ. Хәҙерге заман күҙлегенән сығып тикшереү, шул әҫәрҙән үрнәк алыу – йәш быуынды тәрбиәләү ваҡытында бик мөһим. Барыбыҙ өсөн дә сер түгел, сит өлкәләрҙә йәшәгән башҡорттарға үҙ телдәрен һаҡлап ҡалыуы бик ҡыйын. Ләкин нисек булһа ла, уҡыусыларға был темаларҙы тәҡдим итергә кәрәк, айырыуса, йәш быуынды туған әҙәбиәтте өйрәнеүгә өндәргә, яҡташ яҙыусыларҙың ижады менән таныштырырға, уларҙа үҙ әҙәбиәттәренә, халҡына, теленә ҡыҙыҡһыныу уятырға мөһим, сөнки башҡорт милләтенең телен өйрәнеү, уның үҙенсәлектәрен үҙ итеү, хәҙерге глобализация фонында юғалтып ҡалдырмау – иң мөһим талаптарҙың береһе.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Башҡорт халыҡ ижады / ред. Ғ.Б. Хөсәйенов, төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Н.Т. Зарипов. – Өфө: Башкитапнәшр, 1972.
2. Буранғолов М. Башҡорт туйы: драма // Буранғолов М. Һайланма әҫәрҙәр. – Өфө: Китап, 2008.
3. Ибраһимов Х. Башмағым: пьесалар / мөх. М.С. Игебаева. – Өфө: Башҡ. кит. нәшр., 1990 . – 256 бит.
4. Писатели земли башкирской: справочник / сост.: Р.Н. Баимов, Г.Н. Гареева, Р.Х. Тимергалина. – Уфа: Китап, 2015. – 669 .
5. Шакур Р. Путь в тысячу лет. История башкирской литературы с древних времен до наших дней. – М.: ТОО «Рарогъ», 1996.


© *Юлдашева Д.Ю., 2021*

**УДК 398.221**
**УДК 82-09**

*Ягафарова Г.Д., студентка 4 курса*
*Научный руководитель: Хуснуллина Р.Д., к.филол.н., доцент*
*БГПУ им. М.Акмуллы, г.Уфа*

# ОБРАЗ МУДРОГО СТАРЦА В ЭПОСЕ «УРАЛ-БАТЫР»

Неотъемлемой частью большинства фольклорных сюжетов является встреча главного героя с мудрым наставником. Функция учителя и защитника возлагается на архетипический образ старца. Его роль в сюжете заключается в том, что он должен приблизить героя к его цели путём наставления на путь истинный. Он даёт мудрые советы, тем самым помогая сформировать те личностные качества, которые помогут дойти до конца истории. Путь, на который направляет учитель, обычно делится на два варианта: направо пойдешь – станешь богатым, а удача будет сопутствовать тебе во всём. Если налево пойдёшь, то столкнёшься со смертельной опасностью. Герою нужно принять непростое решение: какой же путь приведёт его к цели с наименьшими потерями?

Эпосы – это не просто героические сказания о героях и их подвигах. Они призваны поднимать извечные вопросы перед читателями. В «Урал-батыр» ставится задача понять, в чём заключается смысл жизни, что есть смерть? Ответы на них даёт мудрый старец. От него Урал-батыр узнает, что истинное бессмертие заключается не в физическом существовании тела, а в духовном бытии человека, в его совершенствовании, саморазвитии. Ключевыми идеями выступают служение всем людям, миру, противоборство злу путём альтруистических деяний.

Вернёмся к образу старца. В художественной литературе, в мировой истории всегда существовали образы мудрых наставников. Доказательства тому Лао-Цзы, Будда, Сократ, Гераклит. Их задача указать на путь, но обретение мудрости возлагается уже на самого человека, опираясь на его личный опыт. Ведь мудрость – это не вещь, её невозможно передать, объяснить. К тому же, значимую роль в обретении мудрости играет воспитание в семье, обретение житейского опыта путём общения с окружающими. Поэтому говорят, что люди приобретают хороший опыт и мудрость к сорока годам.

Если после достижения этого возраста человек не берёт ответственность за себя, за свою судьбу в свои руки, то так до конца жизни и останется рабом дурных привычек. В такой ситуации ни один мудрый старик не поможет.

По наблюдениям швейцарского психиатра К. Юнга, старец «появляется в тот момент, когда герой находится в безнадежном и отчаянном положении». Он может предстать перед героем в разном амплуа: как старый человек или животное, как царь или отшельник, как злой колдун или добрый помощник, как целитель или советчик. Старик у развилки дорог, когда Герою и его Тени предстоит выбрать путь лично. Возможно, это вовсе и не мудрый старик, а посланник Смерти. Но, возможно, всё проще, и это на самом деле мудрый старец, объясняющий Уралу суть Живого Родника [1: 42]. Но неизменным остаётся одно – он обладает сверхчеловеческими способностями.

Слова «старец», «мудрец» в настоящее время употребляются в двух значениях. Обычно под «старцем» имеют в виду подвижника, достигшего высокой меры духовного просветления, обладающего явными благодатными дарованиями, имеющего к тому же дар духовного рассуждения, то есть способного и других руководствовать на пути спасения. Но слово «старец» можно понимать и в более скромном значении. То есть, это старый человек, который прожил немалую жизнь и набрал хороший опыт, ясный ум. И он сам учит людей хорошим манерам, правильной жизни. Старец помогает менее опытным людям проходить свой жизненный путь, предостерегает их от ошибок и преткновений, указывает на погрешности, основывая все свои советы на опыте древнейших мудрецов и Коране [2: 129].

Мудрец – это всегда тот, кто не имеет никаких личных мотивов в происходящих событиях. Он – сторонний наблюдатель и не более, чем советчик. Особенность образа жизни мудрых старцев заключается в том, что они ставят добродетель выше внешних благ. На пути к саморазвитию, совершенству богатство и власть их не интересуют. Они обладают сдержанным характером, мягким нравом. Их советы мудры, но очень сложны. Главным героям сложно следовать по намеченным ими пути. Это же и касается эпоса «Урал батыр». Во-первых, мудрый старец дает совет конкретному герою, удачно применимый только в его ситуации. Во-вторых, сам совет метафоричен, загадочен, его можно трактовать по-разному. Только с

развитием действий герой осознаёт, что имел в виду наставник. В их напутствиях могут присутствовать элементы загадок, символов, знаков. В-третьих, чтобы следовать советам старца, герою необходимо пройти через страшные испытания. Таким образом, архетип старца в художественной литературе – это образ мудрого дедушки, который может дать совет. Данный архетип так узнаваем благодаря тому, что это – изначальный образ, живущий в сознании каждого человека.

Советы мудрых старцев обладают следующими характеристиками:

- Совет, пригодный именно для ситуации главного героя, для достижения именно его цели.
- Совет сложно понять. Зачастую он кажется каламбуром, насмешкой. И только благодаря развитию событий, герой понимает, что же на самом деле имелось в виду.
- Совет практически невозможно выполнить, и герою должна сопутствовать удача. Для преодоления смертельных препятствий необходимо использовать все физические и моральные ресурсы.

Были случаи, когда рядом с истинными, благодатными старцами встречались шарлатаны и обманщики. Также в истории были и такие случаи, когда человек, считавшийся мудрым наставником, сам находился в заблуждении и невольно вводил в заблуждение других. Вероятно, в наши дни как мошенников, так и заблуждающихся людей стало еще больше, но из-за них ни в коем случае нельзя ставить под сомнение древнюю традицию старчества, которая наставляет на правильный и верный путь.

В эпосе «Урал батыр» главный герой узнаёт от наставника о главных человеческих ценностях. Показательным в этом отношении является отрывок, когда Урал-батыр встречается со стариком: «Долго шел Урал-батыр в неведении, пока не дошел до перекрестка семи дорог. Сидел там седобородый старец-аксакал, весь согнувшийся от бремени лет. Поздоровался с ним вежливо Урал-батыр, пожелал долгих лет жизни, а после спросил про дорогу к живой воде. На что старец ему сказал:

– Вот уже сотни лет я показываю путникам дорогу, но никто так и не вернулся обратно. За твою доброту дам тебе совет. Встретишь ты по дороге табун лошадей, и будет среди них один конь, Акбузат. Если сможешь его покорить, то станет он для тебя верным другом, а коли нет, то и живой воды тебе не видать.

Поблагодарил Урал-батыр мудрого старца за напутствия, попрощался с ним и пошел по дороге, что ведет к роднику. Так он шёл год, два, пока не встретил табун лошадей, посередине которого величественно возвышался Акбузат:

Навострены уши, как шилья,
Грива лежит волосок к волоску,
Грудь – как у кречета, легкие ноги,
Красною медью сверкают глаза!

Урал-батыр был восхищён грациозностью коня, тихо подкрался к нему и внезапно вскочил на него. Взметнулся Акбузат, подбросил наездника под самые облака». После нескольких попыток, Урал-батыр все-таки оседлал коня и помчался. До того, как он оказался у истоков живой воды, он встретил свою любимую девушку Карагаш (в некоторых версиях Хумай). Сыграли они свадьбу, и родились у них сыновья – Идель, Яик и Хакмар, основоположники будущих рек. А уже от них рождаются семь внуков, которые дали начало семи башкирским родам – ырыу.

Путь, который должен был пройти Урал, и доля, выпавшая на его судьбу, привела того в царство Змея. Как и положено герою, батыр разогнал змей, освободил множество порабощенного ими люду со всех краев земли. Перед смертью Урал-батыра Карагаш тайком ходила к источнику живой воды и каплями набирала их для мужа. Урал-батыр поднося их к своим губам, окроплял землю, приговаривая:

– Мы умрем. Пусть же наша земля будет вечно юной!

После чего и умер. Похоронили его, а на том месте встали горы, которые народ назвал Уральскими. А Карагаш ушла к озеру Аслыкуль и там окаменела от горя. Встала на том месте гора Карагаш.

В другой версии сказано, что Урал-батыр нашёл Живой Родник, но вместо того, чтобы испить из него, опрыскал воду по сторонам. Земля и живность в ней разрослась от воды, а природа стала бессмертной. Жена Хумай похоронила своего мужа на самой высокой горе, после чего скрылась с глаз людей. Тот горный хребет стали называть Урал-тау, в честь батыра.

Автор не описывает внешний вид наставника. Но у современных читателей могло сложиться следующее классическое представление старца: пожилой мужчина с бородой, длинными седыми волосами с посохом в руках. Его характер мягок, снисходителен, речь нетороплива, а слова мудры. Что касается старца из эпоса, он,

несомненно, был человеком смелым, прожившим много лет и повидавшем на своём веку много интересного. Ему было не занимать терпеливости и упорства. Ведь он сам говорит Уралу, что уже сидит здесь сто лет, и ни один из юношей не вернулся обратно. Но ему также было не занимать хитрости. Только Уралу он дает такой совет, который помог ему найти коня и оседлать его, чтобы Акбузат стал для него верным другом и помощником. Когда мы слышим слово «хитрость», то в первую очередь думаем о каком-то плохом человеческом качестве. Но не в случае со старцем из эпоса «Урал-батыр». Ведь находчивость была использована во благо людей. Но из этого следует логичный вопрос: почему же он никому из других юношей до Урала не советовал оседлать коня? Видимо, всему свое время [4: 22].

Образ старца из эпоса «Урал-батыр» – идеальное воплощение народной мудрости. Это пример человека, который является опорой для земляков, источником их духовной силы. Ведь именно благодаря его совету Урал находит Живой родник, в следствие земля стала бессмертной. Такие люди есть в каждом поколении, даже сейчас. Стоит лишь прислушаться к их словам, ведь их учителем стала жизнь.

Исходя из вышесказанного, образ мудрого старца из эпоса «Урал-батыр» является весьма популярным. Зачастую мудрость стариков связывают с богатым жизненным опытом. Они попадали во всевозможнейшие ситуации и сталкивались с бесчисленными трудностями. Но иногда могут быть и противоречия в том, что опыт – это не всегда гарантия мудрости. Опыт не всегда дает человеку возможность верно оценить новое, актуальное положение, поскольку любая ситуация, любая проблема никогда не бывают полностью похожей на предыдущие. Поэтому опыт гораздо чаще вредит, чем помогает. Тем не менее, мифологические образы мудрого старца популярны и прекрасны в литературе, ведь они всегда помогают героям выйти из той или иной ситуации невредимыми.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Башкирское народное творчество. Эпос. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1987. – Т. 1.

2. Башкирское народное творчество. Эпос. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1987. – Т. 1.

3. Самохвалова Е. Восток и Запад о Вселенной и Человеке: (тайная доктрина в свете сегодняшнего дня): конгломерат сведений и фактов из мудрых, умных и интересных книг: в 3 т. – М.: Сам полиграфист, 2015. – 22 с.

4. Священные символы эпоса «Урал-батыр» [Электронный ресурс]. Режим доступа: https://zdamsam.ru/b29967.html – Дата обращения: 05.10.2020.

5. Эпос «Урал-батыр» на русском языке (перевод Хусаинова А.Г.) [Электронный ресурс]. Режим доступа: http://урал-батыр.рф/урал-батыр-башкирский-народный-э.. – Дата обращения: 10.10.2020

*© Ягафарова Г.Д., Хуснуллина Р.Д., 2021*

**УДК 821.512.141**

*Яҡшимбәтова В.В., 5-се курс студенты*
*М.Аҡмулла ис. БДПУ, Өфө ҡ.*

## МӨНИР ҠУНАФИНДЫҢ «ТӘҢРЕ ӨРӨК ҠАПҠАНДА» ХИКӘЙӘҺЕНДӘ ҒАИЛӘ ҠИММӘТТӘРЕНЕҢ САҒЫЛЫШЫ

Кеше тормошонда ғаилә ҙур роль уйнай. Ғаилә, яҡты өй, бала – кешелектең бөгөнгөһө, киләсәге һәм дауамы ла. Башҡорт халҡында ғаилә тураһында бик күп мәҡәл-әйтемдәр һаҡланған, мәҫәлән, «Ата-әсәһен хөрмәт иткән, үҙе лә хөрмәтле булыр», «Ғаиләһеҙ кеше – тамырһыҙ ағас», «Минең ғаиләм – минең ҡәлғәм», «Атанан күргән – уҡ юнған, әсәнән күргән – тун бескән», «Татыу ғаилә – ил күрке», «Ныҡлы ғаилә – ил терәге» һ.б [1].

Әҙәбиәттә лә айырым ғаилә тормошон сағылдырған, ғаилә ҡиммәттәрен һүрәтләгән әҫәрҙәр бихисап. Мөнир Ҡунафиндың «Тәңре өрөк ҡапҡанда» әҫәрендә лә бер ғаилә тарихы бәйән ителә. Хикәйә баҫылып сыҡҡас уҡыусы уны яратып ҡабул итте. Хикәйәлә бер-нисә мәңгелек ҡиммәттәр телгә алына.

1. Ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәр. «Әҙәбиәттә ғаилә ҡиммәттәре, ҡатын менән ир араһындағы мөнәсәбәт тураһында күп яҙылды һәм яҙыла. Шундайҙарҙың береһе – МөнирҠунафиндың «Тәңре өрөк ҡапҡанда» хикәйәһе. Йәш яҙыусы геройҙарының эске донъяһын, уй-кисерештәрен, икеләнеүҙәрен, ғазаптарын бик оҫта,

ышындырғыс итеп һүрәтләй, йәшәү мәғәнәһе, тормош матурлығы хаҡында уйланырға мәжбүр итә» [3: 37].

Фәйрүзә – ултырып ҡалған уҡытыусы ҡыҙ. Уның ултырып ҡалыуының сәбәбе шунда – йөҙ-ҡиәфәте менән әллә ни алдырмай. Беренсенән, һипкелдәр йонсота уны. Икенсенән, яҫы устарынан бала сағынан ояла ҡыҙ. «Был етешһеҙлек бала сағынан эшкә әрһеҙлегенән килдеме, әллә нәҫелдәнме инде», – тип автор үҙе лә дөрөҫ кенә яуап таба алмай.

Мәргән, иһә, әрме хеҙмәтендә бер аяҡһыҙ ҡала. Ғәрип егетте көтөп ҡалған һөйгәне лә ташлағас, бөтөнләй төшөнкөлөккә бирелә. Ғүмере буйы яңғыҙ ҡалырмын тип уйлай. Фәйрүзә менән димләгәс тә башта ҡаршы төшә. Бары тик «ултырып» ҡалған егерме биштәрҙәге ҡыҙ тиеүҙәре генә күңелен бер аҙ имшетә. Йәнәһе лә, бер ғәрип бер «ултырып» ҡалған ҡыҙ таман булыр тип уйлай ул.

Автор тап ошо кәүҙә ғәриплегенән һәм йөҙ-ҡиәфәтенең етешһеҙлегенән ҡыйынһынған һәм оялған ике йәш йөрәкте «ҡауыштырып» ғаилә мөнәсәбәттәрендәге төп хәҡиҡәтте аса. Баҡһаң, донъя көтөп, үҙеңә лайыҡлы алмашсы – балалар үҫтерер өсөн төҫ-ҡиәфәттең әһәмиәте юҡ икән. Иң тәү сиратта, бер-береңде аңларға кәрәк. Шулай уҡ күркәм холоҡ та ҙур роль уйнай. Фәйрүзә лә үҙенең үлемесле ауырыуға дусар булғанлығын белгәс, хәтирәләргә бирелгән сағында ире менән икеһенең әрләшеп, өйҙә тауыш ҡуптарғандарын иҫләмәй.

2. Тоғролоҡ. «Тәңре өрөк ҡапҡанда» хикәйәһендә тоғролоҡ төшөнсәһе өс тапҡыр ҡабатлана. Беренсеһе, Мәргәндең әрмегә оҙатып ҡалған ҡыҙы егете ғәрипләнеп ҡалғанын белгәс, уның ҡайтыуын да көтмәй сит тарафтарға сығып китә. Быға атаһының баҫымы ла ныҡ була. Күрәһең, тәне ғәрип кеше менән тулы ҡанлы тормош ҡороп булмай тип уйлайҙар инде. Сәбиләнең бәхете тыуған яғында аҙашып ҡала, олоғайғас, ул күңеленә толҡа тапмай кире әйләнеп ҡайта. Ауырып түшәккә яткас, Мәргән уны саҡырып ала. «Һин сати булманың! – ҡырыҫ тауыш ҡапыл һауаны ярҙы» [2: 70]. Был күренеш аша ирҙең тәүге мөхәббәтенә ҡарата булған әрнеү-ярһыуҙары ла, үкенесе лә ярылып ята. Бәлки, был мәлдә Сәбилә менән сәстәрен бергә бәйләмәгәнгә ҡыуанып та ҡуйғандыр, сөнки донъя көткәндә ниндәй генә ауырлыҡтар булмай. Йәш сағында егет аяҡһыҙ ҡалмаһа, бүтән бәлә-хәсрәт килһә, Сәбилә уның барыбер ҡасан да булһа, ташлап китмәҫ, тип берәүҙә гарантия бирә алмаҫ.

Икенсенән, Фәйрүзәнең Мәргәнгә булған тоғролоғо. Ҡайһы саҡта ҡатын кеше иренә әсәй һымаҡ та булып китә. Уның тураһында хәстәрлек күрә. Йыш ҡына психолог ролен дә үтәй. Үҙенең хәле яҡшырмаҫын белгәс, ул ирен яңғыҙын ҡалдырмаҫ өсөн үҙе урынына ҡатын эҙләй. Шул сәбәпле ул йәштән ирһеҙ ҡалған Зөләйхаға үҙе димсе лә булып бара. Был Фәйрүзәнең Мәргәнде яңғыҙын ҡалдырмаҫ, ҡартайған көнөндә тәрбиәле булып йәшәүен теләгәндән эшләнелә.

Өсөнсөһө лә, Фәйрүзәнең тоғролоғона ҡайтып ҡала. Ғәҙәттә, мөхәббәтегеҙ ғүмерлек булһын тигән теләк бар. Башта Фәйрүзә ауырыһа ла, ул яйлап төҙәлә. Ә Мәргәнде ауырыу ҡапыл аяҡтан йығып, оҙаҡламай гүргә алып китә. Ирен юғалтыу ҡайғыһын ҡатын күтәрә алмай. Ул да оҙаҡламай гүр эйәһе була. Был уның Мәргәнгә булған тоғролоғонан, мөхәббәтенән килә.

3. Тәбиғәт менән бер бөтөн булыу. «Тәңре өрөк ҡапҡанда» хикәйәһендә ваҡиғалар ауылда һүрәтләнә. Шунлыҡтан, геройҙар ҙа йыш ҡына тәбиғәт менән икәүҙән-икәү ҡалалар.

Беренсеһе, Мәргән менән Фәйрүзәнең йофаф кистәре яланда ҡоролған ҡыуышта үтә. Никахтан һуң сымылдыҡ артында йәш кәләш йәш кейәүҙең аяҡ урынына буш урынды күреп ҡурҡа, сирҡана, йәлләй. Эштең ниҙә икәнлегенә яҡшы төшөнгән һиҙгер егет буласаҡ ҡатынын ашыҡтырмай. Бер нисә көндән һуң, тәбиғәт ҡосағына алып сығып, ҡауышалар. Автор был күренеште айырым бер зауыҡ менән һүрәтләй: «Йылы түшәк булған, хан һарайындағы ебәк-мамыҡтарға ла алмаштырғыһыҙ урман бесәне еҫе, уларҙы оло донъя ығы-зығыһынан ҡурсалаған сыбыҡ япраҡтарының төндә күргән татлы мөхәббәт уйыны хаҡында әҙәп һаҡлап ҡына шыбырлашыуҙары, ҡыуышартындағы донъяның ниндәйҙер бөйөк эш көткәндәй саф та, моңло ла ысыҡҡа батып тынып ҡалыуы – бөтәһе лә оло мөхәббәткә фатиха кеүек тойолдо Мәргәнгә лә, Фәйрүзәгә лә» [2: 39].

Икенсеһе, торналар. Башҡорт халҡында шундай ырым йәшәй, әгәр ҙә өсмөйөшләп йылы яҡҡа китеп барған торналарға ҡарап теләк теләһәң, ул тормошҡа аша тиҙәр. Фәйрүзәһе менән ҡауышҡан иртәлә Мәргән иһә торналарҙан малай һорап ҡысҡырып ҡала. Йәштәрҙең был теләге, ысынлап та, тормошҡа аша. Яҙын торналар әйләнеп килеүгә уларҙың тәүге балалары тыуа.

Өсөнсөһө, ыҙанда ултырған, элегерәк баҫыуҙа иген сәскән ваҡытта тегеләй ҙә былай үткәндә техника тейеп зәғифләнеп бөткән имән дә «Тәңре өрөк ҡапҡанда» хикәйәһенең төп геройҙары менән

тәбиғәт берлеген күрһәтеүҙә ҙур роль уйнай. Ғөмүмән, автор символик образдар менән оҫта эш итә. «Символизм тип ауыҙ тултырып уҡ әйтеп булмайҙыр, шулай ҙа ҡайһы бер фекерҙәрҙе айырым символдар, образдар аша еткереү отошлораҡ. Уларҙың тәьҫире көслөрәк. Сәнғәттә, әҙәбиәттә кеше аңына барып етер юлдар шул тиклем күп, сәпкә дөрөҫ тоҫҡай белергә генә кәрәк. Символизм өйрәнәйем әле тип, мотлаҡ шуның әҫәрҙәрен уҡырға кәрәк тип ултырған юҡ. Ә шулай ҙа һынлы сәнғәттә был йүнәлеште бик яратам» [3: 6], – ти ул үҙе лә Салауат Әбүзәр менән әңгәмәләшкән мәҡәләләренең береһендә. Имән дә геройҙарҙың характер һыҙаттарын асыуҙа оҫта ҡуланыла. Баҡсаларының артына, кеше күҙенән ситтәрәк ултырған ошо имән янына Мәргән мунса һала. Аҙна һайын ҡатыны менән өсәр-дүртәр сәғәт мунса инеп, тәндәрен генә йәндәренә шифа ала улар. Мәргән баҡыйлыҡҡа күскәс, имән дә ҡәҙимге тормошонан артта ҡала. Был хаҡта әҫәрҙең аҙағында әйтелә: «Ул йылы ҡыш хәтәр килде. Яҙын баҡса артындағы, етемһерәп ҡалған мунса янындағы имән ниңәлер япраҡ ярырға ашыҡманы. Тамырына һыуыҡ теймәһә ярар ине... Ә йәй уртаһында, барыһын аптыратып, унда-бында ҡытыршы йәшел япраҡтары күренә башланы» [2: 71]. Тимәк был күренеш, Мәргән менән Фәйрүзә был донъянан китһәләр ҙә уларҙың тормошо балаларында дауам итеүенә ишара.

Шулай итеп, МөнирҠунафиндың «Тәңре өрөк ҡапҡанда» хикәйәһе ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлауға, кешенең тәбиғәт менән бергә булыуын күрһәтеүгә арналған әҫәр тип атарға мөмкин.

## ӘҘӘБИӘТ


1. https://kitaptar.bashkort.org/files/Мәҡәлдәр%20һәм%20әйтемдәр.pdf
2. Ҡунафин М.С. Тәңре өрөк ҡапҡанда. – Өфө: Китап, 2012. – 214 бит.
3. Әбүзәр С. Яҙыусы – замандың намыҫы ул // «Башҡортостан» гәзите. – 2016 йыл. – 18 март.
4. Әхмәтова А. МөнирҠунафиндың «Тәңре өрөк ҡапҡанда» хикәйәһендә ғаилә ҡиммәттәре / Инновационный потенциал молодежной науки: Материалы Всероссийской научной конференции 19 октября мая 2012 г. / Под ред. А.Ф. Мустаева. – Т. 2. – Уфа: Фабритек, 2012. – 36-38-се биттәр.


© *Якшимбәтова В.В., 2021*

**УДК 801.81**

*Янбаева И.И.*
*БГПУ им. М. Акмуллы, г.Уфа*

# ИСПОЛЬЗОВАНИЕ БАШКИРСКОГО ФОЛЬКЛОРА ДЛЯ ЭКОЛОГИЧЕСКОГО ВОСПИТАНИЯ ШКОЛЬНИКОВ НА УРОКАХ БАШКИРСКОЙ ЛИТЕРАТУРЫ

Изучение проблем окружающей среды, ее сохранения, вреда пагубного воздействия человека является одним из самых актуальных проблем современности. Знаменитый советский ученый Н.Н. Моисеев говорил: «Действительная угроза окружающей среде и биосфере сегодня достигла такого уровня, что приоритет духовных ценностей над материальными не оспаривается даже на научном уровне» [3: 3–6].

Представления об окружающей среде издавна хранятся в материалах культуры народа. В традиционных культурах также можно рассмотреть истоки экологических представлений народа к природе как к живому организму. Башкирский народ, как и другие этносы наделяли элементы природы различными антропоморфными чертами и переносили названия частей человеческого тела на них. Одним из наиболее древних кодов культуры считается соматический – когда человек приходит к осознанию и описанию окружающего мира через познание себя [1: 1290].

При изучении проблем окружающей среды на уроках башкирской литературы, посредством фольклорных текстов, необходимо рассматривать использование следующих понятий, которые обозначают элементы окружающей среды [5: 109]:

| | |
|---|---|
| голова (баш, түбә) | вершина горы, исток реки |
| лицо (бит) | склон горы |
| поясница (бил) | седловина горы |
| грудь (түш) | отлогий склон горы |
| руку (ҡул) | лог, ложбина горы |
| нос (морон) | отрог горы |
| горло (тамаҡ) | устье реки |
| рот (ауыҙ) | начало или конец какого-либо объекта: урман ауыҙы, мәмерйә ауыҙы |
| веко (ҡабак) | обрыв реки |

Одухотворение окружающей среды и ее объектов сопровождается наделением антропоморфными чертами. Издавна в представлениях башкирского народа природа отвечает на действия человека – «выражает благодарность» (рәхмәт әйтә), «обижается» (рәнйей), «сердится» (асыулана). Ярким примером этого являются легенды башкирского народа «Спор двух Инзеров», «Агидель и Яик», «Канлыкуль» здесь озера спорят и ревнуют, опровергая кровавые столкновения, покидают свое привычное место.

Природные объекты, которые обладают человеческими характеристиками дают реакцию на взаимодействие, соответствующую людям. Любое действие, наносящее вред, разрушающее объект природы, приводило к ответной реакции природы.

В фольклоре башкир яркое выражение нашли предписания и запреты природоохранного характера. Одним из примеров, которые хорошо показывают особенности взаимоотношений человека и окружающей среды, является традиционное обращение с водой, являющейся источником жизни [4: 56].

Вода, водная стихия, как источник плодородия и изобилия, испокон веков обожествлялась башкирами. С водой, как первоисточником всего сущего в традиционной культуре башкир, было связано множество запретов и предписаний. Так, запрещалось осквернять, загрязнять водные источники. Также как у других народов у башкир существовала пословица «Не плюй в колодец, воды пригодится напиться». Вода обожествлялась башкирами, считалось, что у водной стихии имеется свой Дух – һыу эйәһе, более того, выделялись Отец воды – Һыу атаһы и Мать воды – Һыу инәһе.

Расточительное использование воды (сарыф итеү) приравнивалось к греху: Һыуҙың хаҡы ҙур, артығын тотонорға ярамай (Цена воды велика, ее нельзя тратить больше необходимого); һыу алтындан да ҡиммәт (Вода дороже золота). Не разрешалось попусту ее выливать, использовать больше необходимого для практических нужд объема. Грязную воду после стирки выливали в определенное место во дворе (кеше аяғы баҫмаған урын – там, куда не ступает нога человека), иначе земля «обижалась» (ер рәнйей) [3: 56].

Дорога также воспринималась башкирским народом как живой объект, существовали правила обращения с дорогой: содержать в порядке, убирать с нее большие камни, палки. Практическое значение природоохранных обычаев, запретов очень часто получало

сакральное наполнение, рациональные причины заменялись иррациональными. Запреты на действия, причиняющие вред окружающему миру, объяснялись возможностью наказания со стороны высших сил. Последние обычно персонифицируются в образе духов горы, леса, реки, отдельно стоящего дерева и т.д. Но часто они объяснялись и непосредственной реакцией природы как живого организма. Говорят, что земля обижается («ер рәнйей»), либо брезгует («ер ерәнә») [2: 188].

Основы экологического сознания башкир, которые получили выражение в запретах и предписаниях, в настоящее время редко получают практическое применение. Возрождение их, включение традиционных экологических представлений в школьную программу способны восстановлению утраченной связи между человеком и природой, экологическому воспитанию подрастающего поколения.

Экологическое воспитание в современном мире является очень актуальным. Многолетнее потребительское отношение к природе привело к истощению плодородия земли, загрязнению водных ресурсов, уничтожению лесных массивов, исчезновению редких растений и животных. В совокупности с увеличением радио и электромагнитных волн, нарушение природного равновесия сделало окруажющую среду небезопансной для жизи и здоровья людей. В связи с этим настала острая необходимость вести экологическое воспитание детей с самого раннего детства. Башкирский народный фольклор как мудрость, передаваемая из глубины веков, играет здесь немалую роль, потому что воспринимается человеком органично, тепло, по-семейно, как сказки от любимой бабушки.

## ЛИТЕРАТУРА

1. Бухарова Г.Х. Антропоморфный и соматический коды культуры в моделировании ландшафта и их отражение в башкирском топонимии // Вестник Башкирского университета. – 2015. – Т.20. – № 4. – С. 1289–1294.
2. Гайсина Ф.Ф. Запреты как фольклорный жанр в традиционной культуре башкир. Дис. канд. филол. наук. – Казань, 2013. – 157 с.

3. Иҫәнгилдинә Г. Ағинәйҙәр ҙә ҡулдарына тырма алды // «Йәшлек» гәзите. – 2013. йыл – 20 сентябрь. Точка доступа: http://www.ye02.ru/ob/8384-ainyr-uldaryna-tyrma-aldy.html

4. Мозговая С.Г. Духи природы в фольклоре и литературе. – М., 2007. – 56 с.

5. Сиражитдинова Н.М. Отражение явлений природы в башкирских народных песнях и их мифологическая окрашенность (на примере песен, зафиксированных на территории нынешней Челябинской области) // Филология и человек. – 2009. – № 4. – С. 106–112.

© *Янбаева И.И., 2021*

*Научное издание*

**Научные исследования молодых ученых в области филологии и педагогики**

Сборник научных трудов

Компьютерный набор и верстка Ганиева Г.З.

*Авторы несут ответственность за достоверность материалов, изложенных в сборнике*

Подписано в набор 20.04.2021 г.
Подписано в свет 20.04.2021г.
Бумага офсетная.
Печать оперативная.
Тираж 300 экз.
Заказ № /21.

Подписано в печать 20.04.2021 г.
Формат 60x84$_{1/16}$.
Гарнитура «Times».
Уч.-изд.л. 10,0
Усл. печ.л.10,5
Цена договорная.

*Башкирский государственный педагогический университет им. М. Акмуллы: 450008, Республика Башкортостан, г.Уфа, ул. Октябрьской революции, 3-а*